ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 октябрь (карасай) 2024

№39 (1132)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Хеҙмәт тәрбиәһе кәрәк!**



2

**Ҡурайға алтынсы уйым кәрәкмәй...**





8-9

**Уҡытыусының бәхете...**



уҡыусылары менән бәхетле булыуҙалыр

11

**Мәсет һалыумы?**

Ул ауылды һаҡлап ҡалырлыҡ милли идея!



12-13

***Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 4 октябрҙән 14-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 835 һум 44 тингә яҙыла алаһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласағын да онотмағыҙ.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*АФАРИН!*

# БӘЙГЕЛӘГЕ ЕҢЕҮЕМӘ...

## "Урал батыр" ярҙам итте



**Ошо көндәрҙә Татарстандың Ҡаҙан ҡалаһында "Иң яҡшы туған тел һәм туған әҙәбиәт уҡытыусыһы" Бөтә Рәсәй конкурсына йомғаҡ яһалды. Ҡаҙандың "Адымнар" полилингваль комплексында һәм 99-сы балалар баҡсаһында илдең төрлө төбәгенән 112 педагог ярышты. "Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың туған телен үҫтереүҙең иң яҡшы тәжрибәләре" номинацияһында Өфө ҡалаһының 18-се Башҡорт балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе Әлиә Ишдәүләтова беренсе урын яуланы, ә Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылы мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Азалия Ибраһимова лауреат булды. Конкурс һәм балаларҙа башҡорт теленә ҡарата һөйөү тәрбиәләү тураһында Әлиә Риза ҡыҙы ИШДӘҮЛӘТОВА менән әңгәмәләштек.**

**Еңеүегеҙ менән тәбрикләйбеҙ. Конкурсҡа әҙерләнеүе ауыр булдымы, унан ниндәй тәьҫораттар менән ҡайттығыҙ?**

- Бик оҙайлы әҙерлек талап итте был конкурс. Беҙ яҙҙан алып уҡ әҙерләнә башланыҡ һәм тырышлығыбыҙҙың һөҙөмтәһен күреп, еңеү ҡыуанысын татып ҡайттыҡ, шөкөр. Ойоштороу кимәле айырыуса юғары булыуы, конкурсантты бер нәмә лә борсомаһын, сығышына ҡыйынлыҡ килтермәһен, тигән ҡараштан сығып эшләнеүе оҡшаны. Ә инде һөнәри конкурстың үҙенә килгәндә, ул педагогтарҙы профессиональ оҫталыҡ йәһәтенән дә, шәхес булараҡ та асыуға йүнәлтелде. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән 33 тәрбиәсе конкурстың тәүге этабында дәрес күрһәттек. Унда ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә балаларҙың иғтибарын йәлеп итеп, уларға теманы аңлатып, яңы һүҙҙәр өйрәтеп өлгөрөргә кәрәк ине. Башҡаларға "Китап", "Ғаилә", "Төҫтәр" кеүегерәк темалар булһа, миңә иң ауырҙарының береһе - "Спорт, физик культура һәм йәшәйеш хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре" тигән тема эләкте. Уны мин "Урал батыр" башҡорт халыҡ эпосына нигеҙләнеп төҙөлгән дәрес аша аңлаттым. Башҡорт теле һәм халҡы менән бөтөнләй таныш булмаған, эпосыбыҙҙы ла белмәгән балаларға был дәресте үткәреүе еңел бирелмәҫен аңлаһам да, атҡарып сыға алдыҡ. Дәрестә балаларға Урал батыр, Һомай, Аҡбуҙат, Зәрҡүм, Үгеҙ персонаждарын аңлатып, Урал батырға Йәншишмәгә юл табырға ярҙам иттек. Дәрес башында Урал батырҙың голограммаһын тоҡандырып, балаларҙы ла, баһалама ағзаларын да "аh" иттерҙек. Замана балалары алдында бына шундай заманса ҡорамалдарҙы ҡулланмай ҙа булмай шул хәҙер, беҙҙең голограммалағы Урал батырҙы барыһы ла оҡшатты. Был махсус проектор аша теләһә ниндәй һүрәтте, фотоны, видеояҙманы сағылдырып, йәнләндереп күрһәтеп була. Балалар дәрес аҙағында Урал батыр, Аҡбуҙат тураһында белде, спорт һәм физик культураға бәйле булғас, ат сабышы тигән һүҙҙе лә өйрәнделәр, бер-береһен "Афарин!" тип маҡтанылар.

Ә конкурстың икенсе һынауы Ғаилә йылына арналып, 15 лауреат ата-әсәләр өсөн ағартыу сараһы ойошторҙоҡ, беҙгә ун минут ҡына ваҡыт бирелде. Шунан 5 кеше финалға үттек һәм "Педагог менән оҫталыҡ дәресе" күрһәттек, үҙебеҙҙең эш тәжрибәһе менән уртаҡлаштыҡ. Бөтә сығыштарымды ла "Урал батыр" эпосына бәйләп яһарға тырыштым.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ӨФӨ ҠУНАҠТАРЫ*

# ҺЕҘ БӘХЕТЛЕҺЕГЕҘ...



**Сентябрҙә Өфө Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәре ижади һәм ғилми интеллигенцияһының XVII форумын ҡабул итте. Халыҡ-ара форумда төрлө илдәрҙән ижади һәм фәнни интеллигенция вәкилдәре ҡатнашты. Һәм беҙ, әлбиттә, ҡунаҡтарҙан баш ҡалабыҙ Өфө хаҡындағы фекерҙәре менән бүлешеүҙәрен һораныҡ. Ҡырғыҙстан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы янындағы Физик тәрбиә, спорт һәм мәҙәниәт республика үҙәгенең мәҙәниәт буйынса директор урынбаҫары, Ҡырғыҙстан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Берҙәмлек йондоҙҙары" Халыҡ-ара премия лауреаты Дамира АЛЫШБАЕВА:**

- Өфөгә минең икенсе тапҡыр килеүем. 7 йыл элек Башҡортостандың баш ҡалаһында булыу бәхете тейгән ине, ул ваҡытта беҙ һеҙҙә Ҡырғыҙстан Республикаһы Мәҙәниәте көндәрен үткәргән инек. 2017 йылда ла, быйыл да беҙҙе матур итеп ҡаршы алып, бөтә ерҙә лә ҡурсып ҡына алып йөрөүҙәре, республиканы төрлө яҡлап асыуҙары һәр ваҡыт яҡты хәтирәләр булып йәшәй һәм йәшәйәсәк.

**(Дауамы 2-се биттә).**

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

12+

ӨФӨ ҠУНАҠТАРЫ




# ҺЕҘ БӘХЕТЛЕҺЕГЕҘ...

**(Башы 1-се биттә).**

Был матур, йәшел ҡалаға тағы ла килеүемә бик шатмын. Әллә ни оҙаҡ ваҡыт та үтмәгән кеүек, ләкин ошо арауыҡта ла Өфөлә ҙур, һәм иң мөһиме, ыңғай үҙгәрештәр булыуы күҙгә асыҡ сағыла. Ҡала йүнсел хужа ҡулында икәнлеге әллә ҡайҙан күренә: урамдар таҙа, йорттар һәм ойошма биналары һәм уларҙың ишек алдары тәрбиәле, бөхтә. Тағы ла ҡаладағы архитектураның уйланылған, уңайлы булыуын билдәләп үткем килә. Элекке биналарға, үҙендә әллә күпме кеше яҙмышын һаҡлаған йорттарға ҡарата иғтибарҙың ҙур булыуын күреү ҡыуандыра. Ҡалала күп ҡатлы йорттар, төрлө бизнес-үҙәктәр артҡан. Шулай уҡ йәшелләндереү эштәренең әүҙем барыуы ла күренә, урамдар буйлап үҫкән ағастар "йәшәргән", ҡыуаҡ рәүешендәге сәскәләр үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә икән. Ә бына элек Өфө урамдарын биҙәп ултырған бер һәм күп йыллыҡ сәскәләр әҙәйә төшкән. Зәки Вәлиди урамындағы студенттар өсөн ишеген асҡан Өфө кампусының эшләй башлауы, һис шикһеҙ, республика һәм тотош Рәсәй фәнен үҫтереү өсөн ҙур аҙым, тип иҫәпләйем.

Үҙем мәҙәниәт өлкәһендә ҡайнаған кеше буларaҡ, ҡайҙа барһам да ошо өлкәгә иғтибар итәм. Өфөләге театр, музей, кинотеатр һәм башҡа мәҙәни усаҡтарҙың күплеге, уларҙың уңышлы эшләүе, был өлкәлә йәштәрҙең күп булыуы мәҙәниәткә ҡарата булған иғтибар тураһында һөйләй. Әлбиттә, был иғтибар баш ҡалаға ғына түгел, ә тотош республика кимәлендә булыуына шик юҡ. Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле "Донъя халыҡтары бейеүҙәре" исемле ифрат шәп концерт менән сығыш яһаны форумда ҡатнашыусылар алдында. Ансамблде ысын мәғәнәһендә республиканың йөҙөк ҡашы, тип әйтергә була. Рухланып, ҡанатланып ижад итеүселәргә ҙур уңыштар теләйем.

Шулай уҡ Башҡортостандың Милли музейында булдыҡ. Иҫ киткес хазина донъяһы музейығыҙ: ул экспонаттар байлығы, халыҡтарҙың бай тарихын туплаған мәғлүмәттәр һәм, һис шикһеҙ, бөтә күңелдәрен һалып эшләүсе музей хеҙмәткәрҙәре. Ғөмүмән алғанда, Өфө халҡының асыҡ күңелле булыуын билдәләп үткем килә. Форумдың юғары уҡыу йорттары күп тупланған төбәктә - ҡаланың тарихи үҙәгендә үтеүе бик күп йәштәрҙе осратырға мөмкинлек бирҙе. Ҡайҙа йәшлек - шунда матурлыҡ, дәрт-дарман, көс-ҡеүәт. Йәштәргә ҡарап тороуы үҙе бер кинәнес, илһам. Уларҙың барыһына ла уңышлы уҡыу һәм киләсәктә матур хеҙмәт юлы насип булһын. Бында йәшәүселәр ошондай баш ҡалаһы булыуы менән бәхетлелер, тип ышанам.

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ХЕҘМӘТ ТӘРБИӘҺЕ КӘРӘК!

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



Быйылғы йылдан башлап мәктәптәрҙә хеҙмәт дәрестәре кирене индерелеүен шатланып ҡабул иттем. Сөнки һуңғы йылдарҙа уҡыусыларҙан таҡтаны һөрттөрөргә лә ярамаған, уның өсөн ата-әсәләрҙән яҙма рәүештә рөхсәт талап ителгән абсурд ҡанундарға килеп еттек бит! Беҙҙең заманда балалар кескенә йәштән эшләп үҫте, йорт-ҡура мәшәҡәттәре тулыһынса балалар иңендә булды. Ҡашығаяҡ, иҙән, кер йыуыуҙан башлап, утын бысыу, ярыу, өйөү, кәртәһарайҙарҙы таҙартыу, малдарға һыу эсереү, ҡар көрәү, мунсаға һыу ташыу, картуф сәсеү, утау, йыйыу, йәй буйына бесән эшләү - бөтәһе лә балаларҙың ҡулы менән башҡарылды. Шул арала мәктәптәрҙә үткәрелгән өмәләрҙә ҡатнаштылар, колхоз-совхоз эштәрендә лә ярҙам иттеләр, хатта күптәр үҙ теләге менән эшкә башлап, йәй буйына байтаҡ аҡса ла туплап өлгөрә ине.

Беҙҙең ауылда башланғыс класлыҡ ҡына мәктәп булғас, бөтәбеҙ ҙә тиерлек интернатта ятып уҡыныҡ. Ә унда кластың таҡтаһын һөртөү генә түгел, дежур уҡыусы кабинеттың иҙәнен көнөнә өс тапҡыр йыуып сыға. Йоҡо бүлмәһе буйынса дежурный ҙа көнөнә бер тапҡыр йоҡо бүлмәһен йыуырға бурыслы. Оҙон коридорҙы йыуыу ярай әле айына бер тапҡыр ғына тура килә. Унан тыш, 7-се кластан башлап ашхана буйынса дежурлыҡ ҡаралған. Унда инде таңғы 5-тән тороп, 3-4 оло ҡаҙан картуф әрсейһең, көнө буйы 500-гә яҡын уҡыусыны ашатаһың, ҡашығаяҡтарын йыуаһың. Кискеһен хәлең бөтөп, йоҡларға ятаһың... Хас та армиялағы кеүек. Әммә бер кем дә зарланманы, сөнки йылдар буйына килгән тәртипте һәр кем аңлап ҡабул итте һәм эштән ҡасып йөрөүсе лә булманы.

Интернаттың үҙенең хеҙмәт лагеры ла бар ине. Йәйге каникулда 21 көн лагерҙа йәшәйһең, йәшелсә баҡсаларында эшләйһең, колхоздың сөгөлдөрөн утайһың. Шул арала шаулы пионер тормошо ла бара, төрлө күңелле саралар үткәрелә. Ныҡ эҫе көн булһа, сәғәт 6-нан тороп эшләйһең дә, көндөҙ ял итәһең... Ул саҡтарҙы һағынып һөйләргә генә ҡалды инде...

Беҙҙең илдә, үкенескә күрә, бер сиктән икенсе сиккә һуғылыу хас. Көслө совет мәғарифы емерелде, тәрбиә мәктәбе инҡар ителде - демократия урынлашты һәм балаларҙың хеҙмәтен сикләне. Сикләне генә түгел, тыйҙы. Үҙенән бер башҡа аша ҡарап торған балаһына бер биҙрә һыу ҙа күтәрергә рөхсәт итмәгән ата-әсәләр барлыҡҡа килде. Ул ғына түгел, тормош алға киткән һайын өй тирәһендә лә эш кәмене: ҡул менән бесән эшләү бөттө, йорттарға газ, һыу индерелде, кер йыуыу машиналары ҡуйылды. Балаларға эш ҡалманы. Ҡарап тороуға ҡыҙҙар-егеттәр оҙон буйлы, ләкин эш күрмәгәс, беләктәрендә көс юҡ. Бер биҙрә һыуға ла көстәре етмәй, тоҡ күтәреп картуф йә он тейәшеү тураһында һүҙ ҙә юҡ, бер осонан һин тотһаң да, икенсе яҡтан йәбешкән ике метрлы егет сайҡалып-сайҡалып китә...

Буш ваҡыт күбәйҙе һәм уны тулыһынса интернет тултырҙы... Ярай ҙа уны белем алырға, аңын үҫтерергә, нимәлер өйрәнергә ҡулланһалар, күптәр бары уйын уйнау, теләһә ниндәй негатив яңылыҡтар, зыянлы клиптар һәм фильмдар ҡарау өсөн генә файҙалана... Бер-береҥ менән аралашыу ҙа тик социаль селтәрҙәр аша ғына бара. Тағы ла бер нисә йыл ошолай барһа, балалар, йәштәр күҙгә-күҙ ҡарап аралашыуҙы, һөйләшеүҙе лә онотор ул!

Мәктәпкә генә түгел, өйгә лә хеҙмәт тәрбиәһен кире ҡайтарыу зарур! Ата-әсәгә ярҙам итеү уларҙы бер-береһенә яҡынайта ла, эшләгәндә һөйләшәһең дә, нимәнелер аңлатаһың да, кәңәшен дә бирәһең. "Беҙ эшләнеп үҫтек, балаларыбыҙ еңел йәшәһен!" - тигән стереотип ҡараш онотайыҡ әле, йәмәғәт! Хеҙмәт кенә әҙәмде кеше иткәнен онотмайыҡ! Хеҙмәттең тәмен, йәмен, ләззәтен тойоп йәшәүгә ни етә!



**Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА, яҙыусы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин армияға көҙгө саҡырыу кампанияһы тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, илдә 133 мең кеше саҡырыла. "2024 йылдың 1 октябренән 2024 йылдың 31 декабренә тиклем 18-30 йәшлек Рәсәй граждандарын хәрби хеҙмәткә саҡырырға, йәмғеһе 133 000 кеше", - тиелә документта. Әйткәндәй, быйыл йәй республиканың хәрби комиссары полковник Михаил Блажевич уҙған һәм ағымдағы саҡырылыш саралары Махсус хәрби операция үткәреү менән бәйле булмауын билдәләгәйне.

✓Башҡортостанда "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә Стәрлетамаҡ - Салауат юлында эштәр тамамланды. Стәрлетамаҡ - Салауат - Ишембай киҫелешенән алып Салауатҡа илткән 1,4 саҡрым юл участкаһында асфальт-бетон алмаштырылған, юл ситтәре нығытылған һәм билдәләр һыҙылған. Яҡын арала участка файҙаланыуға тапшырылырға тейеш. Быйыл республикала милли проект сиктәрендә 61 саҡрымдан ашыу юлды ремонтлау планлаштырыла. Мәҫәлән, Магнитогорск - Ира юлында ла ремонт эштәре бара.

✓Башҡортостанда быйылға планлаштырылған подъездарҙы ремонтлау эштәре тамамлана. Республика Башлығы Радий Хәбиров үҙенең телеграм-каналында хәбәр итеүенсә, 38 йортта 115 подъезд файҙаланыуға тапшырылған. Өфөлә бер йортта дүртәү ҡалған, унда ла эштәр тиҙҙән тамамлана. "2019 йылдан башлап Башҡортостанда 8171 подъезд тәртипкә килтерелгән. Маҡсатыбыҙ - халыҡтың тормошон мөмкин тиклем уңайлыраҡ итеү. Был эште дауам итәбеҙ", - тине Радий Хәбиров.

✓Дамир Мостафин Әлшәй районы етәксеһе вазифаһын ҡалдырҙы. Социаль селтәрҙәге сәхифәһендә ул Әлшәй районы хакимиәте башлығы вәкәләттәрен һалыуын һәм хаҡлы ялға китеүен хәбәр итте. Ул әлеге вазифаһында 20,5 йыл эшләне. Бынан алдараҡ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың күпселек муниципалитеттарында муниципаль берәмек башлыҡтарының вәкәләттәрен һалыуы тураһында хәбәр иткәйне.

✓Октябрҙә Башҡортостан халҡы Республика көнөн билдәләй. Быйыл байрам йомаға тура килә. Шулай итеп, биш көнлөк эш аҙнаһында 11 октябрҙән 13-нә тиклем ял итәбеҙ. Кесаҙна, 10 октябрҙә, эш көнө бер сәғәткә ҡыҫҡара. Ноябрҙә Халыҡтар берҙәмлеге көнө уңайынан 3-4 ноябрь ял көндәре булып тора. Шәмбе, 2 ноябрҙә, эшләйбеҙ, сөнки ял көнө 30 апрелгә күсерелде. Шуға Башҡортостан халҡы май байрамдарында 28 апрелдән 1 майға тиклем ял итә алды.

✓ *Илдең 70 төбәгендә йөҙләгән төр атамалағы дарыуҙарға ҡытлыҡ күҙәтелә. Һәм был препараттар кеше ғүмере өсөн бик мөһим иҫәпләнә, сөнки улар яман шеш һәм диабет сирҙәре өсөн кәрәк.*



БЫНАҒАЙЫШ!

**Өйҙә һыу таҙартҡыс булһа ла, шунан ағыҙып алынған һыуҙы ҙурыраҡ банкаға тултырып, бер нисә төймә аптека күмере һалып ултыртырға ғәҙәтләнгәнмен, сөнки таҙартҡыс кувшиндың кассетаһына әллә ни ышаныс юҡ. Күмер иһә һыуҙы өҫтәмә рәүештә органик ҡатышмаларҙан, хлорҙан таҙарта, тәмен яҡшырта, һыуҙы йомшарта. Былтыр күп итеп алып ҡуйған күмер бөтөп китте. Аптекаға барып, тиңдәремдә әҙерләп торһам (сөнки былтыр күмерҙең 10 төймәлеһе ни бары - 8, ә 50 төймәле ҡабы 20-30 һум тора ине), һатыусы минән бер ҡап өсөн… 78 һум һорай! Дарыуҙарҙың ҡиммәтләнгәне билдәле ине инде, әммә күмерҙең күмеренә ике тапҡырға хаҡ арттырыу минең өсөн көтөлмәгән аяҡ салыуға тиң булды.**

# КҮМЕРЕ - КҮМЕР, ҒҮМЕРЕ МӨҺИМ



Ярай, күмере - күмер, ваҡ мәсьәлә, тиер берәү, ә бит ошо факт ҡына ла дарыу препараттарының ни дәрәжәлә ҡиммәтләнеүен сағыштырырға мөмкинлек бирә түгелме? Икеөс тапҡырға! Бәлки, унан да артып киткән осраҡтар барҙыр әле. Ләкин әлеге күмер бит кеше ғүмере өсөн мөһим препараттар иҫәбенә инмәй, сөнки ул, дөрөҫөн әйткәндә, дарыу ҙа түгел, ә ниңә уға ла икеләтә хаҡ ҡуйырға - аңлашылып етмәй. Ә ниңә кеше ғүмере өсөн кәрәкле, мөһим дарыуҙарға күпләп хаҡ арттырыла? Ындай сәйәсәттең кешелекһеҙлеге нигеҙендә нимә ята? Былтыр ғына әле фармацевтика тармағы эксперттары "50 һумға тиклемге" хаҡ категорияһын билдәләгән булһа, бөгөн ундай категория юҡҡа сыҡты: 50 һумға тиклем түгел, 100-200 һумға ла бер ниндәй ҙә дарыу һатып алыу мөмкин түгел.

Рәсәйҙә бер ҡап дарыу хаҡы шул тиклем тиҙ үрләй, хатта сит ил препараттары хаҡын ҡыуып етеп, үтеп тә китте, ти аналитиктар. Мәҫәлән, беҙҙә бөгөн бер ҡап дарыуҙың уртаса хаҡы 337 һум булып, был былтырғыға ҡарағанда 16 процентҡа артығыраҡ. Ә сит ил дарыуҙары 14 процентҡа ҡиммәтләнде. Сит ил фармацевтика сеймалынан (субстанция) етештерелгән дарыуҙарға айырыуса былтыр хаҡтар күпләп арта башлаған, сөнки күпселек компоненттар 40-100 процентҡа ҡиммәтләнгән. Быйыл кеше ғүмере өсөн мөһим булған дарыуҙар (ЖНВЛП) хаҡы - 3,3, ә был исемлеккә инмәгән препараттар хаҡы 4,1 процентҡа артҡан.

Дарыу ҡиммәтләнеүгә ҡарамаҫтан, ошо араларҙа рәсәйҙәр күпләп дарыу һатып ала башлаған, имеш, сөнки 2025 йылға уғата фантастик хаҡтар вәғәҙә итәләр, тип яҙа Новые Известия порталы. Был ғауғаға күп йәһәттән һаман да шул экономиялауҙан башҡаны белмәгән Финанс министрлығының проекты нигеҙендә сығарыласаҡ Рәсәй Хөкүмәте ҡарары сәбәпсе булған. Әлегә проект рәүешендәге был ҡарар бойомға ашырыла ҡалһа, Рәсәй фармацевтика баҙарында сит ил препараттарын сикләүҙәре ихтимал. Ә быньң һөҙөмтәһе, билдәле, тап шул дарыуҙар менән дауаланыусыларҙы ауыр һәм хатта хәүефле хәл алдына ҡуя.

Бер яҡтан, әлбиттә, ватан фармакологияһын үҫтерергә тырышыу бик мөһим бурыс, ләкин Рәсәй фармацевтика сәнәғәте илдәге дарыуға булған бөтөн ихтыяжды ла ҡәнәғәтләндерә алмай бит. Был хаҡта түбәндә килтерелгән факт та яҡшы һөйләй: илдең 70 төбәгендә йөҙләгән төр атамалағы дарыуҙарға ҡытлыҡ күҙәтелә. Һәм был препараттар кеше ғүмере өсөн бик мөһим иҫәпләнә, сөнки улар яман шеш һәм диабет сирҙәре өсөн кәрәк. Өҫтәүенә, РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығы комиссияны буштай бирелә торған күп дарыуҙарҙы ғүмер өсөн мөһим препараттар иҫәбенә индермәгән. "РФ табиптары" һөнәри берекмә ағзалары менән үткәрелгән һорауҙарға яуаптарҙан күренеүенсә, илдә әле үк 400-ҙән ашыу дарыуға ҡытлыҡ күҙәтелеүе билдәләнә, шуларҙың 74-е ғүмер өсөн мөһим. Табиптар антибиотиктарға, инсулинға, шулай уҡ депрессияға, эпилектик сирҙәргә, тартышыуға ҡаршы һәм ҡан баҫымынан дарыуҙарға ҡытлыҡ булыуын билдәләй. Ҡайһы бер препараттарға ҡытлыҡ тыуыу ихтималлығы, хаҡтар ҡиммәтләнеүе һәм шуға бәйле уларҙы һатып алыу өсөн ҡаҙна сығымдарының артыуы сит ил дарыуҙарын сикләүҙән кире һөҙөмтәһе буласаҡ, ти бер ауыҙҙан фармацевтика буйынса эксперттар.

Әле ғәмәлгә ашырылмаған был проект менән ризаһыҙлыҡ белдереүсе айыҡ аҡыллыларҙың булыуы көнөлдө йылыта. Мәҫәлән, Пациенттар йәмғиәтселек берлегенең Бөтөн Рәсәй союзы проектҡа ҡаршы фекерен белдереп, РФ Хөкүмәтенә хат ебәргән һәм уйланмаған ҡарарҙың иҡтисади, шулай уҡ социаль йәһәттән ниндәй хәүеф тыуҙырыу ихтималлығы хаҡында иҫкәртте. Рәсәй дарыу препараттары етештереүселәр ассоциацияһы, шулай уҡ Фармацевтика компанияларының халыҡ-ара ассоциацияһы ла Рәсәй Хөкүмәтенә проект буйынса ризаһыҙлыҡтарын дәлилләп мөрәжәғәт итте. Был ҡарарҙың иң хәүефле һөҙөмтәһе шул буласаҡ: ул дарыу ҡытлығы килтереп тыуҙырыуы ихтимал. Әле бөгөн үк пациенттарҙың күпләп дарыу һатып алыуҙары күҙәтелә, сөнки халыҡ, айырыуса хроник сирҙәр фармацевтика баҙарының көтөлмәгән ҡылыҡтарынан биҙерәп бөткән: йә тегебыл препарат юғалып тора, йә һатыуға хаҡтары артып килә. Бөгөнгө көн, бигерәк тә тажзәхмәт сиренән һуң хроник ауырыуҙар күбәйеп киткән осорҙа, хөкүмәт, моғайын да, бындай популяр булмаған сараға йөрьәт итмәҫтәр, тип ышанғы килә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ХАЛЫҠ ДРОНДАРЫ ОСА



**Украина Рәсәй күгенә дрондар осороуын дауам итә, уларҙың һаны тәүлегенә йөҙҙән ашып китә. Мәҫәлән, 29 сентябргә ҡарай төндә Рәсәй төбәктәре өҫтөндә 125 осоусы аппарат бәреп төшөрөлдө, тип хәбәр итә РФ Оборона министрлығы: Волгоград өлкәһендә - 67, Ростовта -18, Воронеж һәм Белгород өлкәләрендә - 17-шәр, Курск, Брянск һәм Краснодарҙа берәр дрон юҡ ителде.**

Ә беҙҙекеләр ни эшләй? Әйткәндәй, ошо йылдың 23 августында Уралда дрон етештереү заводы эшләй башланы. Ул ошоға тиклем Свердловск энтузиастар төркөмө тарафынан эшләнгән һәм тиҙ арала легендаға әйерелгән "Упырь" камикадзе дроны етештереү нигеҙендә барлыҡҡа килде. Ҙур күләмдәге боеприпас алып йөрөтөргә һәләтле "Упырь" дошман блиндаждарына осоп инә, Днепрҙа хәрәкәт иткән дошман десанты кәмәләрен юҡ итә, танкыларҙы шартлата. Ошоға тиклем "Упырь" һуғыш яланында Американың Abrams танкыһын, Украинаның бер нисә бронетехникаһын юҡ итте. Сентябрҙә был пилотһыҙ аппаратты Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡараны. Үҙәк хәрби округ подразделениелары сериялы рәүештә сығарылыусы ошо дрондарҙы файҙалана. Әлеге ваҡытта Уралдронзавод "Упырь" дрондары проектын файҙаланып, ауыр хәрби дрондың "Бердыш" тигән яңы модулен сығара башлаясаҡ. Ул 20 кг йөк алып йөрөй һәм 25 км араға оса ала. Әлеге ваҡытта ул полигонда һынау үтә. Был осоусы аппараттарҙы "халыҡ дрондары" тип тә йөрөтәләр, сөнки уларҙы етештереү өсөн аҡсаны telegram-канал подписчиктарынан да йыйылар, улар хәҙер 700 меңләгән кеше, тип яҙа URA.RU порталы.

Халыҡ-ара хәлдәргә ҡарата иң тәүҙә шуны билдәләргә мөмкин: РФ Сит ил эштәре министры Сергей Лавров Нью-Йоркта булып ҡайтты. 28 сентябрь бында ул БМО-ның 79-сы Генераль Ассамблеяһында ҡатнашты һәм сығыш яһаны. Мәғлүм булыуынса, 23 сентябрҙә Израиль армияһының Бейрутҡа һөжүме һөҙөмтәһендә Ливандың "Хизбулла" ("Аллаһ партияһы") хәрби-сәйәси партияһының генераль секретары Хәсән Насралла менән уның 30-лап арҡаҙашы һәләк булды. Ошо айҡанлы Сергей Лавров "Хизбулла" лидеры һәләкәтен сәйәси үлтереү тип атаны һәм Израиль армияһы ысулдарын террористик актҡа тиңләне. Шул уҡ ваҡытта был йәһәттән АҠШ иңенә лә яуаплылыҡ ятыуын билдәләп, Ливанға ҡарата алып барылған был енәйәттең кисекмәҫтән тикшерелергә тейешлеген талап итте. "Палестинаның тыныс халҡын Америка ҡоралы менән үлтереүҙәргә сик ҡуйырға һәм палестиндарҙың үҙбилдәләнешкә законлы хоҡуҡтарын бойомға ашырыуға булышлыҡ итергә кәрәк. Американдарҙың һәр ваҡыт бөтә нәмәне лә инҡар итеүен һәм килеп сыҡҡан фактарҙы йомоп ҡалдырыу өсөн бөтәһен дә эшләйәсәктәрен беҙ аңлап торабыҙ. "Северные потоки" газ үткәргесенә ҡарата ҡылынған терактҡа мөнәсәбәттәрен фашлауға яуап итеп, тап шулай эшләнеләр ҙә инде",- тип белдерҙе Сергей Лавров.

Иран президенты Масуд Пезешкиан раҫлауынса, Насралланы үлтерергә АҠШ-тан команда бирелгән һәм Вашингтон был яуаплылыҡтан ҡаса алмаясаҡ. Төркиә Президенты Реджеп Эрдоган белдереүенсә, Израилдең геноцид сәйәсәте хәҙер Ливан менән уның халҡына йүнәлтелә. "Ҡорал һәм боеприпастар менән тәьмин итеп, башынан һыйпап торған көстәр барҙа, Израиль хөкүмәте киҫәкһеҙләнә бара",- тине Төркиә лидеры һәм БМО Хәүефһеҙлек советын Израилгә ҡарата саралар күрергә саҡырҙы.

Һәм тағы. Сит ил мәғлүмәт саралары яҙыуынса, Зеленскийҙың АҠШ-ҡа визиты Киевта көтөлгән һөҙөмтәләр бирмәне. Зеленскийҙың "Еңеү планы" хупланманы, Рәсәй төпкөлөнә һөжүмгә рөхсәт бирелмәне. Бындай уңышһыҙлыҡтың Украинала эске сәйәси әҙемтәләргә килтереүе ихтимал. Сәйәси даирәләрҙә Украинала һайлауҙар ихтималлығы хаҡында имеш-мимештәр йөрөй.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар 85 процент майҙанда йыйып алынған (1,254 миллион гектар), тип хәбәр итте вице-премьер - ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Илшат Фәзрахманов. Республиканың 23 районында игендең - 90 проценттан ашыуы, 25 районында 70 проценттан күберәге йыйылған. Ашлыҡтың тулайым төшөмө 2,65 миллион тоннанан ашыу тәшкил иткән, уртаса уңыш - гектарынан 21,5 центнер (былтыр 19 центнер).

✓Башҡортостанда миллион тонна шәкәр сөгөлдөрө йыйып алынған, тип хәбәр иттеләр Ауыл хужалығы министрлығынан. Тамыраҙыҡтар 40 процент майҙанда йыйылған - 22,8 мең гектар. Гектарынан уртаса уңыш - 438 центнер, шәкәрлелеге 15-16 процент тәшкил итә.Республиканың шәкәр заводтары 141 мең тоннанан ашыу татлы тамырҙы эшкәрткән һәм 17 мең тонна шәкәр етештергән. Ауыл хужалығы министрлығында шәкәр сөгөлдөрөнән 2,4 миллион тонна уңыш алырға йыйыналар. Был күләмде шәкәр заводтары апрелгә тиклем эшкәртеп бөтөргә тейеш, шәкәр етештереү иһә, ғәҙәттә, февралдә тамамлана.

✓Благовар районында ҡырағай йәнлектәр ҡатнашлығында юл-транспорт ваҡиғаһы теркәлгән. Аварияла инә ҡабан һәм уның өс балаһы һәләк булған. Республика Экология министрлығының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, зыян суммаһы 80 мең һум тәшкил иткән. Ведомствола юл-транспорт ваҡиғаларына юл ҡуймау өсөн тиҙлек режимын үтәргә кәрәклеген иҫкә төшөрҙөләр, айырыуса "ҡырағай хайуандар" тигән махсус билдәләр ҡуйылған участкаларҙа. Водителдәргә фажиғә урынын ҡалдырып китеү тыйыла, законға ярашлы, автоһәүәҫкәр йәнлектәр донъяһы объекттарына килтерелгән зыянды ҡапларға тейеш.

✓Учалы районында 25 сентябрҙә янғын һүндереүселәрҙе һәйкәл асыу тантанаһы үтте. Башҡортостан Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, ул янғын һүндереүселәрҙең ҡаһарманлығы хөрмәтенә Миндәк ауылының янғын бүлеге биләмәһендә ҡуйылған. Уларҙың эше - батырлыҡ, ә төп награда - ҡотҡарылған кеше ғүмере.

✓"Бәләкәй ҡалаларҙы һәм тарихи ауылдарҙы үҫтереү" Бөтә Рәсәй форумы сиктәрендә IX Бөтә Рәсәй Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу проекттары конкурсында еңеүселәр араһында Учалы ҡалаһы ла бар. Уларҙың "Урал батыр юлы" проекты концепцияһы нигеҙенә "Урал батыр" эпосы һалынған. Бында ваҡиғалар зонаһын яңыртыу, спорт майҙансыҡтарын тулыландырыу һәм балалар өсөн уйын майҙансығын тулыһынса үҙгәртеү көтөлә.

ҠЫҪҠАСА

# ЫШАНЫП ТАПШЫРҘЫЛАР

**Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесе итеп Лилиә Ғүмәрова тәғәйенләнде.** Федерация Советының пленар ултырышында сенаторҙар ошондай ҡарарҙы хупланы, тип хәбәр итә "Парламентская газета". Был ҡарар проектын Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты индерҙе. Федерация Советы рәйесе урынбаҫары Константин Косачев һүҙҙәренсә, ошо комитет ултырышында бер тауыштан уның рәйесе итеп Лилиә Ғүмәрова һайланды. Федерация Советы спикеры Валентина Матвиенко сенаторҙың ныҡышмалы хеҙмәте менән ошондай мөнәсәбәткә лайыҡ булыуын билдәләне. Лилиә Ғүмәрова - 2014 йылдан Федерация Советында Башҡортостан Республикаһы дәүләт власының башҡарма органы вәкиле. Быға тиклем ул республика Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары вазифаһын биләне. Сенатор Башҡорт дәүләт педагогия институтын, Башҡортостан дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын тамамлаған, педагогия фәндәре кандидаты.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә республиканың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованова муниципалитеттар йылытыу миҙгелен башлау көнөн үҙҙәре билдәләүен хәтергә төшөрҙө.** Бөгөнгә 44 муниципалитетта йылытыу миҙгеле башланды, улар иҫә-бендә Күмертау, Межгорье, Октябрьский, Сибай ҡалалары һәм ауыл райондары бар. Салауатта, Стәрлетамаҡта, Өфөлә, Нефтекамала, Ағиҙелдә һәм бер нисә районда (бөтәһе 19 муниципалитет) ҡарар ҡабул ителмәгән. Әлеге ваҡытта 1450 социаль әһәмиәтле учреждениеға һәм 1646 күп фатирлы йортҡа йылы бирелгән. Көндөҙ һәм төндә температураның ҡапыл үҙгәреүен иҫәпкә алып, Ирина Голованова бөтә муниципалитеттарға 1 октябрҙән - социаль объекттарға, ә 7 октябрҙән торлаҡ йорттарға йылы бирә башларға тәҡдим итте.

✓ **Рәсәй Тәфтиш комитеты Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы Алан Марзаевҡа ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатты, тип хәбәр итә Башҡортостан Тәфтиш комитетының матбуғат хеҙмәте.** Чиновник Рәсәй Федерацияһы Енәйәт кодексының 290-сы статьяһының 6-сы өлөшө буйынса айырыуса ҙур күләмдә ришүәт алыуҙа ғәйепләнә. Ведомство версияһы буйынса, Алан Марзаев юл-төҙөлөш компанияһы етәкселәренән ҡурсалау һәм юлдар һалыу өсөн дәүләт килешеүҙәрен төҙөүҙе тәьмин итеү өсөн 37 миллион һум аҡса алған. "Ришүәт биргәндә аралашсы Башҡортостандың транспорт министры вазифаһын биләгән Александр Клебанов булған. Енәйәт эшен тикшереү дауам итә", - тип белдерҙеләр Рәсәйҙең Тәфтиш комитетында.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ДЕПУТАТТАР ЯРҘАМЫ



**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары махсус операция биләмәһенә радиоэлектронлы көрәш комплекстарын һәм системаларын оҙатты, тип хәбәр итә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте.**

Билдәле булыуынса, алғы һыҙыҡҡа 200-ҙән ашыу төр техника, шул иҫәптән яңы быуын рацияһы һәм РЭБ саралары ебәрелде. "Яугирҙарҙың һәм хәрби подразделение командирҙарының һорауы буйынса йыйылған йөк фронт һыҙығына оҙатылды. РЭБ-тар бик кәрәк, шул иҫәптән алғы һыҙыҡта эшләгән һәм яралыларҙы һуғыш яланынан алып сыҡҡан санитар автомобилдәргә. Дрондар, тепловизорҙар, медицина препараттары, пиломатериалдар, йылытыу пушкалары, компрессорҙар һәм башҡалар һатып алынды. Егеттәр менән бәйләнеш тотабыҙ һәм уларҙың үтенестәрен тиҙ генә үтәргә тырышабыҙ. Яҡташтарыбыҙ хеҙмәт иткән барлыҡ подразделениеларға ярҙам итәбеҙ", - тине Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Колоннаны парламент вице-спикеры Салауат Хөсәйенов оҙатып йөрөй. Хәбәр иткәнебеҙсә, Башҡортостан депутаттары махсус хәрби операция өсөн өсөн 45 миллион һум аҡса йыйған.

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН...

**2024 йылдың 9-11 октябрендә Башҡортостанда башҡорт теле буйынса онлайн-олимпиада үтәсәк. Ул быйыл икенсе тапҡыр ойошторола.**

Ҡатнашыусылар өсөн төрлө кимәлдәге онлайн-тест һорауҙары әҙерләнгән: башланғыс кимәл - башҡорт телен яңы өйрәнә башлағандар өсөн; ирекле кимәл - башҡорт телендә иркен аралашҡан ҡатнашыусылар өсөн; өсөнсө төр һорауҙар - башҡорт теленең диалекттары менән ҡыҙыҡһынған ҡатнашыусылар өсөн. Тест һорауҙарына яуап биреү өсөн октябрҙең 9-ынан 11-енә тиклем олимпиаданың сайтына инеп теркәлеү үтергә кәрәк. Артабан өс кимәлдең береһен һайлап, 45 минут эсендә 30 һорауға яуап бирергә генә ҡала. Тест тамамланғас, һәр ҡатнашыусыға йыйылған балдар һаны менән сертификат тапшырыла. Олимпиада тамамланғандан һуң сайтта белемде үҙ аллы тикшереү өсөн һорауҙарға дөрөҫ яуаптар ҡуйыла. Әгәр ҙә теркәлеү, тест үтеү, сертификат алыу йәки техник йәһәттән ҡыйынлыҡтар тыуһа, +7(3472) 46-58-24 телефон һандары буйынса мөрәжәғәт итергә мөмкин.

Олимпиада беренсе тапҡыр 2023 йылдың октябрендә үтте. Унда Рәсәйҙең 67 төбәгенән һәм 23 сит илдән вәкилдәр ҡатнашты. Биш көн дауамында олимпиадала барлығы 27 614 кеше ҡатнашып, башланғыс кимәлдә - 17 557, ирекле кимәлдә - 8 843, башҡорт теле диалекттары буйынса 214 кеше үҙ үҙ белемен һынап ҡараған. Олимпиаданы Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү ойошмаһы һәм "Мираҫ" йәштәрҙең башланғыстарына булышлыҡ итеү фонды үткәрә. Проект Башҡортостан Башлығы гранттары фонды булышлығында Башҡортостан Башлығы грантына тормошҡа ашырыла.

# АУЫЛ МӘҘӘНИӘТЕНӘ...

**Башҡортостан Хөкүмәтендә дәүләт һәм муниципаль мәҙәниәт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә ярҙам саралары мәсьәләһе тикшерелде.**

Билдәләнеүенсә, республика Башлығының "Башҡортостан Республикаһында мәҙәниәт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренә дәүләт ярҙамы саралары тураһында" указына ярашлы, республикала дүртенсе йыл мәҙәниәт өлкәһе белгестәренә бер тапҡыр бирелә торған аҡса түләнә. 2021-2022 йылдарҙа түләүҙең күләме бер белгескә 500 мең һум тәшкил итһә, былтырҙан алып уның суммаһы 1 миллион һумға тиклем арттырылды. Аҡсаны "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" республика программаһы сиктәрендә 120 белгес алды. Быйыл тағы 30 кешегә ярҙам күрһәтеү планлаштырыла, тип хәбәр итә Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәте.

Мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Әминә Шафиҡова билдәләүенсә, мәҙәниәт, художестволы белем биреү өлкәһе белгестәренә аҡса түләүгә килешеүҙәр төҙөү өсөн муниципалитеттарҙы һайлап алыу тәртибенә ярашлы, аҡсалата түләүгә 2021 йылдан ауылдарға йәки 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларға эшкә ҡайтҡан 35 йәшкә тиклемге белгестәр дәғүә итә ала, түләүҙең күләме - 1 миллион һум. Маҡсатлы түләү белгестәрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртыуҙы, шулай уҡ шәхси автотранспорт һатып алыуҙы күҙ уңында тота.

"Республика Башлығы Радий Хәбиров тәҡдим иткән дәүләт ярҙамы менән мәҙәни-ял итеү учреждениелары һәм китапхана хеҙмәткәрҙәре, балалар сәнғәт мәктәптәре уҡытыусылары, бәләкәй ауыл музейҙары белгестәре әҙер торлаҡ йәки йорт төҙөү өсөн ер участкаһы, төҙөлөш материалдары йәки шәхси автомобиль һатып алыу, ипотека өсөн беренсе иғанә индереү йәки ипотеканы ҡаплау мөмкинлеге алды. Уларҙың уртаса 29 йәштә булыуын иҫәпкә алғанда, ярҙам ҙур булмаған ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа мәҙәниәтте үҫтереү өсөн лайыҡлы нигеҙ булып тора. Республикабыҙ тәжрибәһе "Ауыл мәҙәниәт хеҙмәткәре" федераль программаһына нигеҙ итеп алынды, ул Президент Владимир Путин ҡушыуы буйынса киләһе йылдан тотош илдә ғәмәлгә ашырыла башлай, - тине Әминә Шафиҡова.

# ҠЫРҒЫҘҘАР МЕНӘН...

**Башҡортостандың Ҡырғыҙстан менән дөйөм тауар әйләнеше 2024 йылдың 7 айы йомғаҡтары буйынса 98 процент республика экспортынан тора, тип хәбәр итте республиканың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры вазифаһын башҡарыусы Маргарита Болычева Ҡырғыҙстандың "Саясат. kg" порталының баш мөхәррире Нурғазы Анарҡолов менән осрашыуҙа.**

Экспорт эшмәкәрлеге "Халыҡ-ара кооперация һәм экспорт" милли проекты сиктәрендә алып барыла. "Башҡортостан тауарҙары араһында Ҡырғыҙстанда ягыулыҡ-энергетика комплексы һәм химия сәнәғәте продукттары, ағас, металдар һәм уларҙан эшләнгән изделиелар, шулай уҡ аҙыҡ-түлек тауарҙары һәм сеймал айырыуса ҙур һорау менән файҙаланыу. Ике республика ла дуҫлыҡ, мәҙәни, гуманитар, ғилми һәм белем биреү йүнәлештәрен үҫтереү менән ҡыҙыҡһына. Әйтәйек, 2023-2024 йылдарҙа Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарында 254 ҡырғыҙ студенты уҡый", - тип билдәләне Болычева.

Нурғазы Анарҡолов һүҙҙәренсә, портал редакцияһы Ҡырғыҙстан журналистары һәм блогерҙарының Өфөгә Халыҡ-ара бизнес аҙналығына килеү мөмкинлеген ҡарарға әҙер. Бынан алдараҡ Башҡортостандың Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе илдәренә экспорты 78 проценттан ашыу тәшкил итеүе билдәле булды.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Нариман Сабитовтың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы билдәләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Хәбәр ителеүенсә, 2020 йылдың ғинуарында Өфөлә күренекле башҡорт композиторы Нариман Сабитовтың бюсы үҙенең тарихи урынына ҡайтты. Уны 1976 йылда скульптор, Башҡортостандың халыҡ рәссамы Зилфәт Басиров эшләп, композиторҙың исемен йөрөткән 1-се балалар музыка мәктәбенә бүләк иткән.

✓Республикала йәшәүселәр бер тәүлектә аферистарға 13 миллион һумдан ашыу аҡса күсергән. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының дежур бүлеге 26 мутлашыу осрағы тураһында мәғлүмәт алған. Яңауыл районында 49 йәшлек ир интернетта тиҙ генә аҡса эшләү тураһында иғлан тапҡан. Бер аҙҙан уға үҙен хеҙмәткәрҙәр йыйыу буйынса менеджер тип таныштырған кеше шылтыратҡан. Аферист кафеға йәлеп иткән өсөн аҡса түләргә вәғәҙәләгән. Бының өсөн билдәле мессенджерҙа һылтанмалар буйынса күсеп, "лайк" ҡына ҡуйырға кәрәк булған. Һуңынан асыҡланыуынса, мутлашыусылар шул рәүешле үҙҙәре аҡса эшләгән, улар аҡса күсереү юлы менән 925 мең һум урлаған.

✓Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованова "Йәшел Башҡортостан - 2024" акцияһы көнөндә 37 меңдән ашыу кеше, шул иҫәптән 4 мең ирекмән һәм 2 мең махсус ойошма ҡатнашыуы тураһында һөйләне. "4,2 мең эре ағас һәм 65 мең башҡа үҫентеләр ултыртылды, 57 яңы тематик аллея булдырылды. Көҙгө акция барышында баш ҡала бөтәһе 2,3 меңдән күберәк ағас һәм 2 мең ҡыуаҡ ултыртыу планлаштырыла, шуларҙан 2 меңгә яҡын ағас һәм 2 мең ҡыуаҡ урман питомниктарында үҫтерелгән", - тине Голованова.

✓29 октябрҙә Өфөлә Аҫҡар Абдразаҡовтың юбилей концерты була. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбировтың мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса кәңәшсеһе, Башҡорт дәүләт академия опера һәм балет театрының художество етәксеһе Аҫҡар Абдразаҡов 2024 йылдың июлендә үҙенең 55 йәшен билдәләне. Юбилейы алдынан ул Башҡортостан Башлығы указы менән күп йыллыҡ емешле эшмәкәрлеге, мәҙәниәтте һәм сәнғәтте үҫтереүгә ҙур өлөш индергәне өсөн Халыҡтар дуҫлығы ордены менән бүләкләнде. Махсус ҡунаҡ - Владислав Сулимский (Мария театры).

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



## БЕҘҘЕҢ БАЛАЛАР...



**Фатима Мостафина исемендәге Өфө ҡала башҡорт гимназияһының 8-се класс уҡыусыһы Сөләймән Буранҡаев Новосибирскиҙа "Полиграфик технологиялар" компетенцияһы буйынса "Профессионалдар" Бөтә Рәсәй чемпионат хәрәкәтенең төбәк-ара этабында юниорҙар араһында бронза миҙал яуланы.**

Ярышта төбәк этабында еңгән бер нисә команда ҡатнашты. Улар - Новосибирск, Өфө, Можайск, Рыбинск, Мәскәү, Ырымбур, Санкт-Петербург, Ҡаҙан вәкилдәре. Әйткәндәй, "Полиграфик технологиялар" компетенцияһы эшсе йүнәлештәр исемлегенә инһә лә, заманса технологиялар, баҫма техника һәм компьютерҙар өлкәһендә тәрән белем талап итә. Башҡортостан бер нисә йыл ошо өлкәлә лайыҡлы урын биләй. Уҡыусының әсәһе Гөлнара Хәлфетдинова һүҙҙәренсә, Сөләймән был этаптың финалсылары араһында иң бәләкәйе булыуына ҡарамаҫтан, полиграфия өлкәһендәге ныҡлы белемен һәм оҫталығын күрһәтә алған. Өфөлә полиграфия уҡыу йорто - Советтар Союзы Геройы С. Бикеев исемендәге һөнәри колледж булыуы Башҡортостан командаһы өсөн ҙур уңыш. "Полиграфик технологиялар" буйынса чемпионаттың төп төркөмөндә ҡатнашыусыларҙы һәм юниорҙарҙы тап ошо колледж уҡытыусылары әҙерләй. Улар - эксперт-компатриот Әмир Йәрмөхәмәтов, "Офсет баҫмаһы" модуле уҡытыусыһы Рөстәм Ямғуров, "Һанлы баҫма" һәм "Техник хеҙмәтләндереү" модуле уҡытыусыһы Азамат Билалов, "Өҫтәмә бурыстар" модуле уҡытыусыһы Альмира Исламова. Тап уларҙың беҙҙең балалар менән эшләүе һөҙөмтәһендә Башҡортостан ошо компетенция буйынса тәүге өсәү иҫәбенә инде", - тип рәхмәт белдерҙе уҡыусының әсәһе. "Профессионалдар" Бөтә Рәсәй чемпионат хәрәкәте йыл һайын эшсе һөнәрҙәрҙең 240 тармағы һәм юғары технологияларҙың 16 йүнәлеше буйынса үткәрелә.

## ОЛО ФОРУМ КӨТӨЛӘ

**Өфөлә 17-19 октябрҙә "Рәсәй - спорт державаһы" халыҡ-ара спорт форумы барышында "Чемпиондар төнө" ойоштороla.**

"Өфө-Арена"ла Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең билдәле боксерҙары ҡатнашлығында алты алыш була. "Башҡортостанда балалар-үсмерҙәр боксын һәм юғары ҡаҙаныштар спортын үҫтереү өсөн шарттар булдырыу буйынса планлы эш алып барыла. Әлеге көндә был спорт төрө менән 9 меңдән ашыу кеше шөғөлләнә. Республика спортсылары ил ярыштарында һәм халыҡ-ара ярыштарҙа юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә, Өфөлә боксты үҫтереү үҙәге төҙөлә. Сираттағы "IBA Чемпиондар төнө"н үткәреү йәнә бер тапҡыр республикала бокстың популяр булыуын күрһәтә. Сара юғары кимәлдә үтер тип ышанам", - тип билдәләне Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры вазифаһын башҡарыусы, республиканың Бокс федерацияһы президенты Андрей Назаров.

Төп алышта яҡташыбыҙ Артур Собханғолов (6-0, KO 4) Ҡытайҙан WBC Asia Wensong Liu чемпионы менән осраша. Был иһә WBC версияһы буйынса Азия чемпионы титулын яҡлау. 17 октябрҙә Башҡортостан спортсыһы Данис Ғабдрафиҡов та алышҡа сыға. Ул 67 килограмға тиклемге ауырлыҡ категорияһында Грузия чемпионы Nikabadze Luka менән осраша.

Ике тапҡыр Рәсәй чемпионы, БРИКС уйындары-2024 еңеүсеһе Азалия Әминева ошо шоуҙа Һиндостан чемпионы Raj Sahiba менән икенсе алышын үткәрә. Шулай уҡ Өфөлә Альберт Батыргазиев (Рәсәй), Мөслим Гаджимагомедов (Рәсәй) үҙ алыштарын үткәрә.

Сараны Башҡортостан хөкүмәте, Рәсәйҙең Спорт министрлығы, Башҡортостандың Спорт министрлығы, шулай уҡ илдең Бокс федерацияһы булышлығында Халыҡ-ара бокс ассоциацияһы(IBA), Iron& Gloves Promotions һәм Dynamo Boxing Promotions ойоштора. 12+

## ҠУЛАҠСАҺЫҘ ТҮЛӘҮҘЕҢ...

**10 октябрҙән "Башавтотранс" автобустарында QR-код буйынса түләргә мөмкин. Был хаҡта предприятиела үткән матбуғат конференцияһында белдерҙеләр.**

Салонда QR-код яҙылған табличкалар ҡуйыла. Уны кондукторҙан да алырға була. Юл хаҡын түләгәндән һуң смартфонда электрон билет күренә. Пассажирҙар түләү өсөн банк ҡушымтаһы менән файҙаланырға мөмкин, шулай уҡ СБПэй ҡушымтаһы бик уңайлы, тип билдәләне Милли түләү карталары системаһының сервистарҙы үҫтереү буйынса директоры Марина Точилова.

10 декабрҙән 31 декабргә тиклем пассажирҙарға QR - код менән түләгән һайын 13 һум ташлама яһала. "Алға" картаһы һәм код буйынса түләү - төрлө сервистар, тип билдәләнеләр презентацияла. Пассажир теге йәки был ысулды һайлай ала. Мәҫәлән, "Бәхетле сәғәт" хеҙмәте менән ҡулланған осраҡта транспорт картаһы отошлораҡ. Бынан тыш, "Алға" икенсе транспортҡа (ҡала яны электричкаһынан ҡала автобусына) күсеп ултырғанда ла ғәмәлдә ҡала.

"Ҡулаҡсаһыҙ түләү - халыҡ өсөн дә, транспорт системаһы өсөн дә уңайлы, - тип билдәләне Башҡортостандың социаль карталар регистры етәксеһе Олег Романов. - QR-код буйынса түләү махсус инфраструктура - терминалдар, балансты тулыландырыу пункттарын булдырыуҙы талап итмәй. Был сервисҡа сығымдар банк эквайрингына ҡарағанда күпкә аҙыраҡ. QR-код менән һыу транспортында ла, канат юлында ла түләргә мөмкин".

Әлегә QR-кодтарҙы Өфө маршруттарында һынап ҡарау һәм һуңынан тотош республикала индереү планлаштырыла, тип хәбәр итте спикерҙар.

ҠЫҪҠАСА

## КИҘЕҮҘӘН ҺАҠЛАНЫП...

**Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫары Елена Ғәлимуллина белдереүенсә, республикала популяция иммунитетын булдырыу өсөн 2 миллион 400 мең кешегә грипҡа ҡаршы прививка яһарға кәрәк.** Бөгөнгә республикала 60 процентҡа яҡын вакцина бар, яңы поставка октябрҙә көтөлә, тип билдәләне спикер. "Милли прививкалар календары сиктәрендә мотлаҡ вакцинация үтергә тейешле граждандар категориялары билдәләнде. Улар - медицина һәм дөйөм белем биреү учреждениелары, коммуналь хужалыҡ һәм автотранспорт хеҙмәткәрҙәре, хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар, ауырлы ҡатын-ҡыҙҙар һәм башҡалар", - тип һөйләне Ғәлимуллина. Вакцинаны поликлиникаларҙа ла, күсмә медицина бригадаларында ла яһатырға мөмкин. Ауыл ерендә прививканы 2085 фельдшер-акушерлыҡ пункттарының береһендә эшләтергә була.

✓ **2025 йылға йәш ярымға тиклем бала тәрбиәләгән өсөн түләүҙең максималь күләме, 1,4 тапҡырға артып, айына 69 мең һумға етеүе ихтимал.** Был хаҡта "Рәсәй Федерацияһы Пенсия һәм социаль страховкалау фондының 2025 йылға һәм 2026, 2027 йылдарҙың план осорона бюджеты тураһында" закон проектына аңлатмалы яҙмаһынан билдәле булды. Документҡа ярашлы, 2025 йылда йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособиеның максималь күләме (әсәлек отпускыһы 140 календарь көн булған осраҡта) 794 мең һум тәшкил итергә тейеш. 1 февралдән Әсәлек капиталын 7,3 процентҡа арттырыу планлаштырыла. Әгәр быға тиклем сертификат аҡсаһы тотонолмаһа, икенсе бала өсөн 893 мең һум түләнә.

✓ **Йыл аҙағына тиклем Дәүләт Думаһына пенсионерҙарға йыл һайын 13-сө пенсия түләү тураһында закон проекты индерелә. Был хаҡта РИА Новости Дәүләт Думаһы вице-спикеры Борис Чернышовҡа һылтанма менән хәбәр итә.** "Мин әҙерләгән 13-сө пенсия түләү тураһында закон проекты актуаллеген юғалтмай, киреһенсә, уға ихтыяж арта бара. Беренсе тапҡыр хуплау тапмаған документты эшләп бөтөрөргә, эксперттар һәм коллегалар әйткән иҫкәрмәләрҙе иҫәпкә алырға һәм уны йыл аҙағына тиклем ҡабаттан ҡарауға индерергә йыйынам", - тине Чернышов. Уның һүҙҙәренсә, закон проекты көнүҙәк, сөнки икенсе йыл рәттән юғары инфляция күҙәтелә. Граждандарҙың хеҙмәт хаҡы артыуы уны өлөшләтә ҡаплай, ләкин пенсионерҙарҙың килеме үҫә барған хаҡтар артынан өлгөрмәй, тип билдәләне депутат.

✓ **Хөкүмәт күп балалы ғаиләләр өсөн ипотеканы ҡаплауға социаль түләүҙәрҙе оҙайтты.** 2024 йылдың 1 ғинуарынан 2030 йылдың 31 декабренә тиклем өсөнсө йәки артабанғы балаһы тыуған ғаиләләр 450 мең һум күләмендә түләү алырға һәм уны ипотекаға түләү рәүешендә ҡуллана аласаҡ. Был осраҡта кредит килешеүе 2031 йылдың июль айына тиклем төҙөлөргә тейеш. Тейешле ҡарар Президент указы менән ҡабул ителде, тип хәбәр иттеләр Рәсәй Хөкүмәтенең телеграм-каналында. Премьер-министр Михаил Мишустин, был ҡарар ярҙамында тағы ла бик күп Рәсәй ғаиләләре йәшәү шарттарын яҡшыртыр, тигән өмөт белдерҙе. Ул ғаиләләргә, бигерәк тә күп балалы ғаиләләргә ярҙам итеүҙе Хөкүмәттең өҫтөнлөклө йүнәлеше тип атаны.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Боланут

Боланут (кипрей узколистный, иван-чай) күп йыллыҡ үҫемлек, июнь-июлдә ҡарағусҡыл алһыу сәскә ата. Дуплау матдәләре, флавоноидтар, фитостериндар бар. Был простата биҙе аденомаһын дауалауҙа мөһим бето-ситостерин етерлек булған берҙән-бер үҫемлек. Үҫемлектең һәр өлөшө дауалы. Уны сәскә атҡан осорҙа әҙерләйҙәр, ә тамырын яҙ йәки көҙ ҡаҙып алалар. Боланут ҡурыштырыусан, ҡанды туҡтатыу, еңелсә гenә эсте йомшартыу, тынысландырыу үҙенсәлектәренә эйә.

❖ Простата биҙе аденомаһынан 2-3 балғалаҡ боланут үләненә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 5 минут төнәтеп һөҙөргә. Иртәнсәк ас ҡарынға һәм киҫкеһен йоҡлар алдынан ярты сәғәт алда 1-әр стакан эсергә.

❖ Шулай уҡ простата биҙе сиренән 10-ар өлөш боланут һәм татлы тамыр (солодка голая) тамырҙары, 3 өлөш эхинацея (эхинацея пурпурная) тамыры, 2 өлөш ҡытай лимоннигы япрағын алырға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1/2 стакан эсергә.

❖ Простата биҙе аденомаһынан тағы ла боланут, ҡайын (береза повислая), ҡайын еләге, сәтләүек ҡыуағы (лещина) япраҡтарын бер тигеҙ өлөштә алып, эшләнгән төнәтмә ярҙам итә. Әҙерләмәнең 4 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға һәм һыуытып һөҙөргә. Көн дауамында сәй урынына эсергә.

❖ Тигеҙ өлөштә боланут һәм мелисса япраҡтарын, кейәү үләнен (тимьян ползучий), сейәнең емеш һабағын алырға. Әҙерләмәнең 2 ҡалағына 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә, шунан утҡа ҡуйырға һәм ҡайнап сыҡҡас, тағы 2-3 минут тоторға. Һөҙөргә. Иртәнсәк ас ҡарынға һәм киҫкеһен йоҡларҙан 30 минут алда 1-әр стакан эсергә. Был да простата биҙе аденомаһын дауалауҙа ярҙам итә.

❖ Талсыҡҡанда, арығанда 2 ҡалаҡ боланут үләненә 0,5 литр ҡайнар һыу ҡойоп, ҡайнатырға һәм 30 минут төнәтергә. Төнәтмәне 2-3 аҙна дауамында көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1/3 стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Улар ҡайһы бер өлкәндәр кеүек "Мин һеҙҙе аңлайым, ләкин насар һөйләшәм", тип, үҙ теленән һис оялып тормай, башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтеп еткерә алмаһа ла, рәхәтләнеп туған телдә һөйләшергә әҙерҙәр.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Һыу бүҙәнәһе

**(Малый погоныш)**



Ҡупыйҙан бәләкәйерәк, шулай ҙа ҡылыҡ-холоғо тап уныҡы. Ҡабырғаларында буйлы һыҙаттары юҡ, әммә ҡойроғонон аҫты һыҙатлы. Суҡышының төбө ҡыҙыл, тәпәйҙәре - йәшел. Ата ҡоштан айырмалы рәүештә, инә ҡоштоң түҫө ҡыҙғылт һары, "йөҙө"нөң бер өлөшө, шулай уҡ муйынының алғы яғы аҡһыл. Йәш ҡоштар йәшкелт-һоро, ҡыҙғылт һары төҫтә һәм уларҙың көүҙәһенең аҫҡы яғы буй һыҙыҡлы, ә өҫкө яғы таптар менән биҙәлгән. Йәйелгән ҡанаттарының киңлеге - 34-39 см.

Ҡош туйы мәлендә "квак" тип тауышлана. Эңер һәм төнөн әүҙем. Һыу бүҙәнәһенең бәпкәһе һыуҙа йәшәй тиерлек, ул унда һыуға сума, йөҙә.

Көнбайыш Европа киңлектәренән Алтайға тиклем киң таралған.

Хәҙерге Башҡортостан территорияһында һыу бүҙәнәһе электән булырға тейеш, XIX-XX быуаттарға ҡараған фәнни яҙмалар ошоно раҫлай. Һуңғы осорҙа уны Ағиҙел, Оло Эйек, шулай уҡ Һаҡмар йылғалары үҙәндәрендә осраҡтары булды. Ырымбур өлкәһендә оя ҡороп йәшәй. Һан яғынан ҡупыйға ҡарағанда күпкә аҙыраҡ.

## Һыу себеше

**(Погоныш-крошка)**



Исеме әйтеп тороуынса, кәүҙәгә сыйыр-сыҡтан да бәләкәйерәк. Ҡойроғонон аҫты буй һыҙатлы. Суҡышында ҡыҙыл төҫ юҡ. Инә ҡош атаһына ҡарағанда һарыраҡ.

Ҡош туйы мәлендә уны "трррр" тигән саҡырыуынан танырға була. Башлыса төнөн һәм энерҙә тауышлана. Хәүеф янағанда "тьюик" һәм киҫкен итеп "крры̆к" тип ҡысҡыра. Бәпкәләрҙең йөнө йәшкелт булып сағылып торған ҡара төҫтә. 35-40 көндә улар үҙ аллы йәшәй ала, ҡанат ныҡыта.

Башҡортостанда Шиңгәккүлдә 1897 йылда теркәлә. Беҙҙең көндәрҙә Урал аръяғының ҡуйы үлән менән ҡапланған батҡыл, һаҙлыклы күлдәрендә осрай. Бик аҙ һанлы. Һыуҙа ла, ҡоро ерҙә лә йәшәй.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*АФАРИН!*

# БӘЙГЕЛӘГЕ ЕҢЕҮЕМӘ...

## "Урал батыр" ярҙам итте



(Башы 1-се биттә).

**"Урал батыр" эпосын ололарға ла аңлауы еңел түгел, ә инде балаларыбыҙҙың ҡыҙыҡһыныуы беҙҙең эпосҡобайырҙар, әкиәттәрҙән бөтөнләй ситтә. Һеҙ балаларҙың иғтибарын нисек йәлеп итәһегеҙ?**

- "Урал батыр" эпосы ысынлап та өлкәндәр өсөн дә аңлауға ауыр, уны бер тапҡыр уҡып сығыуҙан ғына мәғәнәһенә төшөнөп етерлек түгел. Шулай ҙа мин үҙем был эпос менән мәктәп йылдарынан уҡ ҡыҙыҡһынам, ваҡытында өс йыл рәттән республика кимәлендәге йәш сәсәндәр бәйгеһендә "Урал батыр"ҙы яттан һөйләп, беренсе урын яулағайным. Шул осорҙан уҡ эпосты тәрәндәнерәк аңларға тырыштым, башта уҡытыусыларым үҙҙәре белгәнсә аңлата торғайны, аҙаҡ ҡайһылар урындарын үҙемсә астым. "Урал батыр" үткән этап, тип уйлағайным, балалар баҡсаһына эшкә килгәс, ул тағы ла минең тормошома килеп инде. Сөнки бында ла бәләкәстәр араһында "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүселәр конкурсы ойошторола, унда балаларҙы әҙерләргә кәрәк. Ә инде баштан уҡ эпос буйынса аңлатыу эштәре алып бармаһаң, балаларҙы уның менән таныштырмаһаң, уларға ятлатыуы ауырға тура килә. Сөнки ҡала мөхитендә үҫкән балаға хатта туған телебеҙҙе лә аңлауы ауыр ҡайсаҡ. "Урал батыр" эпосы менән балаларҙы таныштырырға кәрәк, тигән фекергә килдем һәм уларға еңелерәк итеп, ябайлаштырыбыраҡ булһа ла һөйләйем. Йыш ҡына ҡумыҙҙа уйнап, йәки думбыра сиртеп тә һөйләп ишеттерәм. Яҡшылыҡ һәм яманлыҡ төшөнсәләрен аңлатыуҙы ла эпос аша эшләйем. Ғөмүмән, тәү сиратта "Урал батыр"ға ҡарата бәләкәй балаларҙа ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы тәүмаҡсатым, тип иҫәпләйем. Улар аҙаҡ мәктәпкә уҡырға төшкәс, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы ҡулына барып эләккәс, ауыҙ асып аптырап ултырмаһындар, ә нигеҙ белемдәре булһын, тим.

"Урал батыр" эпосы һәм башҡорт мәҙәниәте буйынса электровикторина төҙөнөк, уларға пазлдар эшләтеп алдыҡ. Балалар менән бергә төҙөгән һүҙлегебеҙ бар: тәрбиәләнеүселәр төрлө һүҙҙәр буйынса һүрәттәр төшөрҙө һәм аҫтына был нимә икәнен яҙып ҡуйҙыҡ. Ҡаф тауы, ҡамғаҡ, ҡырсынташ, тәхет тигәнерәк һүҙҙәр һүрәте менән күренеп тора хәҙер һәм балаларҙың иҫтәрендә лә нығыраҡ ҡала. "Умка" фирмаһынан эшләтеп алған "Тормош ағасы" тигән дидактик ҡулланмабыҙ балаларға бик оҡшай, үҙебеҙгә эшебеҙҙә лә ярҙам итә. Уны ла конкурста баһалама ағзалары иғтибарына тәҡдим иттек, бик ҡыҙыҡһынып ҡаранылар һәм юғары баһаланылар.

**Конкурста ҡатнашҡан коллегаларығыҙҙың сығыштарын ҡарай алдығыҙмы? Тәжрибә уртаҡлашырға мөмкинлек булдымы?**

- Ярышҡан мәлдә, әлбиттә, барыһын да күреп өлгөрөп булманы, шулай ҙа мин бер нисә тәрбиәсенең сығышына иғтибар иттем. Санкт-Петербург ҡалаһынан килгән коллегабыҙ дәрестә билдәле рус рәссамдарының картиналары ярҙамында телмәр үҫтереү өлгөһөн күрһәтте. Балалар эҙләнеүселәр булып, баштарына фонариктар тағып, һәр картинала ниҙелер эҙләп, инде ябырылып китеп ҡаранылар, ҡыҙыҡһынып ҡатнаштылар. Милли республикаларҙан килгән педагогтар үҙҙәренең милли уйындарын алып килде. Аттарға бәйле уйындар, дәрестәр күп булды. Һөйәк менән халыҡ уйындарын күрһәтте Тыванан килгән тәрбиәсе. Беҙҙә лә һөйәк ҡулланылған уйындар булған бит, тик онотолоп бара, ҡыҙғаныска күрә. Ә уларҙың балалары белә. Бына шундай башҡорт халыҡ уйындарын киң аудиторияға сығарып, популярлаштырырға кәрәк, тигән уйҙа ҡайттым. Коллегаларымдың эше ошо йәһәттән үрнәк булды.

**Замана балаларының холҡонда һеҙҙе ниндәй һыҙаттар ҡыуандыра, ҡайһылары борсоуға һала? Уларҙы балалар баҡсаһы сиктәрендә генә тәрбиәләп, үҙгәртеп буламы?**

- Балалар баҡсаһы сиктәрендә генә бындай оло, яуаплы тәрбиә эшен атҡарып сығып булмайҙыр. Ата-әсәләрҙең ярҙамынан тыш, беҙ бер нәмә лә булдыра алмаҫ инек, уларҙың ыңғай ҡарашы һәм күмәк тырышлығыбыҙ кәрәк. Балалар баҡсаһының үҙендә лә бер маҡсатҡа ярашлы дөйөм эшмәкәрлек ойошторолорға тейеш, был йәһәттән мин коллективымдан уңдым, шөкөр.

Хәҙерге балаларҙың ҡыуандырған һыҙаттары хаҡында әйткәндә иһә, уларҙың бөтә нәмәне тиҙ генә отоп алыу һәләте, ҡурҡыуһыҙ булыуы, оялмауы оҡшай. Балалар аҡ ҡағыҙ битендәй - нимә яҙаһың, шуны үҙенә һеңдерә. Улар ҡайһы бер өлкәндәр кеүек "Мин һеҙҙе аңлайым, ләкин насар һөйләшәм", тип, үҙ теленән һис оялып тормай, башҡорт өндәрен дөрөҫ әйтеп еткерә алмаһа ла, рәхәтләнеп туған телдә һөйләшергә әҙерҙәр. Тик быға өйрәтергә генә кәрәк.

Шулай ҙа борсолдорған һыҙаттары ла бар: балаларҙы китаптар ҡыҙыҡһындырмай, гаджеттарҙан айырып алыуы ауыр. Бала менән аралашҡанда уҡ ҡайһыһы өйҙә ата-әсәһе менән китап уҡый, кемеһе телевизор ҡарай, телефонда уйнауы ла күренеп тора. Бигерәк тә мин өнәп етмәгән мәғәнәһеҙ йәнһүрәттәрҙе ҡарап, шуларға ҡоролған уйындарҙы төркөмдәге иптәштәре менән уйнаған балаларҙы күреп борсолам. Бындай атыш-үлтерешкә ҡоролған уйындарына тиҙ генә ҡыҫылып, әңгәмә ойоштороп, аңлатып, иғтибарҙарын икенсегә йүнәлтә һалырға тырышам.

Телефондан айыра алмағас, беҙ балалар һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн электрон ҡушымта эшләнек: унда 16 тема тәҡдим ителә, балалар баҡсаһында өйрәнгән буйынса өйҙә атай-әсәй менән бергә белемде нығытырға мөмкин. Сөнки был балаларға китаптар таратып биреп ҡайтарһам, уны уҡып килеүҙәре икеле. Ә бына телефонда ултырғанда файҙалы контент ҡарай алалар. Ҡушымтала "Урал батыр" эпосы геройҙары балаларға төрлө "эштәр ҡуша". Унда яуаптарҙы тауышты яҙҙырып, һүрәт төшөрөп бирергә була, әйберҙәрҙең ишен табырға мөмкин. Ҡайһы бер атай-әсәйҙәр ваҡыт табып, балалар менән ултыра, ҡайһылары юҡ. Шулай ҙа аңлатыу эштәре алып барабыҙ. Башҡорт балалар баҡсаһы булһаҡ та, беҙгә йөшөгән урындары буйынса төрлө милләт балаларын алып киләләр, шуға уларҙың ата-әсәләре алдында башҡорт телен өйрәнеүҙең мөһимлеген дә дәлилләргә тура килә. Ҡаршы килеүселәр юҡ, аңғәмәләшергә һәм уртаҡ тел таба белергә генә кәрәк. Шуға башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ҡына өйрәнеп йөрөгән балаларыбыҙҙың да күҙгә күренерлек уңыштары бар, шөкөр. Былтыр шул балалар "Баш ҡала йондоҙсоҡтары" тигән конкурста "Карабай" башҡорт халыҡ йырын башҡарҙы, шул тиклем матур килеп сыҡты. Көндәлек эшебеҙҙең һөҙөмтәһен конкурстар аша күрһәтеп торабыҙ ата-әсәләргә.

Балаларыбыҙҙы йәнһүрәттәрҙән, интернеттан инде йолоп алып булмай, шуға үҙебеҙгә ошо сығанаҡтарға "үтеп инергә" күптән ваҡыт. Был эш әлегә күберәк энтузиастар, "Үҙемә һәм балама кәрәк" тигән йөштәр иңенә төшә. Киләсәктә дәүләт тарафынан күберәк иғтибар бүленеп, ошо тәңгәлдә юғары кимәлдә эш йәйелдерелһә ине. Әле беҙ Татарстандың балалар баҡсаларындағы тәрбиәселәр өсөн эшләнгән ҡулланма материалдарын күреп, хайран ҡалып ҡайттыҡ. Уларҙың кескәй балалар өсөн эшләнгән проекттары шул тиклем күп төрлө, бай. Беҙҙә лә бара ул был тәңгәлдә эш, шулай ҙа күршеләрҙән арттараҡ ҡалабыҙ һымаҡ тойолдо.

**Ата-әсәләргә әйтергә теләгән һүҙҙәрегеҙ ниндәй булыр?**

- Барыһы ла беҙҙең ҡулда. Үҙеңдең башҡортлоғонды, туған телеңде, рухыңды, мәҙәни байлығының күңел түрендә һаҡларға кәрәк. Йәмғиәттә биләгән урыныңа, һөнәреңә, белемеңә ҡарамайынса, туған илебеҙгә ҡарата балаларыбыҙҙа һөйөү тәрбиәләү мөһим. Сөнки атай-әсәйҙән тыш, был тойғоно башҡа берәү ҙә бала күңеленә һала алмай. Ә киләсәгебеҙ - балаларыбыҙ ҡулында, ул тыныс, яҡты, бәхетле, аяҙ күкле булһын өсөн беҙ, ата-әсәләр, бөгөн тырышырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлиә Риза ҡыҙы Ишдәүләтова үҙе тураһында һөйләп: "Балалар баҡсаһына йөрөгәнемдә - тәрбиәсе, мәктәптә уҡығанда - уҡытыусы булырға хыялландым", - тине. Ваҡытында үҙенең педагогтарына ғашиҡ булып, тәүҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һөнәрен үҙләштереп, артабан үҙен балалар баҡсаһында кескәйҙәрҙең йөрәгенә башҡортлоҡ рухы һалыуҙа тапҡан ул һәм бөгөн үҙе лә тәрбиәләнеүселәре өсөн үрнәк, ярҙтҡан тәрбиәсе. Илебеҙҙең киләсәге бына шундай педагогтар ҡулында булыуын сағылдырған Рәсәй кимәлендәге конкурста еңеү яулауы ла юкка ғына түгел, артабан да уға уңыштар һәм һөнәри үҫеш теләйбеҙ!**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**П.К. Эссен**

**(1817 - 1830 йылдарҙа губернатор булған).**

Тәүге губернаторҙар ҡайҙа йәшәгәндер, ишеткәнем булманы; кенәз Волконский тураһында ул йәшәгән өйҙөң Троицкий сиркәүе янында, хәҙерге ҡыҙҙар гимназияһы, ә унан алдараҡ Неплюев училищеһы урынлашҡан ерҙә булған тип һөйләйҙәр. Бында ҡала үҙәге булған; скверҙары (хәҙерге эт баҡсаһы) булған майҙан, ҡаҙна өйөнән башлап Исаков өйөнә тиклем йәйелеп ятҡан. Бындағы хәҙерге өйҙәрҙең пәйҙә булыуы мин йәшәгән ваҡытҡа тура килде.

Төбәк начальнигы өсөн был урын бик тә уңайлы була - бында ҡала үҙәге. Уңайһыҙлыҡтар ҙа була: яҡындағы баҙарҙа һәр саҡта ла тауыш, һәм даими туҙан туҙыуы. Ошо йәһәттән йылғаның бейек ярындағы урын ҡулайлыраҡ, сөнки бында һауа таҙараҡ һәм бөтөнләйгә тауыш юҡ, һәм унда үҙенең идара итеүе аҙағында кенәз Волконский күсеп бара. Ул йәшәгән өйҙөң икенсе яғынан, уға йәнәш кенә канцелярия идарасыһы Ермолаев йәшәй. Эссен да шунда йәшәй, һәм бында батша ғали йәнәптәре Александр I туҡталып китә, әммә 1835 йылға бында емерелә башлаған өйҙәр генә ҡала, шуға күрә граф Сухтелен Тимашевтың байҙарса төҙөлгән шәхси йортон һайлай, ә хужа үҙе дворяндарҙың губерна предводителе итеп һайланғас, Өфөгә китә. Шул уҡ өйҙә үҙенең беренсе тапҡыр идарасы булып эшләгән сағында граф Перовский ҙа йәшәй.

1830 йылға тиклем, мин үҙемдең тирә-яғымды аңлай башлаған саҡта, Ырымбур тығыҙ бастионлы фронтты хасил иткән ер валы менән уратып алынған ҡәлғә ине; бөтөн линия буйынса Урал йылғаһына йәнәш өлөштәрендә эскарп (оҙон тәрән соҡорҙоң эске яғынан өҫкә ҡалҡып торған текә стена. - **Тәрж. иҫк.**) һәм контр-эскарптар ер өйөмдәренән эшләнеп, кәҫ менән ҡапланған; ҡаланан сыға торған ҡапҡаларға (улар дүртәү ине: Һаҡмар, Орский, Чернореченский һәм Водяной) йәнәш торған бастиондар урындағы юнылған ҡыҙыл таштан төҙөлгән, әммә бөтөнөһө лә түгел, тик сыға торған мөйөштәрҙәгеләре, ә куртиналарҙың (ике бастионды тоташтырыусы текә вал. - **Тәрж. иҫк.**) контр-эскарптары, сатрашлы ут уларҙың хәүефһеҙленен тәьмин иткәнлектән, ерҙән яһалған. Һаҡмар ҡапҡаһы янында, хәҙерге Николаев урамы һәм зыярат артында, ике бастионға ҡаршы уларға параллель рәүештә равелиндар эшләнгән, уларҙы халыҡ иҫке йә иһә бәләкәй вал тип йөрөтә.

Водяной ҡапҡаһынан башлап, хәҙерге Водяной урамы буйлатып, Урал йылғаһына табан боролош яһап эшләнгән, 1-2 аршиндан ҡалыныраҡ булмаған таш вал була, һәм был урындың ҡалҡыу булыуын иҫәпкә алып, мылтыҡ менән оборона тотоу өсөн ҡулайлаштырылған; был вал башҡа бастиондар менән бер бейеклектә булған урындарҙа, эске яҡтан таштан эшләнгән контр-форстар (стена йә иһә бағаналар. - **Тәрж. иҫк.**) менән нығытылған. Бастион линияларында, Орский ҡапҡаһынан Чернореченский ҡарҡаһына тиклем инеүсе (эске) мөйөштәрҙә лафеттарға ҡуйылған ҡәлғә туптары торған, уларҙың калибры ярты боттан артыҡ булмағандыр, тип уйлайым.

Бына шул Ырымбурҙың бөтөн ҡоралы уны нигеҙләгәндән алып 30-сы йылдарҙың урталарына тиклем, һәм был ваҡытта элекке корпус командиры Перовский оборонаны көсәйтеү маҡсатында оборона өсөн тәғәйенләнгән казармалар төҙөтөү кәрәклеген таный; уларҙың форштадтҡа (ҡәлғәнең тышҡы яғындағы тораҡ. - **Тәрж. иҫк.**) ҡараған тар ғына, бойница формаһындағы тәҙрәләре мылтыҡ менән оборона тотоу өсөн эшләнә, уларҙың алдында бастиондарҙың бөтөн линияһы буйынса киңлеге һәм тәрәнлеге бер төрлө булған ур ҡаҙыла, ул саҡтағы фортификация ҡағиҙәләренә ярашлы, тышҡы яҡтан урҙың стеналары текә итеп киҫелгән була.

Даими гарнизон ике линия пехота батальонынан, ике рота ҡәлғә гарнизоны артиллерияһынан, хәрби эшсе инженер ротаһынан һәм хәрби ведомство буйынса эштәргә йәлеп ителгән ҡәлғә арестанттарынан тора.

Йәйге ваҡытта, 15 майҙан башлап, ғәскәрҙе көсәйтеү маҡсатында ҡыштарын Стәрлетамаҡта торған бер типтәр атлы полкы, Ырымбур казак ғәскәренең 12 орудиелы ике атлы батареяһы, бер нисә йөҙ Ырымбур казактарынан, Ставрополь ҡалмыҡтарынан, башҡорттарҙан, мишәрҙәрҙән хасил ителгән махсус командалар килтерелә; һуңғыларының һана ҡайһы саҡта бер нисә мең кешегә етә, һәм улар, башлыса, яңы биналар һалғанда йә иһә иҫке биналарҙы төҙәткәндә ҡаҙна эштәренә йәлеп ителә.

Һаҡ хеҙмәтенә ҡуйылған ғәскәрҙәр - атлы артиллерия, типтәр полкы, казактар һәм өлөшләтә башҡорттар Маяҡ тауындағы лагерҙа барактарҙа йәшәй; артиллеристар һәм типтәрҙәр йәшәгәндәре казактар һәм башҡорттарҙыҡына ҡарағанда яҡшыраҡ була, былары ситән барактарҙа көн күрә, һуңынан улар ағастан эшләнгәндәренә алмаштырыла.

Бында башҡорттарҙың эшләүе, ағас һәм башҡа материалдар өсөн аҡса биреүҙәре хаҡында мәрхүм атайымдан ишеткәнем булды. Бының сәбәбе шунда: 50 һум аҡса индергән башҡорттар хеҙмәттән азат ителеп, өйҙәренә ҡайтып китә алған. Башҡорттарҙың эшсе командалары, Маяҡта урын булмағанлыҡтан, Урал йылғаһы аръяғында, Старица яры буйында ер өйҙәрҙә, бик аҙҙары ситәндән балсыҡ менән һылап эшләнгән өйҙәрҙә йәшәгән.

Йәйге ғәскәрҙең ҡалаға инеүе һәр даим тулы церемониал рәүешендә барған. Һаҡмар ҡапҡаһынан Николаев урамы буйлап типтәрҙәр һәм артиллеристар музыка менән килеп ингән, ә улар артынан казактар, Ставрополь ҡалмыҡтары һәм башҡорттар килгән; һуңғылары милли кейемдә: оҙон еләндәрҙә һәм ҡырыйҙарынан ҡыҙыл ебәк менән ҡаймалған осло башлы кейеҙ башлыҡтарҙа.

Ғәскәрҙәр, ҡала аша үтеп, Водяной ҡапҡаһынан сыға һәм алда әйтеп кителгән урындарына бара. Йәйҙәрен ҡалаға килә торған ғәскәрҙәр составына мотлаҡ Ырымбур казак ғәскәренең форштадта йәшәгән меңле полкы, Бердский, Каменно-Озерный һәм Неженский казактары инә, быларын һуңынан Благословенный, Угольный (хәҙер Богуславский) һәм Григорьевский тораҡтарына күсерәләр, әммә уларҙы бер ҡасан да лагерҙарға сығармайҙар. Бәйән ителгәндәр тулыһынса генерал Перовскийҙы хәрби губернатор һәм корпус командиры итеп тәғәйенләгәнгә тиклемге ваҡытҡа ҡарай.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

Немец частары 7 мартта таң менән, һис бер иҫкәрмәҫтән, Грайфенбергтан көнсығыштараҡ 14-се гвардия атлы дивизияһының тылынан һөжүм итә. Ҡала өсөн ҡыҙыу алыш башлана. 14-се гвардия атлы дивизияһының 52-се гвардия атлы полкы дошмандың бер төркөмөн (300-гә яҡын һалдат һәм офицерын) тар-мар итә. 8 - 9 мартта корпус частары немецтарҙың айырым төркөмдәрен Батвитц, Грайфенберг, Трептов райондарында юҡ итә. Трептов ҡалаһы ҡырыйында дошмандың Хорстҡа табан хәрәкәт итергә ниәт тотҡан ике пехота дивизияһы ҡалдыҡтары (402-се "Померания" пехота дивизияһы һәм 15-се СС дивизияһы) менән ҡаты бәрелеш башлана. Әсиргә алынған немецтар әйтеүенсә, барса частарҙың ҡалдыҡтары Хорста тупланғас, уларҙы ҡамауҙан караблдәрҙә алып сығырға булғандар.

Гросс Цаплин тигән тораҡ пункты янындағы урманда 15-се гвардия атлы дивизияһы дошман һағы аҫтында тотолған 300-гә яҡын совет һәм союздаш илдәр ғәскәрҙәренең хәрби әсирҙәрен, Германияға көсләп алып кителгән 700-ҙән артыҡ совет һәм 100-ҙән күберәк Польша һәм Франция граждандарын ҡотҡара.

Марттың беренсе декадаһында Көнсығыш Помераниәның үҙәк өлөшөндә аяуһыҙ ҡаты бәрелештәр бара. 1-се Белорус фронтының 1-се гвардия танк армияһы 4 мартта, 90 саҡрымға алға китеп, Кольберг и Дееп участкаһында Балтик диңгеҙе ярына сыға. 1-се Белорус фронтының 2-се танк армияһының авангардта барған частары 5 мартта Каммин районында Одер йылғаһына килеп етә. Уҡсы соединениелар 65 саҡрымға тиклем дошман биләгән территорияға үтеп инә.

1-се Белорус фронтының уң ҡанаты ғәскәрҙәренең һөжүме үтә ҡыҙыу темп ала, был Польциндан көньяҡ көнбайыштараҡ немецтарҙың 10-сы СС корпусының 4 дивизияһын һәм "Теттау" корпус төркөмөн (20 меңдән артыҡ кеше) ҡамауға алыу мөмкинлеген бирә. 7 мартта улар Поляк Ғәскәренең 1-се армияһы һәм 1-се танк, 3-сө удар армияның бер өлөшө яугирҙары тарафынан тулыһынса тар-мар ителә. 8 мартта Поляк Ғәскәренең 1-се армияһы һалдаттары, Кольберг районында Балтика ярҙарына етеп, унда Польшаның милли байрағын элә.

Кольберг ҡалаһы өсөн көсөргәнешле алыштар башлана.1-се Поляк армияһына ярҙамға реактив минометтар бригадаһы ("катюшалар) килә, 18 мартта Кольберг алына һәм 1-се Белорус фронты полосаһында Балтик диңгеҙенең яр буйы дошмандан таҙартыла.

1-се Белорус фронтының уң ҡанаты ғәскәрҙәренең ныҡышмалы рәүештә алға барыуы, немец частарының ҙур юғалтыуҙарға дусар булыуы һөҙөмтәһендә дошмандың 3-сө танк армияһы соединениелары Каммин һәм Штеттин артына табан сигенә, улар, Одер йылғаһы һәм Штеттин гаване аръяғына сығып, тар-мар ителеүҙән ҡотолорға тырыша. Әммә уларҙың был ниәттәре ғәмәлгә ашмай. Немецтарҙың 3-сө танк армияһы тулыһынса тиерлек ҡырылып бөтә. Көнсығыш Помераниәның көнбайыш өлөшөн 1-се Белорус фронты ғәскәрҙәреә биләй. Дошман 103 меңгә яҡын һалдат һәм офицерын юғалта. Бик күп трофей: 188 танк һәм штурм орудиелары, 2 мең орудие һәм миномет, 2,3 мең пулемет, 22 мең автомат һәм винтовка беҙҙең ғәскәрҙәр ҡулына эләгә.

7-се гвардия атлы корпусы Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында командование ҡуйған бурыстарҙы теүәл үтәүгә өлгәшә. 11 мартта 14-се һәм 16-сы гвардия атлы дивизиялары Вест-Деепҡа һәм Хорстҡа етеп, Балтик диңгеҙе ярҙарына сыға (15-се гв. атлы дивизияһы икенсе эшелонда бара). Корпус частары башҡа соединениелар менән бергә Кольберг ҡалаһын - дошмандың Балтик диңгеҙе буйындағы эре терәк пунктын алыуҙа ҡатнаша. Операция барышында корпус фронт ғәскәрҙәренә Штаргард ҡалаһын алыуға, немецтарҙың Арнсвальд һәм Дойчкронен төркөмдәрен тар-мар итеүгә булышлыҡ итә. Корпус дошмандың Плате, Грайфенберг, Трептов райондарындағы төркөмдәрен юҡ итеүҙә ҡатнаша. Армия командованиеһы һәм СССР Хөкүмәте, ошо операцияны уңышлы тамамлауға индергән өлөшөн юғары баһалап, 7-се гвардия атлы корпусын II дәрәжә Суворов ордены менән бүләкләй. Шул уҡ орденға 14-се һәм 15-се гвардия атлы дивизиялары лайыҡ була. 16-сы гвардия атлы дивизияһының 60-сы гв. атлы полкына маҡтаулы Померания исеме бирелә. Юғары Башкомандующий бойороҡтарында корпус һәм уның дивизияларына дүрт тапҡыр рәхмәт белдерелә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Халыҡҡа телдең әһәмиәте тураһында аңлатырға кәрәк. Кемдәрҙер беҙгә килеп, ошо телдә һөйләшһендәр, тип өйрәтмәгән бит туған телебеҙҙе. Телебеҙ тәбиғи рәүештә барлыҡҡа килгән, Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән.*

# ҠУРАЙҒА АЛТЫНСЫ

**Берәүҙекенә лә оҡшамаған, донъяға ҡараштары тик үҙҙәренсә булған, замандан алдараҡ та атлаған, насар ҡылыҡтарҙан азат булған, халҡыбыҙҙың бөгөнгөһө, киләсәге өсөн йән атып йәшәгән һәм эшләгән Ейәнсура районының аҫыл ир-уҙамандары: алдынғы ҡарашлы уҡытыусы, педагог-новатор, фәйләсуф яҙарман Наил ЮЛДАШБАЕВ менән үҙе режиссер ҙа, үҙе актер ҙа булараҡ "Бер актер театры" оҫталығына эйә Радмир ДӘҮЛӘТБӘКОВ менән күптән осрашырға хыяллана инек. Хыялыбыҙ, ниһайәт, тормошҡа ашты. Улар менән күрешеп, заман, ил, халыҡ яҙмышы хаҡында ихлас әңгәмә ҡороу бәхетенә ирештек.**

**Наил, Радмир, һеҙ фекерләү кимәлегеҙ буйынса әллә ҡасан Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим, Кама, Волга йылғаларында, Каспий, Ҡара диңгеҙҙәрҙә йөҙә торған шәхестәрһегеҙ. Ә һеҙ һаман тыуған яғығыҙҙа йәшәйһегеҙ. Һүрәм, Ҡаҫмарт, Өҫкәлек йылғаларын быуып ултырабыҙ, тип уйламайһығыҙмы? Ваҡытында Ғилман Ишкинин менән Азамат Юлдашбаев оҙаҡ ваҡыт районда йәшәгәндән һуң Өфөгә килде. Улар баш ҡалаға килгәндән һуң үҙҙәрен ҙурыраҡ кимәлдә аса алдылар. Шул уҡ ваҡытта ҡасандыр баш ҡаланы яулаған яҡташығыҙ, күренекле әҙибәбеҙ Гөлсирә Ғиззәтуллина Өфөнән ауылға кире йәшәргә ҡайтты. Эшҡыуарлыҡ менән дә шөғөлләнә, ауылда йәшәп ижад та итә. Үҙегеҙҙе ҙурыраҡ кимәлгә сығырға кәрәк тип уйламайһығыҙмы? Әллә Флоберҙең: "Үҙенең кимәлендәге мөхиттән ситтә булған һәр бер талант һүнә", - тигән хәҡиҡәти һүҙен аҡыл итеп алғанһығыҙмы?**

**Радмир:** Заман һулышы хәҙер интернет, башҡа төрлө бәйләнеш саралары менән тығыҙ бәйле. Элек аралашыуҙың ундай мөмкинлектәре булманы. Беҙ хат аша аралаша торғайныҡ. Хаттың хәрәкәт тиҙлегенә ҡарап, башҡарған ғәмәлдәребеҙ менән күп нәмәгә һуңлай ҙа инек. Бөгөн телефон аша шылтыратып, хатта күҙгә-күҙ ҡарап аралашып була. Бөгөн мин, ауылда йәшәгән көйгә, Томас Римастың парадокстарға, метафораларға, символикаға ҡоролған ижады менән ҡыҙыҡһынам. Бөгөн мин ҡала кешеһенә ҡарағанда күпкә бәхетлерәкмен. Сөнки мин саф һауала, иркендә йәшәйем, ҡыҫыҡлыҡты тоймайым. Ҡала кешеһе был йәһәттән, нисектер, быуылып ятҡан һымаҡ. Гөлсирә апай, аҡыллы булғас, ҡаланың иректе сикләүенән арыныр өсөн ауылына кире ҡайтты. Ғилман, Азамат ағайҙар тәндәре Өфөлә булһа ла, күңелдәре менән был яҡҡа тартылып йәшәнеләр һәм йәшәйҙәр. Ғилман ағайҙың ғүмере ҡаланан тыуған яҡҡа ашҡынып ҡайтып килгән саҡта өҙөлдө. Был да осраҡлы түгелдер тип уйлайым.

**Наил:** Йәш ваҡытта миндә Өфөгә, Мәскәүгә, мәҙәни үҙәккә тигән ынтылыш була торғайны. Бөгөн иһә мин ҡайҙа йөрөйөм, шунда Ерҙең үҙәге, шунда цивилизация һымаҡ. Элек, нисектер, донъяның төп ваҡиғалары мотлаҡ Өфөлә, Мәскәүҙә барған һымаҡ тойола ине. Хәҙер ундай тойғонан ҡотолдом. 45 йәшкә тиклем кеше ҡайҙалыр ынтылып йәшәй, хәҙер инде минең ундай мөмкинлектәрем юҡҡа сыҡты һәм мин тыуған яғымда туҡталып ҡалдым. Балыҡҡа йөрөйөм, балыҡ ҡаптырыуҙан бигерәк, йылға, күл буйында уйланырға яратам. Бигерәк тә иртәнге тынлыҡ миңә оҡшай. Шул уҡ ваҡытта балаларым Өфөлә йәшәгәс, унда ла барып ҡайтҡылайым. Миңә унда ла оҡшай. Тәбиғәт, ауыл - өҫтә, ҡала - аҫта, тигән ҡараш миндә бөтөнләй юҡ. Миңә күмәк кешеләр менән аралашыуы оҡшай, рәхәт, шул уҡ ваҡытта үҙем генә тороп ҡалһам, тағы ла рәхәтерәк. Аҙна буйына өйҙә бер үҙем ултырһам да, үҙемде насар тоймайым...

**Шул уҡ ваҡытта тыуған яҡта йәшәүҙең яуаплығы ла ҙурҙыр. Сөнки миллионлы ҡалала йөрөгәндә һине бер кем дә танымай. Танымағас, һинең хәрәкәтеңә, ғәмәл-ҡылыҡтарыңа иғтибар итеүсе лә юҡ. Ә ауылда үҙеңде барыбер ҙә контролдә, бер сиктә, йәғни ҡалыпта тоторға тура килә...**

**Наил:** Сик - ул тышҡы билдә, ә минең сигем - эстә. Миңә "Һин яуаплы булырға тейешһең!" тип тыштан әйтәләр. Ә минең яуаплылыҡ эстән ҡысҡыра. Әйтәйек, мин балыҡ ашап ултырам, ул балыҡ мин бит ул. Урманды һаҡларға кәрәк, ул урман да - мин. Үпкәмдең яртыһы, ана, ағаста эленеп тора, сөнки ул миңә һауа бирә. Ошонда минең халҡым, туғандарым йәшәй, балаларым - минең киләсәгем. Был оло яуаплылыҡ. Хәҙер ошо йәшебеҙгә еткәс, ниндәйҙер кимәлдә халыҡ беҙгә ҡарап тора.

**Радмир:** Ауылдарҙа концерт, спектакль ҡуйғанда, тамада булып эшләгәндә, мин үҙемдең туғандарым араһында яуаплылыҡты икеләтә-өсләтә тоям. Ни өсөн? Сөнки туғандарың һине бар яҡтан да белә, улар алдында ҡыланып, үҙеңде йәшереп булмай. Барыбер ҙә һине үтәнәнүтә күрәләр. Икенсе яҡтан ҡарағанда, бер генә бирелгән ғүмереңде дөрөҫ итеп йәшәүең - иң ҙур яуаплылыҡтыр. Сөнки баҡыйлыҡҡа күсеп, Хоҙай алдына барып баҫҡас, барыһы өсөн дә яуап бирергә тура килә. "Яуаплылыҡ" һүҙенең тамырында ла "яуап" ята бит.

**Һуңғы ваҡытта барыбыҙҙы борсоған бер күренеш барлыҡҡа килде. Хатта төпкөл ауылдарыбыҙҙа ла балаларҙың теле урыҫса асыла. Күптәр бында телевизорҙы, кеҫә телефондарын ғәйепләй. Мәсьәлә тик шуларҙа ғына микән? Был бик ҙур проблема, уны нисектер ҡапыл ғына хәл итеп тә булмаған һымаҡ та. Әммә кем кем, беҙ, ошо проблемаларҙы милләттең киләсәгенә бәйләп борсолғандар, ҡулды төшөрөргә тейеш түгел. Нимәләр эшләргә була тип уйлайһығыҙ?**

**Радмир:** Беҙ һәр ваҡыт кемдәндер нимәлер көтәбеҙ. Дәүләт нимәлер эшләр тип көтөү ҙә дөрөҫ түгел. Туған тел мәсьәләһе буйынса башҡорт йәмәғәтселеге ойошорға, ҡарарҙар ҡабул итеп, уларҙы тормошҡа ашыра башларға бурыслылыр. Был йәһәттән ойошоу күҙәтелә, тик һиҙелерлек саралар тойолмай. Шул арала бер нисә быуын туған телен белмәй быуын нығыта. Ул быуын вәкилдәре үҙҙәре атай, әсәй булғас, туған телдәрен үҙ балаларына нисек өйрәтер икән?

Бер ваҡыт беҙ ун егет тупланып, шундайыраҡ ҡарарҙар ҙа ҡабул иткәйнек. Әйтәйек, унибыҙҙың береһендә һарыҡтар бар икән, ҡалғандар унан ғына алырға тейештәр. Башҡа тауарҙар, проблемалар буйынса ла шундай уҡ принцип. Әгәр ҙә минең балымды туғыҙ кеше һатып алһа, мин финанс йәһәтенән күтәрелеп ҡалам. Тағы ла унибыҙ ҙа үҙебеҙҙең туғандарҙы әйҙәһә, бер-береңде күтәреү пирамидаһы барлыҡҡа килә. Бына мин тыуған ауылымда ер алып, фермерлыҡ эшен башлағайным, шунда уҡ ҡырын ҡараусылар барлыҡҡа килде. Был йәһәттән Гөлсирә апай үҙенең уңышһыҙ эшҡыуарлыҡ тәжрибәһе тураһында һөйләгәне бар, яҙып та сыҡты. Минеңсә, беҙгә был йәһәттән ҡырҡа үҙгәрергә кәрәк. Әгәр ҙә ауылдарҙа йәшәүселәр бер-береһенә ихтирамлы, иғтибарлы мөхиткә ойошһа, бер лөғәттә аралашһа, тел мәсьәләһен дә ыңғай юҫыҡҡа бороу ҡыйын булмаҫ ине. Балаларҙың теле үҙебеҙсә асылһын өсөн уларҙың ата-әсәләренең бер-береһен ихтирам иткән, туған тел проблемаһы менән янып йәшәгән мөхите кәрәктер. Ә бит балалар өлкәндәргә ҡарап үҫә.



*Бер ваҡыт беҙ ун егет тупланып, шундайыраҡ ҡарарҙар ҙа ҡабул иткәйнек. Әйтәйек, унибыҙҙың береһендә һарыҡтар бар икән, ҡалғандар унан ғына алырға тейештәр. Башҡа тауарҙар, проблемалар буйынса ла шундай уҡ принцип. Әгәр ҙә минең балымды туғыҙ кеше һатып алһа, мин финанс йәһәтенән күтәрелеп ҡалам. Тағы ла унибыҙ ҙа үҙебеҙҙең туғандарҙы әйҙәһә, бер-береңде күтәреү пирамидаһы барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә ауылдарҙа йәшәүселәр бер-береһенә ихтирамлы, иғтибарлы мөхиткә ойошһа, бер лөғәттә аралашһа, тел мәсьәләһен дә ыңғай юҫыҡҡа бороу ҡыйын булмаҫ ине. Балаларҙың теле үҙебеҙсә асылһын өсөн уларҙың ата-әсәләренең бер-береһен ихтирам иткән, туған тел проблемаһы менән янып йәшәгән мөхите кәрәктер.*

**Наил:** Туған телебеҙ өсөн борсолоп йәшәүселәрҙең күп булыуы ҡыуаныслы. Һәр районда кәмендә ун кеше ошо мәсьәлә менән көнө-төнө янып йәшәй, көрәшә, ниндәйҙер ғәмәлдәр башҡара. Халыҡҡа телдең функцияһы, шәхес тәрбиәләүҙәге әһәмиәте тураһында аңлатыу эше алып барырға кәрәк. Кемдәрҙер беҙгә килеп, ошо телдә һөйләшһендәр, тип өйрәтмәгән бит туған телебеҙҙе. Телебеҙ тәбиғи рәүештә барлыҡҡа килгән, Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән. Тел кешелә аңды, аҡылды, фекерләүҙе формалаштыра. Литвала бишалты йыл элек телде һаҡлау буйынса митингылар күп булды. Унда урыҫ мәктәптәрен яба башлағайнылар, халыҡ күтәрелде. Митингыларҙы федераль каналдарҙан күрһәттеләр. Шул ваҡытта психолингвистар сығыш яһаны. Уларҙың фекеренсә, әгәр ҙә бала үҙ телендә уҡымай икән, уның фекерләүе барлыҡҡа килмәй. Шул саҡ был мәсьәләне бар халыҡ аңлар тип ҡыуанғайным, береһе лә быға иғтибар итмәне. Урыҫ балалары үҙ телендә уҡымаһа, фекерләүҙәре формалашмаһа, башҡа милләт балалары ла шундай уҡ хәлдә бит. Рәсәйҙә бөгөн йөҙҙән ашыу милләт үҙ телендә уҡымай, бының балаларҙың психикаһында нисек сағылыш тапҡанын ниңә ғалимдар өйрәнмәй икән? Тикшермәйҙәрме, әллә тикшереп тә әйтмәйҙәрме? Үҙ ваҡытында психолог Леонид Выготскийҙың "Телмәр һәм фекерләү" тигән ҙур хеҙмәте булды. Донъя кимәлендә беҙҙең илдең психологы итеп уны ғына беләләр. Ул һәр милләттең менталитеты тураһында ғилми эштәр зарурлығы хаҡында белдергәйне. Шуны әйтте лә, 38 йәшендә генә вафат булды. Әллә ауырып үлдеме, әллә ошо фекере булышлыҡ иттеме? Шунан алып был теманы күтәргән кеше юҡ.

Туған телдең кеше психикаһына тәьҫире хаҡында сит ил ғалимдарының хеҙмәттәре барҙыр инде ул. Литвалағы хәлдәрҙән һуң психолингвистика өлкәһендә хеҙмәттәр яҙыусылар шундуҡ барлыҡҡа килде. 90 процент милләт беҙҙә үҙ телендә уҡымай. Башҡорттар, татарҙар, удмурттар, якуттар араһында ла ундайҙар бар. Халыҡтың күпселек өлөшөнә туған телдә уҡыу бөтөнләй кәрәкмәй. Улар минең балам үҫер ҙә, берәр һөнәр алыр ҙа, магазин асыр ҙа, байманлыҡта йәшәр тип уй йөрөтә. Башҡорт балаларының урыҫ класында уҡыуына ҡарайым да, күпме буласаҡ шәхестәребеҙҙең юҡҡа сығыуын күҙаллайым. Урыҫ мөхите "комбайны" беҙҙе ашай. Беҙҙә 1974 йылда асылған 2-се мәктәптә гел урыҫса уҡыттылар. Унда башҡорт класы бөтөнләй булманы, әммә, асылда, башҡорт балалары белем алды. Ул иң яҡшы мәктәп һаналды, әммә башҡорт милләтенән булған бер ғалим да, яҙыусы ла юҡ. Ә беҙҙең районда сыҡҡан ғалимдар, яҙыусылар Үтәғолда, Иҙәштә, Байышта, Ибрайҙа, Муйнаҡта, Үргендә, Мәзиттә, Абзанда башҡорт мәктәбен тамамлаусылар. Ә Иҫәнғолдоң иң маҡталған мәктәбенән берәү ҙә юҡ. Ижади шәхестәре генә түгел, унан етәкселәр ҙә сыҡма-

✓ ***Ни өсөн япон аҡһаҡалдары латинсаға күсеүҙе 100 йылға артта ҡалыуға тиңләгән һуң? Дөрөҫ, тотош милләт яңы әлифбаға өйрәнгәнсе, 100 йыл ваҡыт кәрәк буласаҡ, был ваҡыт эсендә донъя халыҡтары 100 йыл алға китәсәк.***



# УЙЫМ КӘРӘКМӘЙ...

ған. Унан инженер-техник хеҙмәткәрҙәр йәғни урта кимәлдәге белгестәр сыға.

Әсә теле - ул тәбиғи тел, ижади фекерләү - ул тәбиғи фекерләү. Һәр бала ижадсы булып тыуа, әгәр ҙә туған телен белмәһә, был тәбиғәт ҡануны емерелә, юҡҡа сыға. Әсә телендә һөйләшкән кешенең фекерләүе һығылмалы була.

▸ **Федераль кимәлдә, Мәскәүҙән тороп туған телдәрҙе уҡытыуҙы сикләргә була, әммә ғаилә менән бер кем дә идара итә алмай. Уның үҙ ҡанундары, үҙ конституцияһы, үҙ туған теле, йолаһы. Ғаилә ҙур потенциалға эйә. Был йәһәттән ни әйтерһегеҙ?**

**Наил:** Мин үҙ ғаиләмә шундай шарт ҡуйҙым: "Өйөбөҙ - башҡорт утрауы, унда тик башҡортса һөйләшәһегеҙ, ә тышта үҙегеҙ ҡарағыҙ..." Ҡыҙым медицина университетын тамамланы, хәҙер ҙур ғына компанияла эшләй, ҡайһы ваҡыт Рәми Ғариповтың шиғырҙарын ебәреүемде һорай. Ул башҡорт, урыҫ, инглиз телдәрен ҡымыҙ һымаҡ эсә. Улым радиоэлектроника өлкәһендә хеҙмәт итә. Аспирантура тамамланы, башҡорт телендә иркен аралаша. Әйткәндәй, улым 2007 йылда Башҡорт дәүләт университетының радиофизика һәм электроника бүлегенә ике имтихан биреп инде: берәһе - физика, икенсеһе - башҡорт теле. Ул саҡта бындай мөмкинлек бар ине. Былар барыһы ла үҙ ғаиләмдә ҡуйған шарт арҡаһында килеп сыҡты. Ғаилә - туған телде һаҡлаусы бер институт ул.

**Радмир:** Мин үҙемдең балалар театрына йөрөүселәргә: "Әгәр ҙә һеҙ туған телегеҙҙе белһәгеҙ, татар, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, үзбәк телдәре кеүек бик күп телдәрҙе аңлаясаҡһығыҙ", - тип йыш ҡына әйтәм. Беҙ күп осраҡта балаларҙың туған телен белмәүен "Ул аңлай ул" тигән һылтау менән ҡапларға тырышабыҙ. Йәнәһе, аңлауы ҙур мәртәбә. Аңлауын аңлай ҙа, ҡасан һөйләшер һуң?

Мин йыш ҡына Урта Азия, Кавказ халыҡтарының урыҫ телендәге акценттарына иғтибар итәм. Хатта шул акценттарына ҡарап ҡына ла уларҙың ниндәй милләттән булыуҙарын билдәләп була. Ҡыҙыҡ, башҡорттоң урыҫса һөйләшеүендәге акценты нисегерәк яңғырай икән? Ни өсөн тигәндә, бында психологик мәл бар. Беҙ үҫкән саҡта хатта шул акцентыбыҙҙан ҡурҡып, оялып, урыҫса һөйләшмәй, юғалып ҡала торғайныҡ. Әгәр ҙә акцентыбыҙ булһа, үҙебеҙҙең башҡорт икәнлегебеҙҙе һөйләшеүебеҙҙән үк танытыр инек, тимәксемен.

▸ **Һуңғы ваҡытта ауылдар ғына түгел, совет осоронда илде индустриялаштырыу маҡсатында барлыҡҡа килгән ҡалалар яйлап юҡҡа сығырға мөмкин тиҙәр. Ҡалаларҙың үҙ проблемалары, ә бына ауылдарҙы нисек һаҡлап ҡалырға була тип уйлайһығыҙ? Беҙҙең республикала ауылды һаҡлау милләтте һаҡлауға тиң проблема...**

**Наил:** Әгәр ҙә капитализм ныҡлап үҫешә башлаһа, ауылдар яйлап кәмейәсәк. Был тәбиғи процесс. Японияла, мәҫәлән, дөйөм халыҡтың 0,3 проценты ауылда йәшәй. Америкала - 5, Англияла - 5, Францияла 11 процент халыҡ ауылда көн күрә. Беҙҙә совет осоронда 40 процент халыҡ ауылда йәшәй ине, хәҙер иһә 27 процент. Илебеҙҙә һәм донъяла барған һуңғы ваҡиғалар һөҙөмтәһендә оҙаҡ ваҡыт илебеҙҙең сиген ябып йәшәргә тура киләсәк. Тимәк, илде туйындырыу өсөн, совет осорондағы һымаҡ, ниндәйҙер ауыл хужалығы предприятиелары кәрәк буласаҡ. Был үҙ нәүбәтендә кешеләрҙе ауылға ылыҡтырасаҡ.

Беҙҙең илдә оҙаҡ ваҡыт крепостнойлыҡ хөкөм һөргән, ул үҙ нәүбәтендә ауылдарҙы һаҡлауға булышлыҡ иткән. Колхоз системаһы ла ниндәйҙер кимәлдә шул сәйәсәттең дауамы булды, йәғни крәҫтиәндәргә паспорт бирелмәүе уларға ауылды ташлап китеү мөмкинлеген сикләне. Ауылдарҙа клубтар, мәктәптәр, медицина пункттары асылды. Беҙҙең Ейәнсура районында ғына кешегә ятып дауаланыу өсөн өс дауахана эшләне ул йылдарҙа.



***Бер быуат эсендә генә беҙ ике тапҡыр яҙыуыбыҙҙы үҙгәрттек: тәүҙә ғәрәпсәнән латинсаға, шунан кириллицаға күстек. Әлбиттә, беҙ үҙ теләгебеҙ менән күсмәнек, быға мәжбүр иттеләр. Бының менән тарихыбыҙға ишектәребеҙҙе яба яҙҙыҡ. Хәҙер үҙебеҙҙең атай-олатайҙар ғәрәпсә яҙғанды ла уҡый алмайбыҙ, ҡомартҡыларыбыҙҙы сит ил, сит тел сығанағы кимәлендә өйрәнәбеҙ. Был юл, һис һүҙһеҙ, юғалыуға алып киләсәк. Япондар иһә эшкә европаса костюм кейеп бара ла, өйөнә ҡайтҡас, шундуҡ кимоноһын кейеп ала. Беҙ ҙә, әгәр ҙә һаҡланабыҙ тиһәк, үҙебеҙҙең кейемде кейеп, милли ризыҡтарыбыҙ менән туҡланып, үҙебеҙҙең йырҙарҙы йырлап, бейеүҙәрҙе бейеп йәшәп кенә киләсәккә үтә аласаҡбыҙ.***

**Радмир:** Ауылдарҙың юҡҡа сығыуына технологик процестың үҫеше лә булышлыҡ итә. Элекке менән сағыштырғанда хәҙер 5 техниканы - 1, биш кешене лә 1 кеше алыштыра. Миңеҫә, ауылды йәштәр өсөн уның иҡтисадының яңы моделен уйлап табырға кәрәктер. Бының өсөн ауылда етештерелгән тауарҙы һатыр өсөн уңайлы шарттар тыуҙырыу мөһим.

▸ **Совет осоронда дәүләт ауылға ҡаланы туйҙырған өсөн генә түгел, ауыл демографик мәсьәләне хәл иткән өсөн дә дотация бүлде. Ҡалала демографик үҫеш 0 процентҡа тиң. Сөнки ҡалала балалар һаны классик рәүештә 2-гә тиң. Бик һирәк ғаиләләрҙә 3 бала бар, әммә бер балалы ғаиләләрҙе иҫкә төшөрһәк, дөйөм балалар һаны барыбер ҙә 2 булып ҡала. Ә ауылдарҙағы ғаиләләрҙә балалар һаны иң әҙе - 3, уртасаһы - 5 бала, иң күбе 8-11 бала ине...**

**Наил:** Совет осоронда ғына түгел, әле лә ауыл дәүләтте демографик көрсөктән һаҡлап тора. Әммә йәштәрҙең күпләп ҡалаға күсеүе алдағы йылдарҙа хәлде киҫкенләштерәсәк.

**Радмир:** Кешенең комфортлы йәшәүгә ынтылыуына ла сик ҡуйып булмай. 1982 йылда режиссер Антон Васильев "Матур йәшәүҙе тыйып булмай" ("Красиво жить не запретишь") тигән фильм төшөрә. Шул мәлдән алып "Матур йәшәүҙе тыйып булмай" тигән һүҙбәйләнеш мәҡәлгә әүерелә. Ысынлап та, йәштәрҙең ҡалаға эркелеп барыуында эш урыны эҙләүҙән тыш, ошо маҡсат та ята. Тимәк, ауылдарҙы һаҡлап ҡалыр өсөн иң беренсе нәүбәттә ауылда эш урындары булдырыу һәм ундағы социаль шарттарҙы ҡаланыҡына яҡынайтыу маҡсатҡа ярашлы буласаҡ. Тап икенсе маҡсатты тормошҡа ашырыу хәҙер ауылдарҙа күҙәтелә лә инде. Хәҙер ауылда ниндәй генә өйгә инмә, унда санузел ҡуйылған, ванна, раковина, туалет бар. Ә эш урындары булдырыу өсөн дәүләт программалары кәрәк буласаҡ. Һеҙ әйткәнсә, әгәр ҙә дәүләт демографик мәсьәләне хәл итеп, үҙен һаҡлап ҡалырға теләһә, был аҙымға барырға бурыслы. Шунһыҙ, тик гастарбайтерҙар иҫәбенә генә демографик мәсьәләне хәл итергә ынтылыу дәүләтте эске яҡтан тарҡатыуға алып киләсәк. Йәғни, ситтән килеүселәр иҫәбе киҫкен сиккә етһә, улар үҙҙәренә дәүләт тарафынан нығытылған хоҡуҡ даулап, урамдарға сығасаҡ.

▸ **Нисек уйлайһығыҙ, хәҙергә еңел булмаған, әммә йәшәр өсөн ҙур мөмкинлектәр биргән тормошта заман башҡорто ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш? Ул бер үк ваҡытта башҡортлоғон да һаҡларға, икенсе яҡтан ҡарағанда, замандан да артта ҡалмаҫҡа бурыслы бит инде...**

**Радмир:** Мин балалар театры түңәрәген алып барам. Мин уларға: "Һеҙҙе бөтә донъя белергә тейеш. Әммә һеҙ донъя кимәлендә фәҡәт милли булмышығыҙ менән балҡый алаһығыҙ", - тип әйтәм йыш ҡына. Шулай ҙа беҙгә йәһүдтәр кеүек тә булырға кәрәктер.

Ә бит, йәһүдкә оҡшайбыҙ тип, асылды үҙгәртһәк, башҡорт булыуҙан туҡтайбыҙ...

**Наил:** Һәр башҡорт үҙен үҫтерергә бурыслы. Бының өсөн үҙен өйрәнергә, үҙ өҫтөндә эшләргә тейеш. Әгәр ҙә ул үҙенең һәләттәрен үҫтерә икән, барыбер күрәсәктәр. Беҙ меңәр йылдар буйы тамыр йәйгән ағастың бер өлөшө генә. Мичуринса алма үҫтергән һымаҡ, ботаҡтарыбыҙҙы ҡырҡып ташлап, икенсе ағастың ботаҡтарын үҙебеҙгә ялғап ҡуя алмайбыҙ. Япондар борондан килгән мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен тулыһынса һаҡлай. Тап шуның һөҙөмтәһендә бөгөн уларҙың ағасы сәскә атып, емеш бирә башланы. Улар хатта таяҡ менән ашауҙарын да ташламай. Үткән быуаттың етмешенсе йылдарында япондарҙың ғалимдары араһында әлифбаларын үҙгәртергә тәкдим итеүселәр булды. Ни өсөн тигәндә, япондар иероглифтарын өс йыл өйрәнәләр. Унда ике төрлө ҡараш көрәште: йәштәр латинсаға күсеүҙе хуп күрҙе, әммә аҡһаҡалдары уларға ҡаршы сыҡты. Уларҙың дәлилдәре шулай яңғыраны: әгәр ҙә беҙ яңы әлифҡа, йәғни латин хәрефтәренә күсһәк, 100 йылға артта ҡаласаҡбыҙ, һуңғы сиктә үҙебеҙҙе юғалтасаҡбыҙ. Улар хатта үҙҙәренең үҫешен һаҡлар өсөн һаман да таяҡсалар менән ашай. Таяҡсаларын алтындан эшләргә тәкдим итһәләр ҙә, улар барыбер үҙҙәренең милли йолаһын бер ваҡытта ла башҡаға алыштырмаясаҡ.

Ә беҙ иһә заман модаһынан артта ҡалмайбыҙ тип кейенергә тырышабыҙ. Бер быуат эсендә генә беҙ ике тапҡыр яҙыуыбыҙҙы үҙгәрттек: тәүҙә ғәрәпсәнән латинсаға, шунан кириллицаға күстек. Әлбиттә, беҙ үҙ теләгебеҙ менән күсмәнек, быға мәжбүр иттеләр. Бының менән тарихыбыҙға ишектәребеҙҙе яба яҙҙыҡ. Хәҙер үҙебеҙҙең атай-олатайҙар ғәрәпсә яҙғанды ла уҡый алмайбыҙ, ҡомартҡыларыбыҙҙы сит ил, сит тел сығанағы кимәлендә өйрәнәбеҙ. Был юл, һис һүҙһеҙ, юғалыуға алып киләсәк. Япондар иһә эшкә европаса костюм кейеп бара ла, өйөнә ҡайтҡас, шундуҡ кимоноһын кейеп ала. Беҙ ҙә, әгәр ҙә һаҡланабыҙ тиһәк, үҙебеҙҙең кейемде кейеп, милли ризыҡтарыбыҙ менән туҡланып, үҙебеҙҙең йырҙарҙы йырлап, бейеүҙәрҙе бейеп йәшәп кенә киләсәккә үтә аласаҡбыҙ. Ниңә, мәҫәлән, башҡорт балын донъя кимәлендәге башҡорт бизнесы кимәленә күтәрмәҫкә? Ҡурайға алтынсы уйым кәрәкмәй. Үҙебеҙҙең милли стерженды һаҡлаһаҡ, үҫтерһәк кенә беҙ ҡасан да булһа тормошобоҙҙо сәскә аттыра алырбыҙ. Ни өсөн япон аҡһаҡалдары латинсаға күсеүҙе 100 йылға артта ҡалыуға тиңләгән һуң? Дөрөҫ, тотош милләт яңы әлифбаға өйрәнгәнсе, 100 йыл ваҡыт кәрәк буласаҡ, был ваҡыт эсендә донъя халыҡтары 100 йыл алға китәсәк. Хәҙер беҙ кириллицаға өйрәндек, башҡа төрлөгә күсеү хаҡында уйларға ла ярамай.

**Радмир:** Ҡурайға алтынсы уйымды уйып маташыусылар ҙа бар бит... Эйе, беҙ йортобоҙға реставрация яһау урынына уны нигеҙенә тиклем емереп, алып ташлап, яңы урында, яңы нигеҙгә йорт һалып маташҡан кеүекбеҙ.

**Наил:** Тырым-тырағайбыҙ. Беҙгә барыбыҙҙы берҙәм итерлек идея, философия кәрәк. Әммә был барыбыҙға ла бер төрлө үҫешергә кәрәк тигәнде аңлатмай. Унан тыш, һәр ҡайһыбыҙ үҫешһә, дөйөм милләттә үҫеш буласаҡ. Ошо рәүешле бөтә милләтте үҫтереү философияһы барлыҡҡа килер ине.

Мәскәү ниндәй күлдәк кейергә ҡушһа, кейәйек тә, эстән үҙебеҙ булып ҡалайыҡ. Һәр милләттең халҡы өсөн көрәшеп, янып йәшәгән 5 процент самаһы шәхестәре бар. Шул етәлер. Ҡалғандар ҡәҙимге тормош менән йәшәй, әммә улар барыбер ҙә ана шул 5 процентҡа ҡарап тора. Милләттең тәнендәге иммунитетты тәшкил итә ул 5 процент. Беҙгә ниндәй вазифа йөкмәтелгәнен аңлап йәшәйек, егеттәр.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Шул ваҡыт төн тынлығын ярып, веранданан ризаһыҙ тауыш яңғыраны:*
***- Башында уҡыуымы тиһәм, уйын да егет. Ҡор-р-оғор!..***






Егет киске уйын мәлен еткерә алмай бер булды. Уҡып та, ятып та ҡараны. Киске уйынға тиклем дүрт сәғәттән ваҡыт дүрт көндәй тойолдо, пар алмалай ике һылыу күҙ алдынан китмәне. Осрашырға килерме Гөлнур? Әллә ҡарлуғастай етеҙ һәм дә шат, шаян туғанымы?.. Айнур башҡаса түҙеп тора алмай, Асалының зифа ҡайындар үҫкән ял баҡсаһына ҡарай ашҡынып атланы. Ғишығы ныҡтың йәне тынысһыҙ инде, мөхәббәте күңеленә һыймай, һөйгәне йәненән артыҡ тойола. Ҡайындар араһында Гөлнурҙы уйлап йөрөй торғас, әңер етеп, мәҙе лә төштө, бейеү майҙансығында уттар ҡабынды, парк йәш-елкенсәк менән тулды. Егет ҡара ҡашын һурып алырҙай булып көттө. Ана, киләләр, икәүләп киләләр! Айнурҙың уларҙан күҙе китмәй, икеһе лә күңеленә ятышлы. Шуға ла ул уңайһыҙланып ҡына:

- Хәйерле кис, ҡыҙҙар, - тигән булды.

- Хәйерле кис. Мин - Гөлназ, йәнәшемдә - Гөлнур. Беҙ - игеҙҙәр, мин бер нисә минутҡа ғына кесемен һәм төҫкә ағыраҡмын. Башҡаса бутама беҙҙе, еҙнәй, - тине лә юҡ та булды шаталаҡ ҡыҙ.

Айнур Гөлнурҙы әйләнеп тә, тыпырлатып та бейергә саҡырҙы, шунан вальсҡа әйҙәне. Икеһенең дә торошо, йөрөшө килешле. Ашыҡмай ғына әйләнәләр талғын көйгә. Ғашиҡтарға вальс йәтеш. Гөлнурҙың йылымыс ҡулы Айнурҙың бөтә тәненә иҙрәткес рәхәтлек бирә, сәстәренән аңҡыған хушбуй еҫе күңелен ләззәткә талдыра, томбойоҡтай түштәренең ҡағылып китеүе әллә нишләтә, телһеҙ итә. Һөйөү наҙын һүҙһеҙ ҙә тойоп, һоҡланғыс пар булып, моң, иҫерткес хис тулҡынында йөҙәләр ҙә йөҙәләр. Һөйгәненә бағып, онотолоп, мөхәббәт сәхрәһендә таң тыуғансы гиҙергә ине лә Гөлнур иҫкә килтерҙе:

- Айнур, ҡайтайыҡ. Әсәйем төн уртаһына тиклем йөрөгәнде яратмай, бик уҫал.

Ихатаға ингәс, егет йәһәт кенә йәренән айырылырға теләмәне, уның ҡулын ҡыҫыбыраҡ тотто. Ышанырғамы-ышанмаҫҡамы, ҡаршыһында - йәннәт хурылай һылыу, һөйкөмлө ҡыҙ. Төндәй ҡара сәстәр, нур сәскән күҙҙәр, тамылйып бешкән сейәләй ирендәр... Ах, был ирендәр! Ай яҡтыһында, әйтерһең, ҡәҙимге ер ҡыҙы түгел, ожмах фәрештәһе тора. Егет тамам сихырланып, хискә тулышып, "фәрештә"не ҡосағына тартты, илекһеп, ләззәтләнеп, тамылйыған "сейәләр"ҙе татыны һәм "Мин һине үлеп яратам, мин һине бер кемгә лә бирмәйем, гөлкәйем", тип бышылданы. Күҙҙәре лә, күңеле лә һөйә уның. Гөлкәйе быны тойҙо. Ҡош - аяғынан, ҡыҙ ирененән эләгә, тигәндәй, үҙе лә егеткә һырыҡты. Шул ваҡыт төн тынлығын ярып, веранданан ризаһыҙ тауыш яңғыраны:

- Башында уҡыуымы тиһәм, уйын да егет. Ҡор-р-оғор!..

- Әс-с-әйем... - "Фәрештә" ҡосаҡтан ысҡынып, йылп итеп ҡалды.

* * *

Һай, ваҡыттың елдәй иҫкәне. Ете йыл ете көндәй ҙә тойолмай үтеп тә бара. Айнур медицина институтын тамамлап, Урал ҡасабаһында гөлкәйе менән күк күгәрсендәрҙәй гөрләшеп донъя көтә. Уның менән осрашҡан мәлдә: "Был кәүҙәгә баҙыҡ ҡыҙҙы кәләш итеп алһам, шундуҡ игеҙ бала табыр микән?" - тип юрағаны юш килде, Гөлнуры, күҙ нуры, ул да, ҡыҙ ҙа тапты. Аллаһы Тәғәлә теләгән кешегә ҡыҙ балалар, теләгән кешегә ир балалар бирермен, тигән. Ул иһә Гөлнур менән Айнурға икеһен бер юлы бирҙе. Сабыйҙар тәбиғи аҡ (һөт) эсеп, теремек вә сәләмәт булһын, нығынһын, утыҡһын тип, Айнур ҡалаға юлланмай, ауыл ерен, ҙур хужалыҡ үҙәген һайланы, һауын һыйыр һатып алды. Аллаға шөкөр, игеҙҙәр туп һымаҡ тәгәрәп, һикереп үҫеп килә. Инә ҡулы - им, тип, Гөлнурға ғына бәпестәрен бәпләү өсөн институтта ситтән тороп уҡыуын бер аҙға кисектереп торорға тура килде. Бына әле йәйге имтихандарҙы бирергә барырға саҡырыу килде.

Ни эшләргә? Гөлнур уйға ҡалды. Донъя ҡарарға кеше кәрәк. Һыйыр һауырға, бер саҡрымдай ергә көтөүгә ҡыуырға, балаларҙы туйындырырға, йыуындырырға, кейемдәрен йыуырға...

Дауахана эшенән бушамаған иренә бер үҙенә генә ауыр буласаҡ. Әсәйҙе саҡырырға тура килер, моғайын. Ләкин килерме икән? Килмәһә... Бер ай элек кенә асыуланып ҡайтып киткәйне.

Гөлнурҙың да хәстәре күп. Мәктәп хәстәре, донъя мәшәҡәте, ығы-зығыһы. Балалар уҡытыу, дәрестәргә әҙерләнеү, дәфтәр тикшереү хәлде ала. Өй эштәренә ваҡыты ла етмәй, күңеле лә төшмәй ҡуя. Әсәһе иһә ороша:

- Уҡытыусы кешенең өйө ошолай буламы? Һис күңелгә ятмай. Йәм, күркәмлек юҡ. Әйбер-ҡараң иплəп һалынмаған, һауыт-һабаң һарғайған, ашлы һыуың түгелмәгән...

Әйләнгән һайын ниндәйҙер кәмселек, етешһеҙлек таба ла тора. Мендәр, юрған тыштарын йыуып элгән дә тағы битәрләй:

- Әпсәң алтмышҡа етһә, ҡол кәрәкмәй, тиеүҙәре хаҡ икән. Донъяңды мин килеп иплəгәндә көтөп ятаһың. Мин йәш саҡта барыһына ла өлгөрә торғайным.

Ныҡ әрләгәс, тамам йәненә тейгәс, Гөлнур түҙмәне, әйтте лә һалды:

- Әсәй, һин беҙҙә ятып ялҡып, ейән-ейәнсәрҙәрҙән йонсоп, биҙрәп киттең шикелле. Бында янып-көйөп йөрөгәнсе, ҡайт Асалыңа, үҙ өйөңдә һәйбәтерәк булыр.

Әлбиттә, әсәһе ныҡ үпкәләне. Баланың буйын ғына түгел, аҡылын да үҫтереү мөһимлегенә ишараланы. Әйбер-һәйберен йыйғас, Гөлнур ишетерлек итеп, әҫәрләнеп әйтте:

- Һин, кейәү, белеп тор, уңған ҡәйнәләрҙән һәлкәү, һәпрә ҡыҙҙар тыуа. Шуға ла бисәңде әрләгәнгә аптырама. Этеп-төртөп тормаһаң, бөтөнләй аламаһына батыуы ихтимал...

Бына хәҙер шелтәләгән, битәрләгән әсәһе кәрәк, бик тә кәрәк. Икеле-микеле уйҙар менән Гөлнур Асалыға шылтыратты:

- Әсәй, иҫәнме.

- Иҫән, иҫән... Иҫеңә төштөммө ни?

- Дорфа һөйләшә, һаман кисермәгән, - тип эстән генә уйланы Гөлнур.

- Әсәй, әсәй, ярай инде, ғәфү ит. Мин бер айға сессияға китәм. Кил, донъяға күҙ-ҡолаҡ булып тор.

- Әпсәңде тыңламай, уҡып бөтмәй, ниңә кейәүгә сыҡтың?. Бейә кешнәмәйсә, айғыр тешләмәй. Ваҡыты еткәс кешнәр инең. Үҙегеҙ табыштығыҙ, ҡауыштығыҙ, донъяғыҙҙы ла үҙегеҙ көтөгөҙ. Хуш!

Уҫал, һай, уҫал әсәһе. Әйтһә, үҙәккә үткәргәнсе әйтә лә ҡуя. Ҡыҙҙарын яңғыҙы үҫтергәс, уларға ҡаты ҡул, сәнскәкле тәрбиә сараһы кәрәк тип уйланы, буғай. Ҡарға ла балаһына "аппағым", терпе лә "йомшағым" ти. Әсәһенең дә әсе теллелеге ғәмәлдә тышҡы бер сағылыш ҡына. Йыш ҡына тыртайһа ла ысынында ул ҡыҙҙарына рәхимле, Айнур кейәүенә айырыуса итәғәтле, сөнки кейәүе һәр саҡ асыҡ сырайлы, көләс, илгәҙәк. Шуға ла кисен Гөлнур иренең ҡылын тартты:

- Гөлкәйеңә сессияға китергә ваҡыт етте. Бөгөн төштән һуң әсәйемә шылтыратҡайным, тырҫ-мырҫ килә, кирле-мирле һөйләшә. Килмәҫ, моғайын. Ни хәл итәбеҙ инде, Айнур?

- Нишләп килмәһен, ти, килер, кейәүе саҡырғас. Ҡайҙа, үҙем һөйләшеп алайым әле, - тип, Айнур сәмләнеп китте:

- Хәйерле кис, ҡәйнәм. Беҙ һеҙҙе һағынып бөттөк. Ул балалар көн һайын, өләсәй ниңә килмәй, ти ҙә тора. Йәмле йәй көндәрен бергәләп үткәрәйек. Һеҙһеҙ донъя йәмһеҙ, ҡәйнәм.

- Ай-һай, хәйләкәрһең дә инде, кейәү. Ауырһынып торам бит әле.

- Дауаларбыҙ. Мин табип та һуң. Атлап түгел, осоп йөрөрһөң, ҡәйнәм.

- Сир-һәрҙе имләрһең дә ул, ҡалған хәтерҙе ҡайтарыр йүнең бармы икән? Ҡатын-ҡыҙҙың "айт" тигәненә гелән "тайт" тиергә ярамай ир кешегә...

- Насар ишетелә, ҡәйнәм. Ай, шул телефонды...

- Гөлкәйем дә гөлкәйем, тип ниңә йомшаҡлыҡ күрһәтәһең, ҡатыраҡ тот...

- Бөтөнләй ишетелмәй, ҡәйнәм. Иртәгә Уралтауҙа ҡаршы алам. Уралтауҙа!..

Гөлнур йылмайҙы:

- Илла хәйлә тоҡсайыһың да инде, Айнур. Әсәйемдең йәнен иреттең, буғай.

Ғөмүмән, Айнур тартынып тормай, ҡәйнәһе менән мәрәкәләп һөйләшә. Кейәүен көйлө күргәнгәме, ул уға һис тә үпкәләмәй. Бәлки, йола буйынса кейәү кеше әүәл-әүәлдән хандай һаналғанғалыр, ҡәҙер ителгәнгәлер. Бер мәл шулай ҡәйнәһе алдан белгертмәй, шыпырт ҡына килде лә төштө. Айнур иһә уйынсалап:

- Ҡәйнәм, әллә ут алырға ғына килдеңме, сәй ҙә эсеп тормайһыңмы? Усаҡта ҡуҙыбыҙ баҙлап, шауҙырлап ята былай, - тип ҡаршыланы.

- Ҡуҙығыҙҙы ҡуҙғытмам, йә ҡулым бешер, уты өҫтәмә төшөр, - тине ҡәйнәһе кинәйәне төшөнөп. - Сәйегеҙҙе лә эсәм, ашығыҙҙы ла ашайым, мунса ла төшәм, бер-ике аҙна рәхәтләнеп ҡунаҡ булып ятам, ҡыуандырам һеҙҙе, кейәү.

- Һай, әллә кемдең ҡәйнәһе! Гөлкәйем, сәйнүгеңде гөжләтеп ебәр әле, әсәң сарсап килгән бит.

Ҡәйнәһе ҡулдарын сайып, күстәнәстәрен сығарҙы, йәһәт кенә сынаяҡтарҙы өҫтәлгә теҙҙе, үҙ өйөндәге кеүек һамаҡлап, ашҡа ҡыҫтаны:

- Көҙгө ҡатыҡ, көмөш ҡашыҡ - кейәүем менән ҡыҙыма, яҙғы ҡатыҡ ярыҡ ҡашыҡ - киленем менән улыма. Йә, кейәү, һөйләп ебәр, мин килеүгә ҡәйнәләр тураһында тағы ниндәй мәҙәктәр әҙерләп ҡуйҙың?..

Мәгәр үҙе лә һиҙмәҫтән ҡыҙының ҡуҙын ҡуҙғыта, осҡонон өҫтөнә осора ла ҡуя шул...

* * *

Уралтау буйы һоҡланғыс. Тирә-йүн шундай хозур, шундай төлөк. Йәнгә лә, тәнгә лә сихәт ҡарағай ылыҫы еҫе бөркөлөп тора. Тын алышы иркен. Һауа һулап туйғыһыҙ. Хоҙай Тәғәләнең йәннәте бындалыр, моғайын... Әкиәт донъяһын һыҙғыртҡыс сың менән һиҫкәндереп, Сибай-Өфө поезы килеп туҡтаны. Гөлнур ҡайнар ирендәрҙән айырылып: "Ярар, имен-аман ғына тороғоҙ", - тип, етенсе вагонға ҡарай йүгерҙе. Шул саҡ Айнурҙың ҡаршыһында ғына торған өсөнсө вагондың ишеге асылды һәм тамбурҙа сумаҙанын һул ҡулына тотҡан ҡәйнәһе пәйҙә булды. Ул тейен етеҙлеге менән ергә төшөп, яҫы сағыл ташҡа менеп, һаулыҡ та алмай телдәрләнде:

- Йәмле кәкүк айҙарында тыуған еркәйеңдән айырылып, йөрәгең ҡабынып, сит илдәргә сығып кит инде, әйтәгүр. Үҙ өйөмдә үҙ көйөм ине. Йөрө инде яманһыулап, эсең бошоп, башыңды эйеп, ҡәҙер ебәреп...

Ялҡынын сығара ҡәйнәм. Күрәһең, йәне көйөп, янып килгән, тип уйланы Айнур.

- Ҡәйнәм, тим, ҡәйнәм! Үҙең әйтмешләй, ҡаҙандарҙа ҡайнап, һыу ҡуйырмай. Әйҙә, ҡайтайыҡ. Ашығыс ярҙам машинаһы көтөп тора.

- Ашығыс ярҙам миңә түгел, һеҙгә кәрәк, - тип һаман дөрләне ул. - Ҡайҙа Гөлнурың?

- Ана, вагон тәҙрәһенән ҡул болғай.

- Йылмайған була иш-ш-еү! Ҡор-р-оғор!..

* * *

Таң һыҙылып килгәндә Айнурҙың ҡолағына биҙрә шалтырауы салынды. Ҡоштар менән бергә уянырға күнеккән ҡәйнәһе һыйыр һауырға сыҡты. Ярым йоҡоло Айнур тағы серемгә талды. Иртәнге йоҡо бик тәмле була шул, күҙҙәргә төйөлә лә тора. Тағы күпме ятҡандыр, йоҡо аралаш ҡәйнәһенең еңелсә генә өҙөк-өҙөк өндәшеүен тойҙо:

- Кейәү... Кейәү, тим. Һыйырҙы ҡыуырға ваҡыт.

Йоҡо бүлмәһенә инмәй генә һүҙ ҡата, эскә үтергә ҡыймай. Ҡәйнәм үҙе эшкә шәп, тормай ҙа ҡуяйым, тип уйланы һәм тауыш бирмәне кейәү, йоҡлағанға һалышты.

- Иҫ белмәй йоҡлай, ныҡ арыған, күрәһең. Ярай, ял итһен, үҙем ҡыуайым бөгөн.

Ишек шығырлап ябылғас, Айнур һикереп тороп, тәҙрәгә баҡты. Ҡәйнәһе һыйыр менән башмаҡты сыбыҡлай- сыбыҡлай "Һәш-һәш! Һәш-түкә!" тиеп урамға сығарҙы. Күршеләрҙең дә ҡапҡалары асылды. Айнурҙарҙың һыйыры башҡаларға сәләм биргәндәй, моңло ғына итеп мөңрәне. Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа иҫәнләшеп, ниҙер һөйләшә-һөйләшә мал-ҡараны көтөү тупланған урынға әйҙәне. Икенсе, өсөнсө көндө лә кейәү бер ни белмәй иҙрәп йоҡлаған булып, ятып ҡалды. Ҡәйнәһе уны үҙенсә аҡланы:

- Табип кеше, түрә кеше, мәртәбәһен төшөрөп, бисә-сәсә, әбей-һәбей менән һыйыр һәүкәшләп йөрөмәҫ инде.

Бына шулай гөлкәйенең "уҫал" әсәһе бер нисә көндә мал әйҙәргә күнде һәм күнекте лә ҡуйҙы. Иң мөһиме: был шөғөл уның күңеленә бик тә хуш әхирәттәр менән аралашыу сараһына әйләнде. Иртәнге хозурҙа рәхәтләнеп, саф һауа һулап, әйләнә-тирә менән танышып, эйәләшеп, лабырлашып бара, ҡайта, күмәкләшеп әңгәмәләшеп ултыра. Күрше-күлән кейә-

✓ *Ошо мәлдәге шатлыҡ тойғоhон hөйләп биргәнеҙ! Алдан килешеп ҡуйған буйынса, Солтанморат менән бергә тәүге партала урын алғанбыҙ. Бер аҙҙан уҡытыусы ағайыбыҙ хәрбиҙәрсә туп-тура баҫып, класҡа инә.*



үе менән ҡыҙын маҡтап бөтә алмай:

- Бигәйәт матур, көйлө, татыу йәшәйҙәр. Бер йән булып, hандуғастар көнләшерлек итеп.

- Эйе, шулай, - тип икенсеһе йөпләп ебәрә. - Өй сатын бергә тотоп, башҡаларға үрнәк күрһәтеп донъя көтәләр. Кейәүең - йорттоң терәге, ҡыҙың - биҙәге, тигәндәй. Яҡшы һүҙҙәре - йәнгә рәхәт. Бәхет асҡыстары - шулдыр, тим.

- Бәхет ҡошо татыуҙарға, тырыштарға ҡуна инде ул.

Һоҡланып һөйләгәстәре, ҡыҙы менән кейәүе өсөн әүәл үҙе һиҙеп етмәгән ғорурлыҡ тойғоһо кисерҙе әсә. Ҡәрҙәштәр уларҙы һанлай, хөрмәтләй, башҡаларға им күрә. Тимәк, ҡыҙы ул уйлағанса, ҡотһоҙ түгел, ә ырыҫлы, инабатлы. Гөлнур өйҙә юҡта үҙен хужабикә итеп тойоуҙан, ир кешенең, йәғни кейәүенең тамағына әҙерләй алыуҙан да кинәнес кисереп, күңеле бөтәйеп, асылып китте уның. Ейән, ейәнсәренең наҙлы итеп "өләсәй" тип өндәшеүҙәре лә хис-тойғоһон йомшартты, уй-фекерен үҙгәртте һәм, ниһайәт, ҡыҙына үпкәһен онотторҙо. Ҡыҙының балалары гөлдәй үҫеп килә. "Улар минең нәҫелем, дауамым бит", - тип ихлас ҡыуанды һәм көн һайын балаларҙың баштарынан һыйпап, арҡаларынан һөйҙө өләсәй.

* * *

Гөлнур имтихандарын уңышлы тапшырып, бүләктәр, ҡүстәнәстәр тейәп, йылмайып ҡайтып төштө. Әсәһенә ҡүҙҙәң яуын алып торған ҡупшы кулдәк кейҙерҙе. Бик килешә үҙенә, күҙенә ҡыуаныс йәштәре тулды. Айнур өсөн дә, балалары өсөн дә өй йәмләнеп, йәнләнеп китте. Ҡатынының алсаҡ, һылыу булһа, ожмах кәрәкмәй инде. Айнурға - Гөлнур ожмах! Өҫтәүенә әҙәләп һағынған, йәне-тәне тилмергән. Ошо йәннәт донъяла уға бик хуш, бик рәхәт. Мәгәр вәҡытты туҡтатып булмай. Тыуыусы көн Айнурҙы йәннәттән айырҙы. Уяткыс сыңынан һиҫкәнеп, Гөлнуры ҡосағынан һурылды. Һомғол һынын ыҫкындырмаҫҡа иткәйне лә кәләше теләгәнә ирек ҡуйманы. Бер аҙҙан уның иртәнге һалҡындан һалҡынайған ҡулы иренең иылымыс тәненә ҡағылды:

- Айнур... Айнур... Малды ҡыу!

- Йоҡом туймаңы әле.

- Тор! Ятма иркәләнеп. - Гөлнур өҫтөнән йоҡа юрғанын һыпыра тартып алды. - Мин һыйырҙы һауҙым.

- Гөлнур, мин ҡәйнәмде өс көндә мал ҡыуырға өйрәтеп алдым. Һине лә...

Шул саҡ ҙур бүлмәнән ҡәйнәһенең тауышы ишетелде:

- Дөр-р-өҫ, кейәү! Үҙе ҡыуһын, ҡор-р-о... Ҡор-р-ромағыр!..

Ҡайтыр саҡта ҡәйнәһе Айнурға шыпыртын ғына шыбырланы:

- Ҡош әйләнеп тураға төшкән һымаҡ, һин дә әйләнеп ҡулға төшмә, кейәү, йәме.

Әммә ныҡ ярата шул Айнур Гөлнурын. Бер нисә көндән ул йәнә һәүетемсә генә һыйыр һауҡашләй ине.

**(Аҙағы. Башы 38-се һанда).**

ХӘТЕРКИТАП

# УҠЫТЫУСЫНЫҢ БӘХЕТЕ...

## уҡыусылары менән бәхетле булыуҙалыр

**"Иҫемдә алтын һуҡмаҡҡа Тәү аяҡ баҫҡан көнөм, Тәү башлап мәктәп ишеген Үрелеп асҡан көнөм..." Ошо шиғыр юлдарын иҫләгән һайын, Баймаҡ районы Мәмбәт ауылындағы бәләкәс кенә ағас йорт - мәктәбем һәм унда оҙаҡ йылдар эшләгән тәүге уҡытыусым күҙ алдыма килә. Үҙемә биш йәштәр самаһы булған мәлдәрҙән алып уҡ мәктәпкә барырға шундай ныҡ хыялланғаным, йыш ҡына өйҙә "мәктәп" уйнағаным хәтеремдә. Иҫке портфелгә ағайҙарымдан ҡалған физика йә математика һымаҡ бер-ике ҡалын китапты һалып алып, алғы бүлмәнән төпкө бүлмәгә күсәм (йәнәһе лә, мәктәпкә барам)... Күпмелер ваҡыттан, ҡабаттан "мәктәптән ҡайтам"...**



Бер-ике мәртәбә әлеге портфелде "һөйрәп" тигәндәй, "ысын мәктәпкә" лә килгәнем хәтеремдә. Мәктәп беҙҙең өй менән йәнәш кенә ине, ҡойма аша ғына. Дәрес барған мәлдә класс ишеген шаҡыйым. "Да", тигән ҡалын тауышты ишетәм. Ишеккә үрелеп, буйым етмәйерәк торғас, уҡытыусы ағай үҙе ишекте аса. Мине күргәс, "әрләп сығармаҫмы" тип шөрләүем бушҡа була. Кереһенсә, ағайыбыҙ, көлә-көлә, үҙе етәкләп, класс эсенә инергә ярҙам итә. "Ней йомош, Хәлил?" - ти ул мин ингәс. "Яҡуп ағай, мин уҡыйға кийҙем", тим нәҙек кенә тауышым менән. "Р" хәрефен дә әйтә белмәйем. Парта артында ултырған балалар барыһы ла миңә ҡарап сыр-сыу булып көлөшә. Уҡытыусы ҡулыма өр-яңы дәфтәр, матур итеп осланған ҡәләм тоттора. Иң арттағы буш парта артына етәкләп алып килеп, мине күтәреп ултыртып та ҡуя. Тәнәфескә ҡәҙәр әлеге дәфтәргә ниҙер сыймаҡлап ултырам. Уҡыусы балалар әленән-әле миңә боролоп ҡарай... "Ызванук" шылтырағас та, эшлекле ҡиәфәт менән, портфелемә дәфтәремде һалып алып, тышҡа сығам. Үҙемде шундай бәхетле итеп тоям...

Урамдаш дуҫтарым - минең менән бергә уйнап йөрөгән бөгзе малайҙар беренсе синыфҡа уҡырға киткәс, уларға көнләшеп ҡарайым. Әсәйемә һорауҙар яуҙырам: "Хәлит, Варис мәктәпкә бара, ә нишләп мине уҡырға алмайҙар ул?" "Йәшең тулмаған әле, балам", - ти әсәйем тыныс ҡына итеп. "Мин Варистан оҙонораҡмын да баһа, - һаман ныҡышам, - минең дә барғым килә мәктәпкә..." "Бер аҙ сабыр ит инде улым, киләһе йылға ана Солтанморат, Вәғиздәр менән бергә барырһың". Соланыбыҙҙың башына менеп ултырып алып, уҡыусы балалар тәнәфескә сығыуын күтәм. Бына балалар сырсыу килеп, йүгерешеп килеп сығалар. Һәр береһенең түшендәге ҡыҙыл "октябрят йондоҙо" күҙҙең яуын ала. Ҙурыраҡ ағайҙар һәм апайҙарҙың муйындарында ҡыҙыл галстук. Ә малайҙарҙың кейгән формалары хаҡында әйтеп тораһы ла юҡ. Һорғолт күк төҫтәге гимнастерка кейеп, йыштарап торған баҡыр башлы ҡайыш менән билен быуған малайҙар бер-береһе менән шаярыша. Баштарында шул уҡ туҡыманан тегелгән, кокардаһы алтынланып торған "салдатский" фуражка! Миңә иғтибар итһәләр, "күрҙеңме" тип маҡтанған да һымаҡ тойола улар. Ниһайәт, дежурҙағы уҡыусы ҡыҙ тупһаға сығып, ҡыңғырау зыңғырҙата. Балалар ҡабаттан инеп китәләр, тынлыҡ урынлаша. Иплап кенә баҫҡыстан төшеп, мәктәп соланына инәм. Хәҙер мин биш йәшлек түгел, дәресте бүлеп, ҡамасауларға ярамағанлыкты ла беләм. Ишеккә ҡолағымды ҡуйып, дәрес барышын тыңлайым. Яҡуп ағай көр ҡалын тауыш менән балаларға ниҙер һөйләй. Минең соланда торғанымды һиҙмәйҙер... Хәҙер инде ҙурмын, хәрефтәрҙе таныу ғына түгел, хатта ҡушып уҡый ҙа беләм, тик бына мәктәпкә алмауҙары...

Ниһайәт, миңә ете йәш тә тулды! Аҡтаҫма ҡушып, сәстәрен икенән үргән, ҡара алъяпҡыс кейгән ҡыҙҙар, өр-яңы мәктәп формаһындағы малайҙар класҡа йыйылабыҙ. Ошо мәлдәге шатлыҡ тойғоһон һөйләп биргәнеҙ! Алдан килешеп ҡуйған буйынса, Солтанморат менән бергә тәүге партала урын алғанбыҙ. Бер аҙҙан, сәсен үргә тараған, етди йөҙлө, ҙур кәүҙәле уҡытыусы ағайыбыҙ хәрбиҙәрсә туп-тура баҫып, класҡа инә. Сөм-ҡара костюм һәм салбарҙа. Аяҡтарында шығырҙап торған йып-йылтыр хром итек. Барыбыҙ ҙа аяғүрә баҫып ҡаршы алабыҙ. "Һаумыһығыҙ!" - ти уҡытыусы. "Һаумыһығыҙ!"- тип хор менән яуаплайбыҙ. "Ултырышығыҙ!"- тигән командаға барыбыҙ ҙа урындарыбыҙға ултырышабыҙ. Исемлек буйынса барлап сыҡҡас, билдәребеҙ ҡыйшаймаһын өсөн нисек парта артында дөрөҫ ултырырға өйрәтә уҡытыусы. Кем бәрәфкә ҡыҫталһа, түҙеп ултырмаҫҡа, ҡулды күтәреп, "Тышҡа сығырға мөмкинме?" тип әйтергә лә ҡуша. Бына шундай ғына ябай аралашып алыу беҙҙе яҡынайта, ағайыбыҙға ышаныслыбыҙ арта. Уны үҙ ата-әсәйең йәки бер туған ағайың һымаҡ яҡын күрә башлайһың. Шунан алып ул беҙгә ғүмерлеккә "ағай" ғына булып ҡалды ла инде.

Уның беҙгә гөрләп торған ҡалын, үҙенсәлекле тауышы менән уҡыу ниндәй ҙур әһәмиәткә эйә булыуы хаҡында һөйләгәнен йәтолоп тыңлайбыҙ. Телмәренә шиғыр юлдары ла килтереүе айырыуса күңелгә ята: "Эй, туған тел, эй матур тел, атам-әсәмдең теле..." Мәжит Ғафури, Мостай Кәрим, Ғабдулла Туҡай һымаҡ яҙыусыларыбыҙ хаҡында һөйләп үтә. Үҙе элегерәк уҡытҡан уҡыусыларының үҫеп етеп, кем булып китеүҙәрен, фәлән апайҙың бөгөнгә көндә уҡытыусы, икенсеһенең алдынғы эшсе, өсөнсө ағайҙың (униһы минең Ғайса ағайым ине) - Совет армияһы офицеры булып китеүе хаҡында бәйән итә. Дәфтәрҙә партаға нисек дөрөҫ итеп һалып, ҡәләмде нисек ҡулға тоторға икәнлеген дә ентекләп күрһәтте ағайыбыҙ. Уның таҡтаға аҡбур менән матур итеп яҙғандары, унан һәр беребеҙҙең дәфтәрҙәребеҙгә өйгә эш итеп матур-матур яҙған хәреф өлгөләре һаман күҙ алдымда.

Өсөнсө-дүртенсә синыфтарға еткәс, ғәйәт ҡыҙыҡ итеп алып барған туған тел, тарих дәрестәрен йәтолоп тыңлағаным хәтеремдә. Шуныңса күп нәмәне белә ағай! Хатта уҡытыусы ошо донъялағы бөтә кешегә ҡарағанда ла белемләрәктер тигән инаныуҙабыҙ. Ниндәй генә һорау бирһәк тә, мотлаҡ яуап бирә ул. Һыуҙың парға әйләнеп осоуын, ҡояш нурҙарының хлорофилдар барлыҡҡа килтереп, япраҡты йәшелләндереүен, бөтә тере туҡымаларҙың күҙәнәктәрҙән тороуы хаҡында ла, үпкәләребеҙгә ингән кислородтың ҡанға тарып, унда беҙҙең йәшәүҙә тотоп торған төрлө химик реакциялар яһауын да беренсе тапҡыр Яҡуп ағайҙан ишеттек. Мәшһүр шағирыбыҙ Мостай Кәримдең әлеге шиғыр юлдары ҡолаҡ төбөндә һаман сыңлай:

*"...Һин яратырға өйрәттең*
*Һәр бер биҙәгән ерҙең,*
*Йондоҙло зәңгәр күктәрҙең*
*Серҙәрен асып бирҙең.*
*Һин етәкләп мендең мине*
*Тауҙарҙың бейегенә,*
*Алып киттең далаларға,*
*Диңгеҙҙәр киңлегенә..."*

Ағайыбыҙ һымаҡ күпте белергә, уның һымаҡ аҡыллы булырға, күп уҡырға, матур, таҙа итеп яҙырға өйрәнергә һәр саҡ хыялландым. Физкультура дәрестәрендә турникта уйнап күрһәтеүе малайҙарға ғәйәт ҡыҙыҡ ине. Физзарядка яһау, сынығыуҙың файҙаһы хаҡында ла һөйләй торғайны. Дәрестән һуң йыш ҡына яҡындағы Сирағол тауына беҙҙе походҡа алып сыға. Унан, ике төркөмгә бүлешеп алып, һуғыш уйыны уйнайбыҙ. Ҡыҙҙарҙы белмәйем, әммә беҙгә, малайҙарға, был күнекмәләр ғәйәт ҡыҙыҡ. "Учение"-лар тамам булғас, "...Ат уйнатып алдан бара Шайморатов генерал" тип дәртләнеп йырлаша-йырлаша, өйҙәребеҙгә ҡайтып китәбеҙ.

Атайым менән әсәйем гел генә: "Уҡытыусы ағайығыҙҙы тыңлап ҡына йөрөгөҙ",- тип өйрәтә ине. Бөтә ауыл халҡы Яҡуп ағайҙы ныҡ ихтирам итте. Беҙҙең яҡтарҙа "Иң яҡшы уҡытыусыларҙың береһе - ул" тигән абруйы бар ине уның. Һәләтле педагог булып танылған был ағайға ауыл кешеләре һәр төрлө мәсьәләләр буйынса кәңәшкә лә килә ине. 32 йыл ғүмерен балаларға белем биреүгә бағышлаған, һәр кешегә иғтибарлы булған был ағай ана шулай яҡшы кеше булып, һәммәбеҙҙең хәтеребеҙҙә һаҡланып ҡалған.

Үҙ эшенә һәр саҡ намыҫ менән ҡараған, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны булған Яҡуп ағай гел генә "Мин уҡыусыларым менән бәхетлемен" тип әйтергә яратҡан. Бөгөнгә көндә уның уҡыусылары араһында ниндәй генә һөнәр эйәләре юҡ! Башҡортостан буйынса танылған кешеләр ҙә байтаҡ ҡына. Атҡаҙанған уҡытыусылар, билдәле табиптар, ғалимакадемик та бар, әммә уларҙы исемләп атап китеү бөгөнгө мәҡәләмдең маҡсаты түгел. Әлек бына шундай ысын уҡытыусылар бар ине, тигән хәҡиҡәтте иҫкә төшөрөп кенә үтке килгәйне.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**хәрби хеҙмәт ветераны,**
**отставкалағы подполковник.**

✓ *1998 йылда ауылда мәктәп ябылған, клуб юҡ. Ә йәшәйешкә этәргес биргән рухи көстө кешеләр ҡайҙан алырға тейеш? Тап ошо мәлдә Рафиҡта мәсет һалыу ауылды һаҡлап ҡалырлыҡ милли идея булараҡ та ҡабул ителә.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КӨНӨНӘ - БЕР АЛМА...

■ Ябай алма - бик яҡшы дауа. Ул йөрәк өйәнәге хәүефен күпкә кәметә. Бының өсөн көнөнә бер алма ашау ҙа етә. Ә бына Норвегия кардиологы П. Овеха йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн арыш икмәге ашарға тәҡдим итә. Быны ул арышта йөрәккә бик кәрәкле липома кислотаһы барлығы менән аңлата. Сингапур ғалимдары иһә ҡайһы бер йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуынан тауыҡ һурпаһы дауалай, тиғән һығымтаға килгән. Уның составындағы матдәләр йөрәктә тейешле кимәлгә ҡайтара, ҡан тамырҙарын холестериндан таҙарта.

■ Калифорния университеты ғалимдары 1921 йылда үткәрелә башлаған тикшеренеүҙәргә нигеҙләнеп, ғүмер оҙайлығына бәйле ҡыҙыҡлы һығымталар яһаған. Улар раҫлауынса, юмор хисе ташып торған, тормошто һөйөүсән кешеләр, гәҙәттә, ҡыҫҡа ғүмерле була. Бындайҙар артыҡ тәүәккәл булыуҙары арҡаһында, үҙҙәрен йышыраҡ ҡурҡыныс аҫтына ҡуя икән. Ә бына һаҡ булыу, аҡыллы шикселлек ғүмерҙе бермә-бер оҙайта. Ғаилә ҡороп йәшәүсе ир-егет яңғыҙаҡтарға ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәй. Шулай уҡ үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ғына өйләнгән ирҙәр бәхетһеҙҙән ... бер нисә тапҡыр һынағандарға ҡарағанда оҙайлыраҡ ғүмер кисерә, имеш. Хеҙмәт яратыусылар ҙа эш яратмаусы йәштәштәренә ҡарағанда ғүмерлерәк була. Шулай уҡ эргә-тирәләгеләргә ярҙамсыл булыу сәләмәтлеккә лә, ғүмер оҙайлығына ла ыңғай йоғонто яһай, ти ғалимдар.

■ Ғаиләләге мөнәсәбәттәрҙе, матди килемде, сәләмәтлекте үҫемлектәрҙең энергияны ярҙамында көйләргә була. Белгестәр әйтеүенсә, амариллис гөлө ғашиҡтар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшырта. Адиантум - ҡатын-ҡыҙ үҫемлеге. Ул гүзәл затҡа ярҙам итә. Ҡытай раузаһы ир менән ҡатындың тойғоларын тағы ла сағыуыраҡ итергә һәләтле. Тормошоғоҙҙа үҙгәрештәр булыуын теләһәгеҙ, бегониялар үрсетегеҙ. Белгестәр тап бегонияның шәхси тормошто яйға һалырға булышлыҡ итеүен билдәләй. Алһыу, ҡыҙыл һәм ҡыҙғылт һары төҫлө сәскә атыусы бегонияларҙы бер көршәккә ултыртһағыҙ, рух күтәренкелеге, энергия көсәйеүен тойорһоғоҙ. Хлорофитум - тәбиғи кондиционер, ул кире энергияны ыңғайға әйләндерә. Был гөлдө аш бүлмәһендә тотоу яҡшыраҡ. Төнөн кислород бүлеп сығара торған үҫемлектәр - каланхоэ, алоэ ла бүлмәләрә һауаны яҡшыртасаҡ.

■ Британия тикшеренеүселәре ҡәһүәне алыштыра алырҙай аҙыҡ-түлек исемлеген баҫып сығарҙы. Организмға зыян килтермәй генә тиҙ уяныу мөмкинлеге биргән аҙыҡтар исемлегендә беренсе урында ябай һыу алып тора. Ул арыуҙы, көсөргәнеште бөтөрә, шулай уҡ организмды йоҡонан уятып ебәреү һәләтенә эйә. Ҡәһүәне шоколад та алыштыра ала, ти белгестәр. Какаола организмды тонуста тотоусы матдәләр бар, бынан тыш, шоколад энергия запасын да тулыландыра. Иртә менән ҡыҙыл алма ашау ҙа организмды уятырға мөмкинлек бирә, ул шулай уҡ витаминдарға ла бай. Был исемлектә сөтләүек, тауыҡ ите, балыҡ, һоло бутҡаһы һәм йәшел сәй ҙә бар. Тикшеренеүҙең авторҙары иҫәпләүенсә, организмға үҙен уятып һәм дәртләндереп ебәреү өсөн кофеин түгел, тап туклыҡлы иртәнге аш кәрәк.

■ Фастфуд менән артыҡ мауығыу балаларҙа астма һәм экзема сирҙәренең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был ризыҡтарҙағы зарарлы матдәләр ауыр формалағы астманың барлыҡҡа килеү хәүефен үҫмерҙәр араһында - 38, ә 6-7 йәшлек балалар араһында 27 процентҡа күтәрә. Ул шулай уҡ экзема һәм риниттың сәбәпсеһе булып тора. Фастфудты емешләк, балыҡ, ҡуҙаҡлылар менән алыштырыу уның зыянлы эҙемтәләрен кәметеүгә һәм был сирҙәрҙе иҫкәртеүгә булышлыҡ итә, ти Австралияның Аделаида университеты ғалимдары.

ФӘҺЕМЛЕ ОСРАШЫУҘАР

# МӘСЕТ ҺАЛЫУМЫ?

## Ул ауылды һаҡлап ҡалырлыҡ милли идея!

*"Кемдер Аллаһ ризалығы өсөн мәсет һалһа, Аллаһ уға йәннәттә йорт һалыр"* *(Хәҙис әл-Бохари һәм Мөслимдән).*



**2004 йылдың 25 сентябрендә Учалы районының Рафиҡ ауылында бар халыҡты һөйөндөргән оло ваҡиға була - "Әбдрәхим" мәсете асыла. Ошо ваҡиғаға, йәғни Аллаһ йортонда тәүге тапҡыр аҙан әйтелеп, намаҙ уҡылыуға теүәл 20 йыл үткәс, үткән айҙың 25 сентябрендә ауыл халҡы "Әбдрәхим" мәсете асылыуының түңәрәк датаһын билдәләргә йыйылды. Сараға Учалы ҡалаһынан, ауылдарҙан, шулай уҡ күрше райондарҙан да ҡунаҡтар килде. Баш ҡалабыҙ Өфөнән дә килеүселәр булды. "Киске Өфө" гәзите баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Башҡортостан юлдаш телевидениеһы журналисы, "Йома" тапшырыуын алып барыусы Морат Лоҡманов, күренекле шағир, филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәков менән миңә лә был күркәм байрамда осрашыу бәхете йылмайҙы.**

### Эш башы - ниәттә...

"Башҡа ауылдарҙа мәсеттәр һалына, беҙ кемдән кәм, әйҙә, беҙ ҙә мәсет төҙөйөк", тигән ниәттән генә барлыҡҡа килмәгән Рафиҡ ауылы мәсете. Иман йорто төҙөүҙе ойоштороусы Ҡадурий Фазлетдинов был хаҡта бына нимә ти: "Беҙҙең ғаилә ни өсөн мәсет һалырға булып китте? Бының асылы ҡәҙимге донъяуи сәбәптәрҙән күпкә тәрәнерәк. Һәр кеше Аллаһы Тәғәләнең һынауҙарын үтә. Ғөмүмән, йәшәйеш, ундағы ғәмәлдәр көндәлек һынау, кешенең булмышын баһалау ул...

...1999 йылда, тормоштоң ярайһы уҡ ҡатмарлы осорон кисергәндә, Аллаһы Тәғәләнең шундай уҡ һынауы минең өлөшкә төштө. Шул саҡ башыма шундай уй-ниәт килде: "Әгәр ҙә ошо ҡаршылыҡтарҙы имен-аман үтеп сыға алһаҡ, тыуған яғымда, Рафиҡ ауылында мәсет төҙөр инем.

Ғәмәлдә, Рафиҡ минең тыуған ауылым түгел. Беҙҙең ғаиләнең тамырҙары - Әбләҙ ауылында. Ул ауыл күптән донъяла юҡ инде, бөткәндәр иҫәбендә. Атайым менән инәйем, үткән быуаттың 50-се йылдарында уҡ ғаиләбеҙҙе алып, Рафиҡҡа килеп төпләнгән. Минең бала сағым тап ошо ауылда үтте.

...Шулай итеп, мәсет төҙөргә ниәтләнек. Ҡатыным Миңзәлә менән кәңәшләштек, уйҙарыбыҙҙы улдарыбыҙ Азамат менән Ринатҡа ла еткерҙек. Был башланғыс һәммәбеҙҙең күңеленә хуш килде, күтәренкелек тойғоһо бирҙе..."

Әммә эште башлап ебәреү өсөн ниәт ҡылыу ғына аҙ. Артабан ниәттәрен бойомға ашырыу маҡсатында Фазлетдиновтар Рафиҡҡа килеп, ауылдаштары менән осрашып кәңәшләшергә ҡарар итә. Тәүҙә улар Ҡадурий ағайҙың әсәһе яғынан туғанлыҡты булған Ҡәҙриә һәм Кираметдин Камалетдиновтар, шулай уҡ Рауза Сәләхова, Ғәлиулла Сәләхов һәм тағы ла бер нисә ауылдашы менән әңгәмәләшеп, уларҙың хуплауын ишеткәс кенә Рафиҡ ауылы халҡы менән осрашып кәңәшләшә. Ниәт-маҡсаттары дөйөм ауыл халҡының хуплауын таба.

### Бер генә кеше йөрөһә лә...

Рафиҡ - оло юлдан бер аҙ ситтәрәк, тау-урман ҡосағында ултырған күркәм ауыл. 100-гә яҡын өй бар, уларҙа 400-ләп кеше йәшәй. 1998 йылда ауылда мәктәп ябылған, клуб юҡ. Ә йәшәйешкә этәргес биргән рухи көстө кешеләр ҡайҙан алырға тейеш? Тап ошо мәлдә Рафиҡта мәсет һалыу ауылды һаҡлап ҡалырлыҡ милли идея булараҡ та ҡабул ителә. Ауылдаштары алдында сығыш яһағанда Ҡадурий Әбдрәхим улы: "Ауылда мәсет булһа, ул тағы ла яҡтырып, матурайып китәсәк бит. Иман йорттарының тартыу көсө бар: бер генә кеше йөрөр булһа ла, ауылда мәсет төҙөргә кәрәк. Сөнки уға башҡалар ҙа эйәрәсәк, иман нуры артабан да тараласаҡ. Беҙҙән, был тормошта ярайһы уңышҡа өлгәшкән, аяғында ныҡлы баҫып торған кешеләрҙән, бөгөн кешеләр һорағаны бар: "Баш ҡаланан әллә ҡайҙа яҡтан төпкөл ауылда шул тиклем мәшәҡәттәр, ҡаршылыҡтар аша мәсет төҙөү һеҙгә нимәгә кәрәк булды? Яуап ябай: мәсет тәүге сиратта халыҡҡа кәрәк. Беҙ иң тәүҙә үҫеп килгән быуынды, уларҙың күңел бөтөнлөгөн хәстәрләргә, уларҙы иманлы, аҡыллы итеп тәрбиәләргә ынтылырға тейешбеҙ. Мәсет был осраҡта рухи-мәҙәни үҙәк ролен үтәй..." - ти.

Фазлетдиновтар мәсет төҙөүгә финанс ярҙамы күрһәтергә теләге барлығын да белдерә. Урын һайлайҙар: мәсет бығаса буш торған, таҙа, ҡалҡыу урында торорға тейеш. Мәсеттең проекты әҙер булғас, уны Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Тәлғәт Тажитдин раҫлай һәм ярҙамсы итеп Әбү Самат хәҙрәтте

АРҘАҠЛЫ ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

# РУХИ МИРАҪТЫ...

## беренсе булып аҡ ҡағыҙға күсергән ғалим ул



**Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында бөйөк ғалим, яҙыусы, филология фәндәре докторы, Әхнәф Харисовтың тыуыуына 110 йыл тулыу айҡанлы фәнни-ғәмәли конференция үтте. Ә. Харисов - башҡорт әҙәбиәте һәм фольклоры өлкәләрендә тәрән бураҙналар һалған, фән мәктәбен барлыҡҡа килтергән ғалим. Үҙенән һуң күп шәкерттәр ҡалдыра: шулар араһынан Әнүәр Вахитов, Ким Әхмәтйәнов, Вафа Әхмәҙиевтарҙы атай алабыҙ. Нур Зарипов, Марат Минһажетдинов, Фәнүзә Нәҙершина һәм башҡа фольклорсылар уның ҡул аҫтында ғилми текстология мәктәп үтә. Бөгөнгө ғалимдар ҙа уны үҙҙәренең уҡытыусыһы тип атай. Уның мәктәбе эшләй, эштәре дауам итә, үҫтерелә. Ғалимды иҫкә алыусылар күп булды. Бер нисәһенең фекерен тәҡдим итәбеҙ.**

***Зөһрә Рәхмәтуллина, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, философия фәндәре докторы:*** Әхнәф Харисов - Башҡортостан фәнендә генә түгел, Рәсәй гуманитар фәнендә лә ҙур эҙ ҡалдырған ғалим. Беҙ уны үҙебеҙҙең легендар уҡытыусыбыҙ тип атайбыҙ. Фәнни хәҡиҡәткә, тарихи дөрөҫлеккә хеҙмәт итеүсе ғалимдың бөтөн тормошо, яҙмышы башҡорт филологияһы менән бәйле. Ул туған мәҙәниәтен, телен үҫтереүҙә алдан барыусы, принципиаль граждандыҡ позицияһында торған патриот йәмәғәт эшмәкәре. Әхнәф Ибраһим улы милләтебеҙҙең, гуманитар фәндең йондоҙо ғына түгел, ғорурлығы ла. Тормошоноң төп ҡаһарманлығы - башҡорт әҙәбиәтенең, тарихының иҫ китмәле тәрән сығанаҡлы булыуын раҫлауында, уның урта быуат дәүерҙәренә барып тоташыуын, шәреҡ әҙәбиәте менән тығыҙ бәйләнештә

ебәрә. Диләнкә юллауҙа Учалының данлыҡлы шәхестәре Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов, Риф Ҡаҙаҡколов ҙур ярҙам күрһәтә. Ә инде ағастарҙы ҡырҡыу, эшкәртеү кеүек иң ауыр эштәрҙе Ҡәҙриә һәм Кираметдин Хәйруллиндар ең һыҙғанып башҡара. Ҡырҡылған ағастарҙы ауылға ташыу, такта ярыу кеүек мәшәҡәттәрҙе Ғәлиулла Сәләхов башҡара, мәсетте төҙөү эшен дә ул етәкләй. Учалы районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Танһыҡ Ниғмәтуллин ярҙамы менән мәсет төҙөү эшенә иретеп йәбештереүселәр һәм биҙәүселәр бригадаһы йәлеп ителеүе һөҙөмтәһендә эштәр тиҙләтелә.

"Бураны ауыл халҡын йыйып, өмә яһап күтәрҙек. Ошо урында ҡатыным Миңзәлә Вәлиулла ҡыҙының мәсет төҙөүгә индергән баһалап бөткөһөҙ ҙур хеҙмәтен телгә алып китмәйенсә булдыра алмайым. Был осорҙа ул, Өфөләге барлыҡ эшен, ғаиләбеҙҙе ҡалдырып, бер нисә айға Рафиҡҡа юлланды. Иман йортоноң стеналарын күтәреп, ҡыйығынябып ҡуйыу - бер, эске эштәрен еренә еткереп башҡараһы, зауыҡлыһа тап килгәнсә биҙәйһе бар ине. Һәр эште үҙ һөнәренең оҫтаһы башҡарырға тейеш, тигән маҡсаттан сығып, Өфөнән дизайнер Григорий Козловты саҡырҙыҡ. Уның һиммәтле ҡулдары мәсеттең эсен дә, тышын да бер стилдә биҙәне..." - ти Ҡадурий Әбдрәхим улы егерме йыл элек барған дәрәү төҙөлөш эштәрен хәтергә алып.

Бөтә эштәр 2004 йылдың сентябрь уртаһына тамамлана. Төҙөлөш 4 йыл дауам итә. Ауыл халҡының тәҡдиме буйынса мәсеткә мулла дәрәжәһенә эйә булған Ҡадурий Фазлетдиновтың данлыҡлы атаһы Әбдрәхим Фазлетдиновтың исемен бирәләр.

Төҙөлөш барышында үҙенең тыуған яғына ҡайтҡан Мансур Йомабаев мәсеттә мулла юҡлығын белгәс, "Әбдрәхим" мәсетен етәкләргә әҙер булыуын әйтә. 2009 йылда Мансур мулланы Рафаэль Харрасов алмаштыра, ул бөгөн дә мәсеттең имам-хатибы.

### Мәсет эшләһен өсөн...

"Кемдер Аллаһ ризалығы өсөн мәсет һалһа, Аллаһ уға йәннәттә йорт һалыр", тиелә хәҙистә. Мәсет һалыуың йәннәттә үҙеңә йорт һалыуға тиң сауаплы ғәмәл. Әммә һалынған мәсеттең бикле, буш тороуы, унда йәштәрҙең ылыҡмауы һуңғы йылдарҙа бик йыш күҙәтелә. Рафиҡ ауылы уҙамандары мәсеткә мөмкин тиклем күберәк халыҡты йәлеп итеү маҡсатында ла эш алып бара. Аллаһ йорто буш торорға тейеш түгел. Ауылда мәктәп һәм клуб булмағанлыҡтан, Рафиҡ ауылы мәсете ауылдың мәҙәни һәм рухи үҙәгенә әүерелә. Унда исем ҡушыу, никах йолалары, мосолман байрамдары үткәрелә. Осрашыуҙар ойоштороло, уларҙа республикабыҙҙың билдәле шәхестәре: яҙыусылар, шағирҙар, депутаттар, руханиҙар йәлеп ителә. 2007 йылдың июнендә ауыл халҡының саҡырыуы буйынса Рәсәйҙең Юғары мөфтөйө Тәлғәт Тажетдин хәҙрәт килә, ул ауыл халҡы һәм районның имам-хатиптары менән осраша. 2014 йылда "Әбдрәхим" мәсетенең 10 йыллығын байрам итеүгә арналған сара үткәрелә. 2016 йылда Мәүлит Ямалетдиндың башҡорт телендә сыҡҡан "Көрьән" сүрәләренең шиғри аңлатмалары" китабының исем туйы уҙа.

Төрлө йылдарҙа ҡасаба советы, хәҙер ауыл советы башлыҡтары булып хеҙмәт итеүсе Миңзәлә Шәғәйеповаға, Алмас Шаһиевҡа, Ильяс Килмөхәмәтовҡа, Марс Талиповҡа һәм Зөлфиә Ишмәмәтоваға мәсет төҙөлгәндән һуң документтарҙы рәсмиләштереүҙә, байрам сараларын ойоштороуҙа ҙур ярҙам күрһәтеүенә рәхмәтле Рафиҡ ауылы халҡы. "Әбдрәхим" мәсете эшен ойоштороуҙа Рафиҡ ауылы ҡатын-ҡыҙҙары, ағинәйҙәре, ауылыбыҙҙың пенсия йәшендәге ир-егеттәре, Килмәк ауылынан Рәсүл Исламов, Миндәктән Илдар хәҙрәт һәм башҡалар әүҙем ҡатнаша.

### Рафиҡҡа хажға килгәндәй...

"Әбдрәхим" мәсетен район кимәлендә генә түгел, республика кимәлендә танылтыр өсөн дә Фазлетдиновтар фиҙакәрлек өлгөһө күрһәтә. Әгәр ҙә ауылдарҙа мәктәптәр, клубтар ябыла икән, мәсеттәрҙә намаҙға халыҡтың килеүен көтөп кенә ултырыу "алма беш, ауыҙыма төш" тигәндән һис тә айырылмай. Был йәһәттән сарала сығыш яһаусы республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаеваның имам-хатиптарҙы халыҡ араһына сығырға өндәүе бик тә урынлы булды. Филология фәндәре докторы Фәнил Күзбәков мәсеттәрҙә дини, донъяуи ғилемде өйрәнеүгә йөҙ бороу зарурлығын билдәләһә, билдәле тележурналист Морат Лоҡманов һәр мосолман өсөн мотлаҡи ғәмәлдәрҙе иҫкә төшөрҙө. Шулай уҡ Урал аръяғы райондары мосолмандарының имам-ахуны Сәйфулла хәҙрәт Ғайсиндың, хәҙрәттәр Марс Әлтәповтың, Риф Мөхәмәтовтың, Рим Ғабдуллиндың, Салауат Рәсүлевтың, Талип Мөхәмәтғәлиндың һәм башҡаларҙың йөкмәткеле сығыштары сараға килеүселәр тарафынан йылы ҡабул ителде. Дәүләкән районынан улы Салауат менән сараға килгән Ҡадурий ағайҙың бер туған һеңлеһе Фәлсәфә Ғәтиәтуллина үҙенең сығышын: "Мин тыуған ауылым Рафиҡҡа хажға килгәндәй ҡайтам", - тип башлап ебәргән саҡта ауыл халҡының күҙенә йәш эленде.

Сара дуҫтарса йылы, эшлекле шарттарҙа үтте. Юморға ла урын табылды. Әбйәлил районының Салауат ауылы мәсете имам-хатибы Рафиҡ Шәйхмәтов үҙенең дингә өндәгән ялҡынлы сығышын шулай тамамланы: "Ауылығыҙға минең исемде биргәнегеҙ өсөн оло рәхмәт һеҙгә!"

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Беҙ Ҡадурий һәм Миңзәлә Фазлетдиновтар, улдарыбыҙ Азамат һәм Ринат, мәсет һалып, Әбдрәхим һәм Хафасаның зирәк аҡылын, исемдәрен мәңгеләштерҙек һәм Аллаһы Тәғәлә алдындағы ҙур бурысыбыҙҙы үтәнек", тиҙәр Фазлетдиновтар башҡарған эштәренә ҡарата оло ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп. Донъяла бер нәмә лә осраҡлы булмай тиҙәр. Мәсеткә "Әбдрәхим" исеме бирелеүе лә осраҡлы түгелдер. Ғәрәпсәнән "Әбдрәхим" исеменең аңлатмаларында "мәрхәмәтле, рәхимле Аллаһ бәндәһе", "мәрхәмәтле, рәхимле Аллаһ ҡоло" тигәндәре лә бар. Ошо күҙлектән ҡарағанда, улы Ҡадурий, килене Миңзәлә, ейәндәре Азамат менән Ринат, башҡа туғандары, ауылдаштары, яҡташтары ҡасандыр килеп үҙенең исемендәге мәсетте төҙөрҙәрен белһә, исемен тулыһынса аҡлап йәшәгәнен аңлар ине Әбдрәхим олатай. Хәйер, "Әбдрәхим" мәсетендә яңғыраған доғаларҙы ул ишетәләр, вариҫтарына ҡарап йыуаналыр...**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

эшләүен иң беренсе булып фән кимәленә күтәреүендә. Бөйөк ғалимдарыбыҙ һәр ваҡыт беҙҙең менән, уларҙың хеҙмәттәре, китаптары беҙҙең өҫтәлдә ятҡан ҡиммәтле сығанаҡтар. Эйе, уның тормошо - хеҙмәт батырлығы.

***Гөлнара Шәймөхәмәтова, Балтас районының мәғариф бүлеге начальнигы:*** Танып ырыуының йыйынын үткәргән кешеләрҙең береһе мин. Ә Әхнәф Харисов - танып ырыуы башҡорттарының иң сағыу йондоҙо. Әхнәф ағайҙың күп туғандары уҡытыусы булған, йәғни улар барыһы ла зыялы быуын вәкилдәре. Минә ике тапҡыр районда Харисов уҡыуҙарын үткәрергә насип булды. Был сарала үҙебеҙҙең мәктәп уҡыусылары ла ихлас ҡатнаша. Әхнәф Харисовтың мираҫын өйрәнгән, белгән кешемен, тип уйлаһам да, ғалимдың 110 йыллығына арналған конференцияла тағы ла бик күп яңылыҡтар ишеттем. Уларҙы, әлбиттә, уҡытыусыларға, балаларға - буласаҡ ғалимдарға еткерәсәкмен. Ике йылдан Балтас районында ла сираттағы Харисов уҡыуҙары үтәсәк. Унда ла әлеге осрашыуҙа алған тәжрибәне ҡулланырмын, тип уйлайым.

***Гөлнур Хөсәйенова, филология фәндәре докторы, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының фольклор бүлеге етәксеһе:*** Кирәй Мәргән юҡҡа ғына "Халыҡ ижады - мәңгелек шишмә" тимәгән. Арҙаҡлы ғалим Әхнәф Харисовты ла ошондай шишмә менән сағыштырырға мөмкин. Тәү ҡарамаҡҡа, бөтөн ғилми мираҫын ентекләп өйрәнгәнбеҙ һымаҡ. Ә шулай ҙа йыл һайын уның тураһында яңы мәғлүмәттәр табылып ҡына тора. Беҙ Әхнәф Харисовты, гәҙәттә, әҙәбиәт ғилеме буйынса ғалим тип ҡарарға күнеккәнбеҙ. 2014 йылда мин фольклор буйынса хеҙмәттәрен ҡарап ултырғайным, иҫем китте - был өлкәләге хеҙмәттәре лә баһалап бөткөһөҙ. Уның эштәрен уҡыған һайын яңы мәғлүмәттәр табыла.

Мәҫәлән, Әхнәф Харисовтың чиновниктарға ҡарата, улар әҙәбиәтебеҙгә, рухи мираҫыбыҙға бик иғтибар бирмәй, тигәнерәк фекере бар. Уларҙың "Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы"н эшләгән саҡтағы мөнәсәбәтенә яуап һымаҡ ҡабул ителә был. "Бына, күрҙегеҙме, ниндәй боронғо ул беҙҙең әҙәбиәтебеҙ!" тигән саҡырыу ташлай һымаҡ.

Ғалимдың әҙәбиәтебеҙ, фольклорыбыҙ тураһындағы ҡайһы бер фекерҙәре бөгөнгә тиклем башҡорт ғилемендә актуаллеген юғалтмаған. Эпостар, йырҙар тураһындағы фекерҙәрҙе лә иң тәүҙә ул әйткән. Конференцияла Әхнәф Харисовтың эшмәкәрлегенә бәйләп, "беренсе тапҡыр", "тәү тапҡыр" тигән һүҙҙәр күп ҡабатланды. Фән ғилемендә ҡайһы ғына өлкәне алмайыҡ, һәр береһендә уның ҙур хеҙмәте ята. Ул беренсе булып беҙҙең рухи мираҫты ҡағыҙға күсереп, уның әһәмиәтен дәлилләгән беренсе фән кандидаты... Әхнәф Харисов рухи ҡомартҡыларҙы йыйыусы ла, текстолог та, тикшеренеүсе лә, тәҙкирәсе лә, тәржемәсе лә. Быҙдай киң ҡоласлыҡҡа, тәрәнлеккә бары хайран ҡалырлыҡ.

**Фәрзәнә ФӘТИХОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

### Ун өсөнсө хат: "Тәрбиәлелек тураһында"

Яҡшы тәрбиәне ғаиләндә йәки мәктәптә генә түгел, ә... үҙеңдән дә алырға була.

Бының өсөн тик ысын тәрбиәлелек нимә икәнен белеү генә зарур.

Мин үҙемде тәрбиәлелек үрнәге тип һис иҫәпләмәгәнгә күрә, тәрбиә "рецептарын" бирергә ҡыймайым. Әммә шулай ҙа быға ҡағылышлы фекерҙәрем менән бүлешкем килә.

Мин шуға ныҡлы ышанғанмын, мәҫәлән, ысын тәрбиәлелек тәү сиратта өйөндә, үҙ ғаиләндә, үҙеңдең яҡындарың менән аралашҡанда беленә.

Әгәр ир-егет урамда таныш булмаған ҡатын-ҡыҙҙы үҙенән алда үткәрә икән (хатта автобуста) һәм хатта уға ишек тә аса, ә өйөндә арыған ҡатынына һауыт-һаба йыуырға ярҙам итмәһә, - ул тәрбиәһеҙ кеше.

Әгәр ул танышы менән итәғәтле, ә өйҙәгеләргә һәр бер сәбәптән асыуланып бара икән, - ул тәрбиәһеҙ кеше.

Әгәр ул яҡындарының холҡон, психологияһын, ғәҙәттәрен һәм теләктәрен һанға һуҡмай икән, - ул тәрбиәһеҙ кеше.

Әгәр ҙә ул өлкән йәштә лә ата-әсәһенең ярҙамын тейешле нәмә кеүек ҡабул итә һәм улар инде үҙҙәре лә ярҙамға мохтаж булыуҙарына иғтибар бирмәй икән, - ул тәрбиәһеҙ кеше.

Әгәр ҙә ул кемдер өйҙә дәрес әҙерләгәндә, йәки китап уҡығанда (хатта был уның үҙенең бәләкәй балалары булһа ла) ҡысҡыртып радио йә телевизор тоҡандыра икән, - ул тәрбиәһеҙ кеше һәм бер ҡасан да үҙ балаларына тәртип күндерә алмаясаҡ.

Әгәр ул ҡатынын йәки балаларының намыҫын аямайса, бигерәк тә сит кешеләр алдында, мәрәкәләргә ярата, был осраҡта ул (ғәфү итегеҙ!) ахмаҡ.

Тәрбиәле кеше - башҡалар менән иҫәпләшергә теләгән һәм белгән кеше, үҙ әҙәплеге ғәҙәти һәм еңел булыуҙан тыш, күңеленә лә хуш килгән кеше. Йәше һәм урыны менән үҙенән олораҡ булғандарға ла, кесерәктәргә лә бер тигеҙ ихтирамлы ул.

Тәрбиәле кеше һәр яҡлап та үҙен "тауышлы" тотмай, башҡаларҙың ваҡытын алмай ("Теүәллек - батшалар әҙәбе", - ти әйтем), башҡаларға биргән һүҙендә ныҡ тора, эреләнмәй, танауын сөймәй һәм һәр ваҡыт бер төрлө булып ҡала - өйҙә, мәктәптә, институтта, эштә, магазинда һәм хатта автобуста ла.

Уҡыусы иғтибар иткәндер, мин башлыса ир-егеткә мөрәжәғәт итәм, ғаилә башлығына. Сөнки ҡатын-ҡыҙға ысынлап та юл бирергә кәрәк... ишек алдында ғына ла түгел.

Ләкин аҡыллы ҡатын үҙенә тәбиғәттән бирелгән хоҡуҡ менән, ир-егеткә рәхмәт белдереп, даими файҙаланһа ла, нисегерәк итеп үҙенә гел генә беренселекте бирергә мәжбүр итмәҫкә мөмкин булыуын еңел төшөнәсәк. Ә был ҡыйынраҡ! Шуға ла тәбиғәт күпселек ҡатын-ҡыҙға тыумышынан (иҫәпкә алынмаған осраҡтарҙы һанамайым), ир-егеттәргә ҡарағанда юғарыраҡ әҙәплелек тойғоһо һәм тәбиғи ихтирамлылыҡ һалған...

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 7 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.40 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Шифр". Новые серии. [16+]
0.05 Т/с Премьера. "Турецкая тетрадь". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лютик и Анютик". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45, 17.45, 18.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на рус.Яз.)/. [12+]**
**12.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башкорттар. [6+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Квадратные метры. [12+]**
**19.00, 4.15 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Башкирские каникулы. [12+]**
**21.00 Д/с "Родина в сердце". [12+]**
**22.00, 5.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Хранитель национального духа. [12+]**
**2.15 Спектакль "Кодаса или Полснохи меньшему брату". [12+]**

## 8 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Шифр". Новые серии". [16+]
0.10 Т/с Премьера. "Турецкая тетрадь". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лютик и Анютик". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 0.00, 1.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Уфимские умы. [12+]**
**17.00, 20.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**21.20 Хоккей. ЦСКА (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**3.00 Спектакль "Заблудшая". [12+]**

## 9 ОКТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Шифр". Новые серии". [16+]
0.10 Т/с Премьера. "Турецкая тетрадь". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лютик и Анютик". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 4.30 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2024". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**2.30 Спектакль "Тамарис". [12+]**

## 10 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Т/с "Ищейка". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с "Премьера. "Шифр". Новые серии". [16+]
0.10 Т/с Премьера. "Турецкая тетрадь". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Лютик и Анютик". [16+]
23.30 Д/ф "Во имя справедливости". [12+]
0.05 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 13.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15, 5.15 Письма солдатам. [12+]**
**12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 18.30, 0.00, 1.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Республики.**
**16.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.20 Хоккей. "Спартак" (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**3.00 Спектакль "Нәркәс". [12+]**

## 11 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Т/с "Премьера. "Юг". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 2.50 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
1.00 Х/ф "Человек у окна". [12+]
4.48 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Концерт "Доброе утро, моя Республика!" [12+]**
**7.30, 13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Үткән гүмер. [12+]**
**8.15 Автограф. [12+]**
**8.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**9.30 Концерт "Семь чудес Башкортостана". [6+]**
**10.00 Гора новостей. [6+]**
**10.15 Йома. [6+]**
**10.45 Х/ф "Всё только начинается". [12+]**
**12.00 Д/ф "Место силы. Визит-центр "Тура-хан". [12+]**
**13.45 Спектакль "Там за холмом". [12+]**
**16.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**16.45 Д/ф "Рождение истории". [12+]**
**17.45 Мегасело. [12+]**
**19.00 М/ф "Северные Амуры". [6+]**
**20.15 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Ете егет. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 "Башкорт йыры-2024". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**23.45 "Воспевая наследие веков". Юбилейная программа, посвященная 30-летию ансамбля песни и танца "Мирас". [12+]**
**2.45 Спектакль "Половецкая мистерия". [12+]**
**4.30 Защитники Отечества. [12+]**
**5.00 Хазина. [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 12 ОКТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "В поисках Шамбалы". К 150-летию со дня рождения Николая Рериха. [12+]
11.05 "ПроУют". [0+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.15 Х/ф "Внимание, черепаха!" К 95-летию со дня рождения Ролана Быкова. [0+]
14.55 Х/ф "Служили два товарища". [0+]
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Родня". Музыкальный детектив. [12+]
19.55 "Эксклюзив". [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.30, 2.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
1.30 Бокс. А. Бетербиев - Д. Бивол. Бой за звание абсолютного чемпиона мира в полутяжелом весе. Прямая трансляция из Саудовской Аравии.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 "Доктор Мясников". [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Нянька для Рогожиных". [16+]
0.40 Х/ф "Осенняя мелодия любви". [12+]
4.15 Х/ф "От сердца к сердцу". [16+]
5.53 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 История одного села. [12+]**
**8.00 Ете егет. [12+]**
**9.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Әкиәттә. [6+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Ат уйнатып. [12+]**
**11.45 Елкән. [6+]**
**12.15 Преград. Net. [6+]**
**12.30 Квадратные метры. [12+]**
**12.45 Ап-асыҡ. [12+]**
**13.30, 4.45 Башкорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Воплощаем добрые идеи в жизнь. [12+]**
**18.00 Уфимские умы. [12+]**
**18.50 Хоккей. "Динамо" (Москва) - "Салават Юлаев". КХЛ.**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (баш. яз.).**
**23.15 Ҡурай-шоу. [12+]**
**23.45 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.15 Концерт "В братстве народов - сила России!" [12+]**
**2.45 Спектакль "Операция". [12+]**
**5.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**

## 13 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.30 Премьера. Праздничный концерт ко Дню работника сельского хозяйства. [12+]
15.05 Х/ф "Айболит-66". К 95-летию со дня рождения Ролана Быкова. [0+]
16.55 Д/ф "Джентльмен удачи. Смешной до слез". К 90-летию со дня рождения Савелия Крамарова. [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 Премьера. "Точь-в-Точь". [16+]
21.00 "Время".
23.00 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]

### РОССИЯ 1

6.40 М/ф "Смотрим мультфильмы".
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.30 "Истории Большой Страны". [12+]
13.30 Т/с "Фантазёр". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Юморина-2024". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Д/ф "Европа против России. Крестоносцы Гитлера". [16+]
23.50 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.25 Х/ф "Прощание славянки". [16+]
4.03 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Йома. [6+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 Ҡурай даны. [12+]**
**9.00 Орнамент. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Урал батыр. [6+]**
**11.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**12.00 Сулпылар-2024. [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.45 Дорога к храму. [6+]**
**15.15 Честно говоря. [12+]**
**16.00 Мегасело. [12+]**
**16.45 М/ф "Северные Амуры". [6+]**
**18.00 Елкән. [6+]**
**20.15 Патриот РФ. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Ашҡаҙар мондары. [12+]**
**0.30 Спектакль "Скупой". [12+]**
**2.15 Колесо времени. [12+]**
**3.15 Письма солдатам. [12+]**
**3.30 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**4.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Октябрь (Рабиғел ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (4) дүшәмбе | 5:46 | 7:32 | 13:30 | 16:40 | 18:34 | 20:20 |
| 8 (5) шишәмбе | 5:49 | 7:34 | 13:30 | 16:38 | 18:32 | 20:17 |
| 9 (6) шаршамбы | 5:51 | 7:35 | 13:30 | 16:36 | 18:29 | 20:15 |
| 10 (7) кесе йома | 5:53 | 7:37 | 13:30 | 16:33 | 18:27 | 20:12 |
| 11 (8) йома | 5:55 | 7:39 | 13:30 | 16:31 | 18:24 | 20:10 |
| 12 (9) шәмбе | 5:57 | 7:41 | 13:30 | 16:29 | 18:22 | 20:07 |
| 13 (10) йәкшәмбе | 5:59 | 7:43 | 13:30 | 16:27 | 18:19 | 20:05 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 5 ОКТЯБРЬ - УҠЫТЫУСЫЛАР КӨНӨ



**Йыл һайын йөҙҙән ашыу илдә 5 октябрь - Бөтә донъя уҡытыусы көнө билдәләнә. Был уҡытыусыларҙың һәм мәғариф өлкәһе хеҙмәткәрҙәренең һөнәри байрамы, был көндә уларҙың йәмғиәттең үҫешенә индергән баһалап бөткөһөҙ эше, ҡаҙаныштары баһалана.**

Нәҡ ошо көндә байрам итеүгә 1966 йылда Парижда уҙған Уҡытыусыларҙың статусы тураһындағы хөкүмәт-ара махсус конференция сәбәпсе була. 1994 йылда Бөтә донъя уҡытыусы көнө тәүге тапҡыр ошо датаға тура килтереп билдәләнә.

Рәсәйҙә лә Уҡытыусы көнө 1994 йылдан алып 5 октябрҙә үткәрелә башлай. Быға тиклем был байрам октябрь айының тәүге йәкшәмбеһенә тура килгән.

Һуңғы йылдарҙа уҡытыусы кадрҙарына ҡытлыҡ бөтә донъя илдәрендә күҙәтелә. Йәш педагогтар төрлө сәбәптәр арҡаһында мәктәптәргә эшкә килергә ашыҡмай. ЮНЕСКО-ның Статистика институты килтергән мәғлүмәттәргә ярашлы, 2030 йылға дөйөм белем биреүҙе тәьмин итеү өсөн генә лә илдәргә өҫтәп 24 миллион уҡытыусыны эшкә йәлеп итергә кәрәк буласаҡ, ә урта дөйөм белем биреүгә - ике тапҡырға күберәк. Уҡытыусылар айырыуса Африка илдәрендә күп талап ителә.

Уҡытыусы һәм уҡытыусылыҡҡа юғары иғтибар бүлеү, уларҙы үҫтереүгә көс һалыу - киләсәгебеҙгә булышлыҡ итеүҙе аңлау мөһим, тип белдерә донъя кимәлендәге ойошмалар.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**38-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Беләк. Тарауыл. Агент. Тәкәт. Башаҡ. Алгебра. Айбалыҡ. Шаран. Тал. Ил. Янсыҡ. Таш. Ҡумта. Ыҙма. Литр. Рәсем. Ыҡ. Ус. Шарт. Аҡтамыр. Алҡым. Ғибәҙәт. Нәзәкәт.

**Вертикаль буйынса:** Ашъяулыҡ. Тубырсыҡ. Ля. Ҡулса. Түрә. Ҡорған. Таҡта. Биржа. Тырма. Мәрәкә. Егет. Шыршы. Ар. "Һә". Келәт. Тут. Баш. Ҡарта. Айыу. Азот. Ҡан. Алмаш.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 октябрь "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

**11 октябрь "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев). 12+

**12 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

**13 октябрь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**11 октябрь "Униженные"** (З. Биишева), драма. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**9 октябрь "Ҡурсаҡ театрына сәйәхәт"**, экскурсия, РФ-ның халыҡ артисы Айрат Әхмәтшиндың оҫталыҡ дәресе. 18.00 0+

**10 октябрь "Удивительное путешествие во времени"** (В. Щербакова), иммерсив спектакль. 19.00 12+

**11 октябрь "Ямаҡай бәпкә"** (Г.-Х. Андерсен). 14.00 0+

**"Сабантуй"** (В. Аношкин). 12.00, 15.00 12+

**12 октябрь "Вечно это 345-я!"** (Ж. Кусаинова). 12.00, 15.00 6+

**"О чем поет осень?"** (В. Щербакова). 18.00 0+

**13 октябрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**7 октябрь Антонио ди Кристофано концерты.** Италия, фортепиано. 6+

**8 октябрь Ни Ченьчжэ концерты.** Ҡытай, фортепиано. 6+

**9 октябрь "БашҡортАРТстан"** халыҡ-ара заман сәнғәте фестивале. 6+

**10 октябрь БР Ҡурайсылар дәүләт ансамбле** концерты "Башҡортостан" ДКЗ сәхнәһендә. 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**8 октябрь "Дорожная сказка"** (Л. Ниғмәтуллина инсц.), балалар әкиәте. 10.00 0+

**"Голубцы"** (А. Финк), комедия 16+

**9 октябрь "Дорожная сказка"** (Л. Ниғмәтуллина инсц.), балалар әкиәте. 10.00 0+

**10 октябрь "Ынйыҡай менән Юлдыҡай"** (Х. Ғәбитов, Г. Саламатова), шиғри драма. 12+

**12 октябрь "Сказка о рыбаке и рыбке"** (А. Пушкин, Л. Ниғмәтуллина инсц.), әкиәт. 13.00 0+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 октябрь Премьера! "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 12+

**11 октябрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия. 18.00 12+

**12 октябрь "Эх, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), комедия. 18.00 12+

**13 октябрь Премьера! "Сказка о купце и работнике его Балде"** (А. Пушкин, В. Жуковский), әкиәт. 12.00 0+

## БР Милли музейы

**9 октябрь "Р. Килмәмәтов. Һөйөү менән Башҡортостан хаҡында"** күргәҙмә. 15.00 12+

**11 октябрь "Алға, Башҡортостан!"** Республика көнөнә диктант. 11.00, 15.00 12+

**"Берҙәм ғаиләлә"** экскурсия. 6+

**12 октябрь "Йәш археолог курсы. Яңы миҙгел"** сара. 14.00 6+

**"Ғаилә өсөн экскурсия".** 15.00 0+

✓ *Бер яҡтан, Мостай Кәрим үҙе фронтовик, һуғышты үткән кеше булараҡ, ҡурҡыуҙың нимә икәнен яҡшы белә. Был ҡурҡыуҙы нисек еңергә икәнен дә белә. Ул, әлбиттә, яу ҡырын ташлап киткән һалдаттарҙы ла күргәндәр.*



*МӘҘӘНИ МАЙҘАН*

# ҠАРА ҺЫУҘАРҒА БАТЫП...



**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры премьераға әҙерләнә. Оҙаҡламай театр сәхнәһенә халыҡ шағирының "Ҡара һыуҙар" поэмаһы буйынса эшләнгән спектакль сығасаҡ. Ул тәү тапҡыр сәхнәләштерелә. Ошо мөһим яңылыҡ айҡанлы беҙ спектаклдең режиссеры Илсур ҠАҘАҠБАЕВҡа бер нисә һорау бирҙек.**

**Илсур Юлай улы, премьера Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең юбилейына тип махсус әҙерләнәме?**

- Эйе, "Ҡара һыуҙар" спектаклен Мостай Кәримдең юбилейына тип әҙерләйбеҙ. Театр, Мостай Кәрим берәй әҫәре буйынса спектакль ҡуйырға ине, тип мөрәжәғәт иткәс, шундуҡ тиерлек эшкә тотондом. Әҙәбиәт һөйөүселәр яҡшы белә, классигыбыҙҙың күп әҫәрҙәре сәхнәләштерелгән, ә "Ҡара һыуҙар" поэмаһы бер тапҡыр ҙа ҡуйылмаған. Мин иһә был поэманы сәхнәләштереү тураһында күптән уйлап йөрөй инем инде, шуға бер ниндәй ҙә икеләнеү булманы. Бер һүҙһеҙ, был ҡатмарлы йөкмәткеле поэманы сәхнәлә күрһәтеү эҙләнеү ҙә, айырым бер тырышлыҡ та талап итә.

**Поэманы сәхнәләштереү тураһында күптән уйлап йөрөй инем, тинегеҙ. Улай булғас, шуны ла асыҡлап әйтһәгеҙ ине: поэма һеҙҙе нимәһе менән үҙенә йәлеп итте?**

- Бөтәһенән элек, "Ҡара һыуҙар" үҙенең ниндәйҙер бер сәйерлеге менән арбаны. Сюжет буйынса, Яҡуп тигән егет һуғыш барған саҡта - артобстрел мәлендә, ҡасып китә. Егеттең ҡасҡанын күреп, үҙебеҙҙекеләр уға атып та ҡарай. Ул барыбер тере ҡала, һәм хикәйәсе, йәғни автор, уны беҙҙең яҡҡа һөйрәп тигәндәй алып ҡайта. Сәхнә әҫәре итеп эшләгәндә режиссерҙың үҙенең ҡарашы һәм мөнәсәбәте була, был спектаклдә лә һеҙ уны күрерһегеҙ. Яҡупта тере ҡалыу теләге шул тиклем көслө була, немец колоннаһы килеп сығып, уны танк тапап үтеп китһә лә, ул иҫән тороп ҡала. Ун йылдан һуң уны ҡатыны эҙләп килә. Уларҙың осрашыуы үҙе бер ваҡиға.

Нимәһе сәйер, тиерһегеҙ. Бер яҡтан, Мостай Кәрим үҙе фронтовик, һуғышты үткән кеше булараҡ, ҡурҡыуҙың нимә икәнен яҡшы белә. Был ҡурҡыуҙы нисек еңергә икәнен дә белә. Ул, әлбиттә, яу ҡырын ташлап киткән һалдаттарҙы ла күргәндәр. Шуға ҡарамаҫтан, Мостай Кәрим үҙенең геройы Яҡупка ҡағылышлы былай тип яҙа: "Касыу өсөн ҡурҡыу ғына сәбәп түгел..."

Эйе, Яҡуптың мөхәббәте бар. Яу ҡырына китер алдынан ул шундай һүҙҙәр әйтә: "Мин үҙемә кәрәк түгел, мин кәрәкмен һөйгәнемә, аңлайһыңмы?" Яҡуптың был ике аҙымы: ҡасыуы һәм ҡасыуын ошо һүҙҙәр менән аҡлауы уйҙырма түгел. Ысынлап та, ул яратыуы шулай көслө булған өсөн шул аҙымға бара. Бер яҡтан, үҙендең яуҙаштарынды ҡалдырып китеү - ғәфү ителә торған ҡылыҡ түгел. Был һине ғүмерең буйы оҙата барасаҡ бер ҡара тап. Икенсе яҡтан, һәр бер кешенең тормошо - ул берҙән-бер. Был тормош әҙәм балаһының донъяға һалған беренсе ауаздан башлана һәм артабан кеше ниндәйҙер этаптарҙы үтергә тейеш: мәсәлән, егет кеше кәләш алырға, үҙенән һуң вариҫтар ҡалдырырға тейеш. Һуғыш иһә бөтә яҡлап та әҙәм балаһының пландарын боҙа. Һөйөргә лә, һөйөләргә лә өлгөрмәгән йәп-йәш егеттәр, бәләкәй балаларын иркәләп туймаған атайҙар һуғышта һәләк була, йәш ҡатындар тол ҡала һ.б. Һуғыш менән килгән яуызлыҡ, афәт, әлбиттә, Мостай Кәрим һүҙҙәре менән әйткәндә, кешене ҡара һыуҙарға батыра. Шул йәһәттән, Яҡуптың ҡылығы, бер яҡтан, еңейәт булһа, икенсе яҡтан, йәшәү теләге, ғүмер кәҙере тураһындағы ниндәйҙер фәлсәфәүи уйҙарға ла һала. Шуға ла уның эшен нисектер яңынан, яныса ҡарарға ла була.

**Был спектаклдең бөгөнгө тамашасы күңеленә үтеп инеренә ышанысығыҙ көслөмө?**

- Йәшәү, тормош мәғәнәһе, мөхәббәт - былар мәңгелек тема. Ул хәҡтә эҙләнеүҙәр йәштәргә ҡыҙыҡ булыр, тип уйлайым. Һәр хәлдә, "Ҡара һыуҙар"ға килгәс, актерҙарыбыҙҙың уйнауын ҡарағас, тамашасының мөнәсәбәтен асыҡ күрербеҙ. Был спектакль уларҙа ниндәйҙерәк уй-фекерҙәр тыуҙырыр, тыуҙырасаҡ - былар беҙҙең өсөн бик мөһим. Әлбиттә, заманса яңғыраш алған сәхнә әҫәре тамашасыны битараф ҡалдырмаҫ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**һорауҙар бирҙе.**

# ТОЙҒОЛАРҘЫҢ ТЕЛЕ ЮҠ



**Юрий Бондаревтың "Донъя күп телле, әммә бөтә кешеләр ҙә бер иш илайҙар һәм көләләр", тигән ҡанатлы һүҙҙәре бар. Мәскәү драматургы Мәлекә Икрамованың пьесаһы буйынса ҡуйылған "Доктор" спектакленең премьераһын ҡараған ваҡытта билдәле яҙыусының ошо һүҙҙәре иҫкә төштө.**

Ысынлап та, Ер шарында йәшәүсе кешеләр ниндәй телдә һөйләшеүенә, ниндәй төҫтә булыуына ҡарамаҫтан, хистәрен бер үк төрлө белдерәләр. Илағанда йә көлгәндә һүҙҙәр телһеҙ тойғоларҙың ҡоршауы була алмай. Билдәле рус яҙыусыһының һүҙҙәре, бәлки, иҫкә төшмәҫ тә ине, әммә был спектаклдә сығарыуҙа минең дә өлөшөм бар, сөнки рус телендәге әҫәрҙе башҡортсаға аударҙым, пьесалағы персонаждарҙың хис-тойғоларын үҙ телебеҙҙә мөмкин тиклем аңлайышлыраҡ итеп биреп, спектакль барышында тамашасы пьесаның икенсе телдән тәржемәләнеүен һиҙмәһен тип тырыштым. Спектаклде ҡуйыусы театрҙың баш режиссеры Денис Нурғәлин башта артистарға пьесаны төп нөсхәһендә уҡып ишеттерҙе. Оҡшаттылар, аңлап ҡабул иттеләр. Икенсе көндә ҙур тулҡынланыу менән башҡортсаһын үҙем уҡыным. Был тәүге тәжрибәм түгел, тәржемә менән күптән шөғөлләнәм, әммә был юлы коллегаларым алдында үҙемде уҡыусы балалай тойҙом. Аллаһҡа шөкөр, халыҡ артистары, театр эшендә маһир сәхнә оҫталары тәржемәм менән ҡәнәғәт булдылар! Тамашасылар ике теллелекте һиҙгәнмелер, белмәйем, әммә бая өҫтә әйткән уҡыусылай, спектаклдә ҡараған ваҡытта артистарҙың телмәренә иғтибар итергә тырыштым. Әммә, әлеге лә баяғы, артистарҙың оҫта уйнауы, төрлө хистәргә мөкиббән китеп бирелә алыуы арҡаһында текстағы һүҙҙәр тойғоларҙа күмелеп, тәржемәләге ҡытыршылыҡтар ҡаҡайып тормай, был пьесаны улар донъяның башҡа телендә лә шул уҡ оҫталыҡ менән башҡарырҙар ине, тигән уйҙа ҡалам.

Ә спектакль шәп килеп сыҡты! Күҙ теймәһен, баш режиссерҙың сираттағы ижад емеше, йомшағыраҡ итеп әйткәндә, һоҡланғыс! Быны мин бик үҙенсәлекле, талапсан Сибай тамашасыларының алҡыштарынан сығып әйтәм: улар шундай йылы мөнәсәбәттәре менән спектаклдең оҙон ғүмерле киләсәгенә фатиха бирҙеләр, минеңсә.

Әлбиттә, һәр спектаклдең репертуарҙан төшмәүенә иң тәүҙә авторҙар "гәйепле". Ана бит, классик әҫәрҙәр быуаттар буйына сәхнәнән төшмәй! Был спектаклдең тыуыуының бәләкәй генә үҙ тарихы бар. Денис Сәлим улы пьесаны сырмалсыҡ интернет селтәренән табып алған һәм шундуҡ үҙ иткән. Әҙәбиәт бүлеген етәкләүсе булараҡ, әле таныш булмаған Мәликә ханыма бәйләнешкә сыҡтым. Бик ыңғай ҡарашлы, лояль ҡатын булып сыҡты ул. Пьесаһын сәхнәләштереү теләгебеҙ барлығын ишеткәс, ҡыуанып китте. Һөйләшеүенән ихласлығы бөркөлөп тора. Персонаждарҙың исемдәрен, мәҫәлән, Игорь Моисеевичты Ибраһим Мусовичка үҙгәртеүгә лә ризалыҡ бирҙе.

Шулай башланып киткәйне яңы спектакль өҫтөндәге эш, Аллаһҡа шөкөр, премьераһын ҡарарға насип булды. Автор үҙе була алманы, әммә октябрҙә үҙ пьесаһы буйынса ҡуйылған спектаклдә ҡарарға килергә теләген белдерҙе. Килһен, бик шат булырбыҙ! Икенсе телдә һөйләшә башлаған балаһын күрер. Бәлки, ул да ҡыуанып, сөнки ниндәй телдә һөйләшһәк тә, хис-тойғоларыбыҙ бер иш бит!

**Радик ӨМӨТҠУЖИН,**
**А. Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт театрының әҙәби-драма бүлеге етәксеһе.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠЫЛҺЫҘ ЕГЕТ...

## ауыҙлыҡһыҙ ат

Ҡойоға таш ташлау еңел, алыуы ауыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Атом быуатында кешеләрҙе әйберҙәр түгел, ә ул әйберҙәрҙең тәҙәлөшө борсой.

**(Иосиф Бродский).**

Арыҫлан - бөтөн кейектәрҙең батшаһы, ләкин ул йорт хайуаны була алмай. Шуның һымаҡ, мөхәббәт тә артыҡ көслө тойғо һәм ул бәхетле никах нигеҙе була алмай.

**(Роберт Стивенсон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ғаилә йәшәгән: ире, ҡатыны, мәктәп йәшендәге ҡыҙҙары. Татыу йәшәгәндәр, һәр хәлдә, күршеләре шулай тип иҫәпләгән, сөнки был ғаиләлә талашҡан, бәхәсләшкән тауыш ишетелмәгән, атай менән әсәй балалары өсөн өҙөлөп торған. Әммә ҡыҙ бала уларҙың ғаиләһе бәхетле тип иҫәпләмәгән. Сөнки...**

**Бер саҡ ул мәктәптән ҡайтып, шым ғына өй ишеген асып инә һәм ата-әсәһенең берберәһенә нәфрәтләнеп талашҡанын ишетеп ҡала. Баланың ҡайтып ингәнен һиҙенеү менән ата-әсә талашыуҙан туктай, ә йөҙҙәрендә - йылмайыу. Был хәл ҡыҙыҡайҙы шул тиклем аптырата. Ҡыҙыҡай үҫеп, үҫмер ҡорона ингәнсе дауам итә былдай хәл: ата-әсә бер-берененен күрә алмаһа, үҙ-ара талашһа ла, бала алдында үҙ-ара мөнәсәбәтен һиҙҙермәйҙәр. Бер саҡ ҡыҙы әсәһе менән әйтешеп китә. Шул саҡта әсә: "Һин ҡалай игелекһеҙ! Беҙ атайың менән һинең өсөн үҙ бәхетебеҙҙән баш тарттыҡ. Һин тулы ғаиләлә үҫһен тип, айырылышманыҡ..." - тип ысҡындыра. Ҡыҙыҡай әсәһенең бер саҡ теләнән ысҡынасаҡ был һүҙҙәргә әҙер була, сөнки ул атаһы менән әсәһе араһындағы мөнәсәбәт тураһында гел уйланып йөрөй, үҙенсә һығымталар яһай. Һәм шул һығымтаһын әсәһенең йөҙөнә бәреп әйтә лә инде: "Мин һеҙҙең бер-берегеҙҙе яратмауығыҙҙы белә инем. Үҙегеҙҙе бәхетһеҙлеккә дусар иттегеҙ ҙә, хәҙер шуның өсөн мине ғәйепләйһегеҙ. Мин бит һеҙҙең икегеҙҙе лә яратам, шуға ла мин һеҙҙең икегеҙҙең дә бәхетле булыуығыҙҙы теләйем. Бергә бәхетле була алмағас, айырым бәхетле булырға тырышырға ине. Мин һеҙгә сираттап йөрөр инем, һеҙҙең шатлыҡҡа, бәхеткә ҡыуанып инем. Минең эргәмдә ике кеше булыуы мөһим, тип уйланығыҙмы? Юҡ, минең эргәмдә ике бәхетле кеше булыуы мөһим ине. Мине һеҙҙе бәхетле итеп күреү бәхетенән мәхрүм иттегеҙ. Һеҙ минә, бәхетле ғаилә нисек булырға тейеш, тигән өлгөнө күрһәтмәнегеҙ. Хәҙер уны, бәхетле ғаилә өлгөһөн, минең үҙемә уйлап сығарырға тура киләсәк. Әммә мин һеҙҙең кеүек мөхәббәтте үлтереп быға өлгәшмәйәсәкмен..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2750
Заказ - 1722